✓ *Шарап кешене дүрт төрлө ҡиәфәткә керетә: тәүҙә ул павлинға оҡшап кәпәренә, ғорур булып ҡылана; артабан ул маймыл һымаҡ ҡылана башлай, барыһы менән дә шаяра, уйнай; тағы ла хәмер өҫтәп алғас, арыҫландай ғорурға, үҙһүҙлегә әйләнә; иң һуңғы рюмканан һуң ул сусҡаға оҡшап ҡала.*
**Абдуль Фарадж.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кiске Өфө

17 - 23 МАРТ (БУРАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№11 (481)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡанға һеңгәнде...**
йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай



3

**Инәйҙәребеҙ...**
тамбурлы сигеү серен аса



6

**Иргә хыянат илгә хыянатмы?**



Йәки "Ай тотолған төндә"гә яңыса ҡараш

8-9

**Берәй утрауҙа ҡалһа ла...**
йәшәү рәтен табасаҡ



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфөбөҙҙә ниндәй етешһеҙлектәрҙең төҙәтелеүен, ниндәй үҙгәрештәрҙең тормошҡа ашырылыуын күрергә теләр инегеҙ?



***Рәсимә УРАКСИНА, яҙыусы, педагог:*** Өфөгә 1962 йылда интернатҡа уҡырға килгәйнем. Ауыл балалары өсөн баш ҡалабыҙ бик ҙур, матур тойола ине. Шул ваҡыттан алып беҙ уның менән бергә үҫтек. Хәҙер бына уға ярты быуат ғүмер үтеп тә киткән. Баш ҡалабыҙ шулай күҙ алдында үҫте, матурланды, төҙөкләндерелде. Әйткәндәй, уны йәшелләндереүгә беҙ, интернат балалары ла, үҙ өлөшөбөҙҙө индерҙек. Дәрестәрҙән һуң ҡулдарыбыҙға - көрәк, соҡор ҡаҙыу өсөн кәйлә тотоп, Октябрь проспектына сығабыҙ ҙа ағастар ултыртабыҙ. Әҙер үҫенте булмаһа, яҡындағы урмандан үҫентеләр ҡаҙып алып килә инек. Хәҙер мин, үкенескә күрә, ҡала урамдарына йәки үҙҙәре уҡыған мәктәп тирәһенә ағас ултыртып йөрөүсе уҡыусыларҙы күргәнем юҡ. "Зеленхоз" эшселәре лә күбеһенсә сәскәләр ултыртыу йәки ҡороған ағастарҙы ҡырҡыу менән генә шөғөлләнә. Ә бит ҡартайған, сирле ағастар урынына яңыларын ултырта барырға кәрәк.

Ҡаланы йәшелләндереү хеҙмәтенең заманса һәм милли дизайны булырға тейештер, тип уйлайым.

**Мәҫәлән, нишләп әле Өфөбөҙҙә "Урал батыр" эпосы менән бәйле берәй парк йә тәбиғәт мөйөшө булдырмаҫҡа?**

Унда эпос геройҙарын һынландырырға мөмкин, тере һыуҙы сағылдырған кескәй генә шишмә йәки фонтан бәреп торһон. Бына тигән ял урыны ла, балалар өсөн белем сығанағы ла булыр ине ул. Шул уҡ "Аҡбуҙат"ыбыҙҙы ла үҙенсәлекле итеп һынландырып булыр ине.

**Хатта ки урам һепереүсегә һәйкәл бар баш ҡалабыҙҙа, ә ниңә рухи ҡиммәттәребеҙҙе мәңгеләштереүҙән тартынабыҙ? Балалар баҡсаларын, мәҙәниәт усаҡтары биналарын тирмә рәүешендә төҙөп, ишектәрен, ҡапҡаларын милли орнаменттар менән биҙәп ҡуйыу ҙа ҡалабыҙ йөҙөнә ҡабатланмаҫ бер биҙәк булыр ине.**

Милли колорит йәһәтенән мин Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астананы миҫалға килтерер инем. Ҡаҙаҡтар бер нигә ҡарап тормай, баш ҡалаларын үҙ рухына, тарихына ярашлы итеп, шул уҡ ваҡытта заманса стилдә төҙөй, уны хәҙер танырлыҡ та түгел.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Ҡалалағы етешһеҙлектәрҙе барлай башлаһаң, бында бит бик күп өлкәне күҙҙән үткәрергә тура килә: уның тышҡы күренешен, төҙөклөгөн, таҙалығын, тәртип хәлдәрен, сауҙа, юл-транспорт торошон, хеҙмәтләндереү сифатын һәм башҡаларҙы. Ситтән килгәндәрҙең күҙенә низәр салыналыр - уныһы миңә ҡараңғы, ә бына ҡала тормошо менән ҡайнап, ошонда йәшәгән кеше булараҡ, иң тәүҙә шуны әйтмәй булдыра алмайым.

**Һуңғы осорҙа Өфөлә асарбаҡтар күбәйҙе.**

Ике ҡулдарына ла моҡсайҙарын тотоп, алама , бысраҡ сумкаларын артмаҡлап, сүп-сар араһында соҡоноуҙары етмәгән, хәҙер улар аптекаларҙы һәм парфюмерия магазиндарын да үҙ итеп алды. Шуныһы ла ғәжәп: һатыусылар уйлап та бирмәйенсә уларҙың бысраҡ ҡулынан тиндәрҙе иҫәпләп алып, спиртлы арзан төнәтмә йә лосьон биреп сығарып ебәрә. Бындай асарбаҡтар икәү-өсәүһе бер булып, өймәкләшеп йөрөйҙәр. Ҡарап тороуға үҙ-үҙҙәрен аҫырай, эшләй алырлыҡ һау-сәләмәт ир-егеттәр, ә бына шундай хурлыҡлы "рәхәт тормош"ҡа һалышҡандар. Был күренеште бөтөрөп булмағанда ла, уларҙың йүнле кешеләр рәтендә йәмәғәт урындарында бер ниндәй оялыуһыҙ йөрөп ятыуын бер аҙ сикләп булмаймы икән ни?..

Мине борсоған тағы ла күп кенә мәсьәләләрҙең береһе - ҡала урамдарында юл-транспорт хәрәкәте ҡағиҙәләренең йыш һәм тупаҫ боҙолоуы һәм ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең кәрәк саҡта кәрәк урында бер ҡасан да булмауы. Мин бында автоһәләкәттәрҙе күҙҙә тотмайым, быныһы машинаһыҙ бер аҙым атларға йыбаныусы эшем эйәләренең үҙ проблемаһы. Автомашиналарҙың ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡайнап тороуы арҡаһында ҡала экологияһына килтерелгән енәйәтсел зыян тураһында ла түгел һүҙем. Йәйәүлеләргә хәүеф-хәтәрһеҙ генә тротуарҙан йөрөү мөмкинлеге лә бөтөп килә бит - бына шул борсой. Тротуарға рәт-рәт итеп арҡыры теҙеп ҡуялар машиналарын - йәйәүле хет осоп йөрөһөн. Буйтым ҡыҫтапмы ҡыҫтайҙар, өҫтөнә менеп киләләр. Урам хәрәкәте көсөргәнешле булған хәүефле урындарҙа, исмаһам, юл инспекцияһы йә полиция посы булдырһындар ине.


**(Дауамы 2-се биттә).**


ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МАГНИТ ӨЙӨРМӘҺЕ...

## һөжүм итә, итәсәк әле



**Туғыҙынсы март кисендә башланған һәм әлегә тиклем дауам иткән магнит өйөрмәһе (магнитная буря) 2006 йылдан алып иң көсөргәнешлеһе һәм оҙайлыһы, тип танылды. Ялҡынланыу зонаһы әүҙемләшеү һөҙөмтәһендә Ҡояш Ер тарафына плазма ойошҡаны ташланы. Был хаҡта Ер магнитлылығы, ионосфера һәм радиотулҡындар институтының йыһан һауа торошон күҙаллау үҙәге директоры Сергей Гайдаш белдерҙе.**

Ҡояштан бүленеп сыҡҡан зарядлы өлөшсәләрҙең Ерҙең магнит мөхите менән аралашыуы һөҙөмтәһендә ҡеүәтле өйөрмә барлыҡҡа килә. Бындай "өйөрмә" электрон ҡорамалдарҙы сафтан сығарыуы, радиобәйләнештәрҙе өҙөүе, электр селтәрҙәрендә проблемалар тыуҙырыуы ихтимал. Ҡояшта киҫкен тоҡаныу 7 мартта башланған һәм уның зарядлы өлөшсәләре ташҡыны беҙҙең планетаға 8 март килеп етеп, геомагнит өйөрмәләре индексын 5 берәмеккә тиклем күтәрһә, 9 март йома кис ул 7 берәмеккә еткән. Ерҙең торошо менән планета-ара магнит мөхите (поле) араһындағы бәйләнештәр һөҙөмтәһендәге геомагнит әүҙемлегенең ошондай кимәлгә күтәрелеүе ғәҙәттә март һәм сентябрь айҙарында күҙәтелә.

Ерҙә уртаса ҡеүәттәге магнит өйөрмәһе 13 мартта ла күҙәтелде, ләкин уның әүҙемлеге баҫыла төштө һәм унан һуңғы ике көн эсендә көслө магнит өйөрмәләре көтөлмәй, тип хәбәр итә белгестәр.

Һүҙ ыңғайы шуныһы ла мәғлүм булһын: яҡындағы 1,5 йыл эсендә Ергә 6 магнит өйөрмәһе ябырылыуы көтөлә, сөнки тап ошо осорҙа Ҡояштың ифрат көслө әүҙемлеге күҙәтеләсәк. Белгестәр әйтеүенсә, бындай ваҡыттарҙы метеоһиҙгерлек үҙенсәлектәре көслө булған кешеләр ауыр кисерә, баш ауыртыу һәм әйләнеү, ҡан баҫымы күтәрелеү, йөрәк ауыртыу, йоҡоһоҙлоҡ, хәлһеҙлек, насар кәйеф өҫтөнлөк итә. Ундай кешеләр өйөрмә башланырҙан ике көн самаһы элек үк үҙҙәрендә уның тәьҫирен һиҙә башлай. Ҡайһы берәүҙәрҙең быуындары һыҙлай, күреү һәләте һәм хәрәкәт йүнәлештәре боҙола. Был осор айырыуса йөрәк-ҡан тамырҙар системаһы сире менән яфаланыусылар һәм бигерәк тә миокарда инфаркты, мейеһенә ҡан һауыу кисергәндәр өсөн хәүефле.


**(Дауамы 2-се биттә).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МАГНИТ ӨЙӨРМӘҺЕ...

## һөжүм итә, итәсәк әле

(Башы 1-се биттә).

Ошо өлкәлә тикшеренеүҙәр алып барыусы ғалим - Ҡояштың Ергә тәьсирен өйрәнеүсе физика-математика фәндәре докторы Тамара Бреус магнит өйөрмәләре ваҡытында үҙенде хәүефһеҙлектә тотоу буйынса бер-нисә кәңәш бирә:

- Магнит өйөрмәһенән ҡайҙалыр "ҡасып" ҡотолоу мөмкин түгел, шуға күрә һәр кем ябай ғына кәңәштәргә ҡолаҡ һалһын ине. Өйөрмә мәлендә ауыр физик эш башҡарырға, алкоголь, майлы аҙыҡ һәм тәм-том ҡулланмаҫҡа. Йөрәк сирле кешеләр һәр ваҡыт үҙҙәре ҡулланған дарыуҙарын бергә алып йөрөтһөн. Валериана, эвкалипт, ер еләге япраҡтарынан сәй, алоэ япрағы һуты ла ярҙам итә. Ашҡаҙаны һау кешеләргә ярты төймә аспирин ҡабул итеү ҡамасауламаҫ, сөнки ул ҡанды шыйығайта һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәрен иҫкәртеүгә булышлыҡ итә. Эшләкле осрашыу, килешеүҙәр төҙөү кеүек мөһим эштәрегеҙҙе, медицина манипуляцияларын был ваҡытҡа тап килтермәҫкә тырышығыҙ. Туҡланыу рационығыҙҙы ҡарап сығығыҙ: организмда артыҡ шыйыҡлыҡ туплаһыуға килтергән тоҙло ризыҡтарҙы, маринад, ыҫланған колбаса, ит, ҡыҙыл шарап, сыр кеүек аҙыҡ-түлекте ҡулланмағыҙ.
- Саф һауа һулағыҙ. Бының өсөн мотлаҡ урамда йөрөү кәрәкмәй, өйҙә һәм эштә форточка, тәҙрәләрҙе асығыҙ.

Тағы ла бер мөһим иҫкәрмә: артыҡ тәьҫирләнеүсән һәм шикләнеүсән кешеләр араһында, метеоөйөрмә йоғонтоһона бирешмәһә лә, ошондай көндәрҙә үҙ-үҙҙәрен "ауырыу хәләнә" еткереүселәр проценты бар. Шуға күрә "магнит" көндәргә артыҡ нык иғтибар бирмәҫкә, ләкин ябай ғына һаҡланыу сараларын иҫтә тоторға кәрәк. Сәләмәт булайыҡ!

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Быйылғы ҡыш ҡарһыҙ, йылы булды. Атабабаларыбыҙ был күренеште йәйҙең һыуыҡ, ямғырлы булырына юрар ине. Әммә белгестәр күп кенә күҙаллауҙар, тикшеренеүҙәргә таянып, быйылғы йәй эҫе һәм яуымтөшөмһөҙ буласаҡ, тип иҫәпләй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уңыш өсөн ҡайғырырға кәрәкмәй, 2010 йылдағы кеүек ҡаты ҡоролоҡ булмаясаҡ, тиҙәр. Яҙғы ташҡындың да көслө килеүе көтөлмәй. Ағиҙел йылғаһы ҡар япмаһының һыу запасы алдағы йылдарҙағы уртаса күрһәткестәрҙән 50-60 процентҡа түбән. Шулай уҡ Ағиҙелдәге боҙҙоң ҡалынлығы 40-60 сантиметр (был норманан 25 процентҡа түбән), ҡар 20-40 сантиметр ғына яуған (был норманан 30-50 процентҡа түбән).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Өфөбөҙҙә ниндәй етешһеҙлектәрҙең төҙәтелеүен, ниндәй үҙгәрештәрҙең тормошҡа ашырылыуын күрергә теләр инегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Марат ИШМӨХӘМӘТОВ, халыҡ табибы, Бөрйән районы:*** Мин Өфөлә йыш ҡунаҡ. Үҙ ҡарашымдан сығып, ҡала халҡының холоҡ-ғәҙәттәрен аңлайым да һымаҡ, ләкин ҡайһы саҡ миңә улар йәл дә булып китә. Аңлатып бирәйем. Бер саҡ шулай төндә Октябрь проспектындағы йорт янында торам. Тап ошонда табан "Ашығыс ярҙам" машинаһы килә. Бына ул туҡтаны ла, водитель менән врач төшөп, эргәләге йорттарҙың номерын эҙләй башланы. Был "процедура"ға улар алтынға тиң 12 минут ваҡытын әрәм итте, әгәр ауырыу ауыр хәлдә булһа, был ваҡыт уның ғүмерен ҡотҡарыуға етәсәк ине. Үкенескә ҡаршы, улар кәрәкле йорт номерын барыбер таба алманы. Бәхеткә, изге күңелле бер үткенсе уларға юл өйрәтеп ебәрҙе. Өфөләге йорттарҙың яртыһынан күбеһенең номерҙары юҡ икәнен беләм. Үҙҙәренә кәрәкле йортто таба алмай йөрөүселәрҙе һәм бигерәк тә таксистарҙы йыш осратырға тура килә. Ә баш ҡала ҡунаҡтарына нишләргә? Ҡалалағы бөтә йорттарға ла асыҡ итеп ҙур һандар менән номер һуғып сығыуы ҡыйын микән ни? Күп ҡатлы йорттарҙың лифттарында ла ҡайһы фатирҙың нисәнсе ҡатта икәнлеген яҙып сығыу яҡшы булыр ине.

Ҡала халҡының һаулығы өсөн ҙур хәүеф тыуҙырыусы афәт хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтеп китәйем. Ул - ҡала атмосфераһын баҫып киткән һәм уны ағыулы ау ише сорнап алған автомобиль һөрөмө. Бынан бер биш йыл элек кенә әле мин бында ул ҡәҙәре лә ҡуйы һөрөм күрмәй инем, ҡар ҙа ап-аҡ ине Өфөлә. Хәл шулай дауам итһә, был һөрөм тиҙҙән ҡала халҡының тын юлдарын, үпкә-бауырҙарын, бөйөрҙәрен дә ҡаплап аласаҡ бит. Мөхтәрәм ҡала хужаларына, улар иңенә бөгөндән онкология үҙәге, хоспистар төҙөү бурысы йөкмәтелмәҫ борон, өфөләләрҙең ғүмеренә янаған ошо афәткә ҡаршы ашығыс саралар күрә башларға кәрәк.

Тағы ла бер мәсьәлә. Иғтибар итһәгеҙҙәр: күп ҡатлы йорт алдары тотош машина менән ҡапланды - йөрөү түгел, аша үтеү өсөн дә юл юҡ. Ә бит йорт алды машиналар ҡуйыу өсөн тәғәйенләнмәгән бер ҙә. Бында балалар уйнарға, ҡарт-ҡоро сығып эскәмйәлә ял итеп ултырырға тейеш. Унан, донъя булғас, төрлөһө була: йә мебель ташыусы (күсенеүселәрҙән) йөк машинаһы, йә сүп-сар таҙартыусы техника, йә баяғы "Ашығыс ярҙам" һәм, Алла һаҡлаһын, янғын машиналары килеүе ихтимал. Ә йорт янына юл бикле. Минең тәҡдим: быңдай башбаштаҡлыҡтарға закон нигеҙендә сик ҡуйырға - штраф түләтергә, машиналарын дөйөм туҡталҡаға мәжбүри алып китергә, башҡа саралар күрергә кәрәк. Шунһыҙ тәртип булмаясаҡ.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, әйҙәгеҙ, ошо теманы дауам итеп, баш йортобоҙ Өфөләге үҙегеҙгә оҡшаған һәм оҡшамаған күренештәр, урындар, шулай уҡ өфөләләрҙең тәртибе, үҙ-ара мөнәсәбәттәре тураһында яҙып ебәрегеҙ әле. Һеҙҙең фекерҙәр, тәҡдимдәр гәзитебеҙҙең һәр һанында "Баш йортта..." тигән рубрикала даими урын алыр, тип өмөтләнәбеҙ. Хаттар, шылтыратыуҙар көтәбеҙ.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Салауат ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: март айында ла 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Мартта гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ – башҡортса "Көрьән-Кәрим", өс уҡыусы "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ.**

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныштоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсә: 17 мартҡа тиклем яҙылһалар, апрелдән өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Өс айға яҙылыу хаҡы - 174 һум 12 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**
Электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, **kiskeufa@ufacom.ru**
Блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Нидерландтар Короллегенең Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы вәкиле Рональд Келлер менән осрашыу үткәрҙе. Осрашыуҙа ике ил араһындағы мотлаҡ үҫтереүҙе талап иткән йүнәлештәр билдәләнде. Был, тәү сиратта, ауыл хужалығы. "Беҙ ит, һөт, картуф етештерергә әҙер. Һеҙҙең белемегеҙ һәм технологиягыҙ кәрәк. Илселектә, йә булмаһа берәй махсус күргәҙмәлә беҙҙең республиканың презентацияһын үткәреү мөмкинлеген ҡарарға тәҡдим итер инек", - тип белдерҙе Башҡортостан Президенты. "Беҙҙең визиттан һуң, әйткәндәй, делегацибыҙ 70-тән ашыу компания исеменән сығыш яһай, мөнәсәбәттәрҙе әүҙемерәк үҫтерербеҙ, тип уйлайым", - тип билдәләне Рональд Келлер.

✓Республика Президенты социаль хеҙмәттәрҙән яҡланмаған халыҡ ҡатламына ярҙам сараларының адреслылығын арттырырға ҡушты. Әлеге ваҡытта эш төркөмө ойоштороала, улар тарафынан социаль тәьмин итеүгә бәйле закондар ҡайтанан ҡараласаҡ. Республика территорияһында ғәмәлдә булған закон буйынса, инвалид балаһы һәм уны тәрбиәләгән эшләмәгән ғаилә ағзаһы булған ғаиләләргә пенсияға 500 һумдан ашыу күләмдәге өҫтәмә түләнергә тейеш.

✓Өфөлә 22-се "АгроКомплекс-2012" халыҡ-ара махсуслаштырылған күргәҙмәһе асылды. "АгроКомплекс"ты асыу тантанаһында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Республика башлығы әйтеүенсә, быңдай күләмдәге агросәнәғәт комплексы ҡаҙанышларын күргәҙмәһен үткәреү - Башҡортостан өсөн үтә мөһим ваҡиға. "АгроКомплекс-2012" күргәҙмәһендә Рәсәйҙең 20 төбәгенән, шулай уҡ сит илдәрҙән 190-ға яҡын предприятие ҡатнаша. "АгроКомплекс"тың ойоштороусылары булып Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы менән РФ Сауҙа-сәнәғәт палатаһы ярҙамында БР Ауыл хужалығы министрлығы, Башҡортостан күргәҙмә компанияһы сығыш яһай.

✓Дыуан районының Мәсәғүт ауылында "БР Микрофинанслау үҙәге"нең өҫтәмә офисы асылды. Ул бер нисә районды берләштереүсе үҙәк буласаҡ һәм Дыуан, Мәсетле, Балаҡатай, Ҡыйғы һәм Салауат муниципаль райондары эшҡыуарҙарын хеҙмәтләндерәсәк.Офиста эшҡыуарҙарға бушлай консультациялар биреләсәк, йылына 10 процентлыҡ билдәләнгән ставка буйынса бер миллион һумға тиклем микрозаймдар алыуға документтар ҡабул ителәсәк һәм килешеүҙәр төҙөләсәк.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҠАНҒА ҺЕҢГӘНДЕ...

## йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай

**Был әйтемдең икенсе бер варианты: "Сир китһә лә, ғәҙәт китмәй". Ысынлап та, ауыр сирҙән ҡотолоу мөмкин булған осраҡта ла, насар ғәҙәттән арыныу кешенән ҙур көсөргәнеш, фиҙаҡәрлек, айҙар-йылдар буйына үҙ өҫтөндә даими эшләүҙе талап итә. Кеше хатта насар ғәҙәтенән ҡотолған осраҡта ла, бындай ғәҙәте барлығын һәр ваҡыт иҫендә тотмаһа, үҙ өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләүен дауам итмәһә, яҙмышын үҙағышына ҡуйһа, күпмелер ваҡыттан һуң элекке хәленә ҡайтыуы ла бар бит. Бындай осраҡта "Ә-ә-ә, уның бит был ғәҙәте ҡанына һеңгән, ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай инде", тиҙәр. "Кәкерене ҡәбер генә төҙәтә ала", тип тә әйтәләр хатта.**



Бер мәл Хоҙай үҙе яралтҡан барлыҡ йән эйәләренең әҙәмдән башҡаларын кәңәшмәгә йыйған, ти. Донъяның дүрт тарафынан да хайуандар, йәнлектәр, ҡоштар, һөйрәлеүселәр уның янына килеп еткән. Кәңәшмәгә килеүселәрҙе исемлек буйынса тикшереп ҡараһалар, өкө генә һаман да күренмәй икән. Уны көтөргә булғандар. Һуңлап ҡына килеп еткән өкөнән Хоҙай:

- Ҡайҙа улайтып һуңлап йөрөйһөң ул, башҡаларҙы көттөрөп? - тип асыуланып һораған.

- Хоҙайым, мине ярлыҡай күр инде, зинһар, мин Ер шарындағы тере һәм үле кешеләрҙе һанап йөрөнөм. Уларҙың ҡайһылары күберәк икәнен белергә теләгәйнем, - тигән өкө ҡалтырана-ҡалтырана.

- Шунан, ҡайһылары күпме икәнен белдеңме инде? - тигән һорау алыусы, бер аҙ йомшара төшөп.

- Эйе, белдем, баҡтиһәң, үле кешеләр тереләренә ҡарағанда күберәк икән дә, - тигән өкө Хоҙайҙың йомшарыуына ҡыуанып.

- Һин яңылыш һанағанһың, минең иҫәп буйынса тере кешеләр күберәк булырға тейеш. Ә һин уларҙы нисек һананың һуң? - тигән Хоҙай һаман ныҡышып.

- Мин уларҙың ҡояш ҡалҡҡандан һуң һаман да йоҡлап ятыусыларын үлеләр исемлегенә индерҙем, - тигән өкө һаман да бирешергә теләмәйенсә.

- Афарин! Дөрөҫ һанағанһың, ҡояш ҡалҡҡандан һуң һаман да йоҡлап ятыусы үлегә тиң инде ул. Ялҡаулыҡ уларҙың ҡанына һеңгән, ә ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай, - тип Хоҙай өкө менән ризалашҡан...

Юғарыла килтерелгән ваҡиғала кешенең ҡанына, ғәҙәтенә һеңгән кире күренештәр хаҡында һүҙ барҙы. Баҡтиһәң, ҡанына һеңгән ғәҙәте буйынса тере кешене лә "үлеләр исемлегенә" индереп була, имеш. Шундайын уҡ ҡурҡыныс күренешме ни ул ҡанға һеңгән ғәҙәт? Ә бит ҡанға тик негатив күренештәр, кире сифаттар, насар ғәҙәттәр генә һеңмәй. Ғәҙәттәрҙең, сифаттарҙың, ҡылыҡтарҙың төрлөләре: ыңғайҙары, яҡшылары, башҡаларға тик изгелек ҡылыуға ғына йүнәлтелгәндәре лә була. Тимәк был әйтемдең икенсе ыңғай йүнәлештәге йөкмәткеһе хаҡында һүҙ йөрөтөргә лә урын бар бит бында. Тимәк, ҡанға насар сифат, ғәҙәт, ҡылыҡ ҡына һеңмәй. Хәҙер инде шул йүнәлеш тураһында уй йөрөтөп ҡарайыҡ.

Урынлы һорау тыуа: бындай яҡшы сифаттар, күркәм ғәҙәттәр, донъяға һәм кешелеккә позитив мөнәсәбәт кешелә нисек тәрбиәләнә һуң? Бында бер нисә сығанаҡты билдәләп үтергә булалыр, улар: шәхси өлгө тәрбиәһе (яҡшы кешегә оҡшарға тырышыу), ғаилә тәрбиәһе (атай-әсәйҙең үҙ-ара, балаларға, донъяға мөнәсәбәте), мәктәп тәрбиәһе (системалы белем, һөнәргә йүнәлеш алыу), дини тәрбиә (шәриғәт ҡанундары, тыйылғандан тыйылып йәшәргә өйрәтеү), әхлаҡ тәрбиәһе (яҡшыны, яманды кеше үҙе айырып өйрәнергә тейеш, ғибрәт), хеҙмәт тәрбиәһе (кеше үҙ бәхетен үҙ ҡулдары менән төҙөй) һ.б.

Хәҙер инде кешелә күркәм, ыңғай сифаттар тәрбиәләүсе ошо сығанаҡтарҙы системалы рәүештә ҡарайыҡ. Бының өсөн тәрбиәнең был өлкәләренең, сығанаҡтарының дөйөм уртаҡ маҡсатын билдәләү фарыз. Әлбиттә, уларҙың кешенән йәмғиәт өсөн файҙалы шәхес тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйыуы бәхәсһеҙ, әммә барлыҡ маҡсаттарҙы берләштереүсе бер төшөнсә бар, ул да булһа - рухи тәрбиә. Минеңсә, тәрбиәнең ниндәй генә өлкәһен алып ҡарамайыҡ, әгәр ҙә өлгәшелгән маҡсатта рухлы шәхесте күрмәһәк, тоймаһаҡ, тәрбиәнең һәр төрөнөң файҙалы эш коэффициенты нулгә тигеҙ, сөнки рухһыҙ кеше ул прагматик робот, биологик терминатор.

Фекерҙе артабан үҫтерәйек. Рухлы кеше тәрбиәләү системаһы нимә тип атала? Йола-традиция, ғөрөф-ғәҙәт тип атала. Ә йола-традицияларҙың, ғөрөф-ғәҙәттең рухлы кеше тәрбиәләүҙәге әһәмиәтен нисек аңлатырға була? Бының өсөн мәҡәлә башындағы бер һөйләмгә кире әйләнеп ҡайтайыҡ: "Кеше хатта насар ғәҙәтенән ҡотолған осраҡта ла, бындай ғәҙәте барлығын һәр ваҡыт иҫендә тотмаһа, үҙ өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләүен дауам итмәһә, яҙмышын үҙағышына ҡуйһа, күпмелер ваҡыттан һуң элекке хәленә ҡайтыуы ла бар бит". Тимәк, кеше үҙ йола-традицияларын, ғөрөф-ғәҙәтен туҡтауһыҙ үтәп, көн һайын бер үк нәмәне ҡабатлай башлаһа, был уның тәүҙә ғәҙәтенә һеңә, аҙаҡ холҡона әүерелә. Психологтар ғәҙәттең холоҡҡа күсеү мөҙҙәтен ҡырҡ көн тип билдәләй. Тимәк, әгәр ҙә кеше яҡшы ғәмәлде ҡырҡ көн һуҙымында көн һайын ҡабатлаһа, уның ҡанына һеңгән был яҡшы сифатын, ысынлап та, йыуып та, юнып та ташлап булмаясаҡ. Улай ғына ла түгел, йола-традициялар - улар кешенең ҡанына ыңғай сифаттарҙы, күркәм холоҡто һеңдереүҙең иң дөрөҫ һәм кешелек тарафынан меңәр-меңәр йылдар һуҙымында һыналған юлы.

Фекерҙе артабан үҫтерәйек. Тимәк, ни өсөн Аллаһы Тәғәлә ырыу-ҡәбиләләрҙе, милләттәрҙе барлыҡҡа килтергән һәм уларға йола-традициялар менән йәшәргә бойорған һуң? Бында Уның маҡсаты аңлашыла: Хаҡ Тәғәлә бының менән кешелекте һаҡлап ҡалырға теләгән. Сөнки кешелек әле халыҡтарға бүленмәгәнностратик дәүерҙә ата - улын, инә ҡыҙын айырмай мәхшәр башлана һәм был хәл кешелекте һуңғы сиккә килтереп еткерә. Артабанғы осорҙа үҙ йола-традициялары, ғөрөф-ғәҙәте, тел-лөғәте менән йәшәй башлаған айырым берәмектәр ностратик дәүерҙәге хаостан ҡотолорға ярҙам итә. Әгәр ҙә халыҡ, милләт ошо маҡсатта барлыҡҡа килгән икән, уны барлыҡҡа килтереүсенең ниәт-уйҙары ни тиклем изге, мөҡәддәс булған. Шуның өсөн дә беҙ милли рухты кешенең аңында һәм ҡанында йәшәй, тип әйтәбеҙ ҙә инде. Ә ҡанға һеңгәнде йыуып та, юйып та ташлап булмай. Тик халыҡ, милләт йола-традицяларын, ғөрөф-ғәҙәтен генә онотмаһын.

Әгәр ҙә Рәсәй Федерацияһында йәшәгән милләттәрҙе бер милләт итеп күрергә теләүселәр үҙ уйынан ҡайтмаһа, был ынтылыш илебеҙҙе хаосҡа, тарҡалыуға алып киләсәк, тигән фекер күптән инде әйтелә. Миҫал эҙләп алыҫ китергә лә түгел: совет осоронда тап ошондай "совет милләте" булдырырға тигән ынтылыш Советтар Союзын юҡҡа сығарҙы. Ә бит ил етәкселәре шуны аңларға тейеш: милли рух һәр халыҡтың ҡанына, аңына һеңгән, ә уны йыуып та, юнып та ташлап булмаясаҡ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөнән өр-яңы чартер йүнәлештәре асылыуы арҡаһында халыҡ-ара авиарейстарҙа киҫкен күтәрелеш (80 проценттан юғарыраҡ) күҙәтелгән. Камрань ҡалаһына (Вьетнам) рейстарҙы - "Ырымбур авиалиниялары" авиакомпанияһы, Пхукет менән Утапаоға (Таиланд) "Северный ветер" һәм "Трансаэро" авиакомпаниялары башҡара. Һиндостанға ла чартер рейстары күбәйгән. "Төркиә авиалиниялары" Истанбулға бер рейс өҫтәгән, хәҙер уларҙың иҫәбе аҙнаһына дүртәүгә еткән. Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә тура авиабәйләнеш - даимиҙары ла, чартер рейстары ла республика халҡының ҙур һорауы менән файҙалана, улар ҙа аҙнаһына дүрт тапҡыр башҡарыла.

✓"Байтул мал" фонды Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй ислам университеты менән берлектә Өфөлә ялан кухнялары асырға ниәтләй, тип хәбәр итте фонд директоры Артур Насибуллов. Өфөнөң төрлө райондарында урынлашасаҡ ялан кухняларында мохтаждар бушлай йылы аш менән тәьмин ителәсәк. Шулай уҡ "мәрхәмәтлек карталары" әҙерләнгән, улар ҙа яҡын арала ҡулланылышҡа индереләсәк. Был карта буйынса эшһеҙҙәр, аҙ тәьмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләр ағзалары, студенттар аҙыҡ-түлек йыйылмаһы, медикаменттар ала аласаҡ.

✓2012 йыл аҙағына тиклем Башҡортостан аша үткән федераль трассаларҙа кәм тигәндә 14 метеопост барлыҡҡа киләсәк. Уларҙың бишәүһе урынлаштырылған һәм әле уңышлы эшләй, тағы туғыҙын ҡуйыу өсөн урындар билдәләнгән. Автоматлаштырылған метеокүҙәтеү системаһы Башҡортостанда 2011 йыл аҙағында ҡулланылышҡа индерелде һәм тулы булмаған өс ай эсендә үҙенең һөҙөмтәлелеген иҫбатланы. Үҙҙәренең метеостанциялары булыуы юлсыларға һауа шарттары тураһында тулыраҡ мәғлүмәт алырға, һәр төрлө үҙгәрештәргә әҙер булырға мөмкинлек бирә. Бынан тыш, һәр метеопост видеокүҙәтеү системаһы менән йыһазландырылған, ошонођ арҡаһында Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре трассалағы хәлдәрҙе онлайн режимында күҙәтә ала.

✓М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында 21 мартта Халыҡ-ара театр көнөнә арналған тамаша була. Хәбәр ителеүенсә, театр беренсе тапҡыр юғары уҡыу йорттарында уҡыусы студенттар араһында башлап яҙыусы драматургтар әҫәрҙәренә "Өмөтлө ҡәләм" конкурсы иғлан иткәйне. Әлеге тамашала конкурсҡа йомғаҡ яһаласаҡ.

ДОНЪЯ ШАУҠЫМЫ

# ИҠТИСАДИ КӨРСӨКТӨҢ...

## тағы бер тулҡынымы?

**2008 йылғы көрсөк бөтә донъяны ныҡ ҡына һелкетте. Ҡүпләп эштән ҡыҫҡартыуҙар, ҡасандыр ҙур табыш килтереүсе предприятие һәм ойошмаларҙың ябылыуы, ҡулланыусылар һорауының ҡырҡа кәмеүе - былар барыһы ла кризис "емештәре". Донъя илдәре әле булһа был шауҡымдан айнып етә алмай, ә ҡайһы бер белгестәр иһә уның тағы ла көслөрәк тулҡыны яҡынлашыуы хаҡында белдерә.**

Эксперт һәм аналитиктар билдәләүенсә, Ҡытай, Европа һәм Американың етештереүсәнлек ҡеүәте көндән-көн кәмей бара, ә был, үҙ сиратында, көрсөктөң икенсе тулҡыны хаҡындағы ҡуҙаллауҙарҙың аҡланыу мөмкинлеген арттыра. Буласаҡ проблеманың ҡиҫкен һәм етди булыуының төп билдәһе - ул хеҙмәт баҙарындағы үҙгәрештәр. Мәҫәлән, Төньяҡ Американың хеҙмәт баҙары бөгөн яңы эш урындары булдыра алмай, тимәк, АҠШ үҙ иҡтисадының тотороҡланыуына ла ҙур өмөттәр бағлай алмай. Эш урындары булмауы, производство темптарының түбәнәйеүе ҡулланыусылар һорауының кәмеүенә килтерәсәк - быларҙың барыһы ла 2008 йыл көрсөгөнөң икенсе һулышы "асылыуына" тура юл, тип белдерә белгестәр. Европа иҡтисады, Америка менән сағыштырғанда, ниндәйҙер кимәлдә тотороҡло күренә, ләкин Европаның бөгөнгө финанс һәм иҡтисади шарттары камиллыҡтан алыҫ.

Көрсөктөң икенсе тулҡыны була ҡалһа, ул Рәсәйҙе урап үтәсәк, тип ышаныу ахмаҡлыҡ, сөнки беҙҙең иҡтисад бөтә донъя иҡтисады менән тығыҙ бәйләнгән. Илде сеймал запасы ҡотҡарасаҡ, тигән ышаныста йөшәргә лә ярамай, сөнки кризис ваҡытында сеймал экспортының күләме ҡырҡа кәмеүе бар, ә был, үҙ сиратында, Рәсәй иҡтисадына кире йоғонто яһаясаҡ. Рәсәй өсөн һумдың хәле хөртәйеү ихтималлығы ла бар. Был да, үҙ сиратында, илдең иҡтисади "кеҫәһенә" арыу ғына һуғырға мөмкин, сөнки йәмғиәттең һатып алыу мөмкинлеге бермә-бер кәмейәсәк, тип фаразлай белгестәр.

Көрсөктөң икенсе тулҡыны хаҡында һүҙҙәр күп булһа ла, Рәсәй политологтары һәм иҡтисадсылары билдәләүенсә, ил халҡы көрсөк шауҡымын әллә ни һиҙмәйәсәк. Шулай ҙа улар бер-нисә кәңәште күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тәҡдим итә. Тәү сиратта, ҙур сығым талап иткән әйберҙәр, мәҫәлән, автомобиль һатып алыуҙан тыйылып торорға һәм ҡыйбатлы ялдан баш тартырға тәҡдим итә. Шулай уҡ көрсөк ваҡытында тауарҙарҙы арзанға һатыу кеүек акцияларҙы ла урап үтергә кәңәш ителә, сөнки быларҙың барыһы ла һатып алыусының аҡсаһын "һурыу" өсөн ойоштороla. Нәҡ ошондай акция ваҡытында беҙ әллә ни кәрәге булмаған әйберҙәр өсөн аҡса түҙҙырыу планын арттырып үтәйбеҙ икән. Һәм иң мөһиме - негатив кәйеф йоғонтоһона бирелмәҫкә кәрәк, тип иҫкәртә белгестәр, сөнки насар уйҙар тәьҫирендә күп хаталар эшләргә мөмкин, ә иҡтисадтың бөгөнгө ышаныслыҙ мәлендә бәләкәй генә яңылышлыҡ та үтә ҡиммәткә төшөүе бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быларҙың барыһы ла күҙ алдына күңелһеҙ күренеште баҫтыра, әлбиттә. Ләкин һәр хәлдән дә сығыу юлы бар икәнен онотorға ярамай. Шулай уҡ 2008 һәм унан һуңғы йылдар ваҡиғалары Рәсәй халҡының характер ныҡлығын асыҡ күрһәтте. Шуға күрә, ҡуҙалланған көрсөк тулҡындары була ҡалһа ла, тағы ла бер ауырлыҡты үткәреп ебәрер көс табыуыбыҙға шик юҡ.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

О, СПОРТ!

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтендә 2013 йылда Өфөлә VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары үткәреү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыу тантанаһы үтте. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов менән Халыҡ-ара балалар уйындары комитеты рәйесе Торестен Раш рәсми рәүештә килешеүҙе ҡултамғалар менән нығытты.**



# "БАТЫР" ИСЕМЛЕ АЙЫУ...

## балаларҙы ярышҡа сәмләндерер

Башҡортостан яғынан сарала тағы ла Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Александр Иванюта, физик культура һәм спорт буйынса ҡала комитеты рәйесе Сергей Степанов һәм башҡа рәсми ойошмалар вәкилдәре ҡатнашты. Ирек Ялалов был уйындарҙың республика спортын үҫтереүгә ҙур өлөш индерәсәген билдәләне, ярыштарға әҙерлектең Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың шәхси күҙәтеүе аҫтында башҡарылыуы уларҙы уңышлы үткәреүгә гарантия булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Үҙ сиратында Торестен Раш әҙерлекте бик юғары баһаланы һәм йылы ҡаршы алыуҙары өсөн рәхмәтен еткерҙе. Килешеүгә ҡул ҡуйғас, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы абруйлы ҡунаҡҡа ҡала символикаһы төшөрөлгән иҫтәлекле бүләк тапшырҙы.

Баш ҡалабыҙға Торестен Раш менән бергә VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары буйынса комитеттың башҡа ағзалары ла килгәйне. Ҡунаҡтар араһында комитеттың вице-президенттары Игорь Топол (Словения) менән Давид Эван Гильберт (АҠШ), генераль секретарь Ричард Смит (Германия), ҡаҙнасы Карл Гелнц (Германия), идара комитеты ағзаһы Максимилиан Веко (Словения) ла бар ине. Дәрәжәле ҡунаҡтар баш ҡаланың спорт объекттары - Өфө-Арена, Олимпик Парк, Биатлон комплекстарын ҡараны һәм эшлекле төркөмдәр етәкселәре менән башҡарылған һәм әле башҡарыласаҡ эштәр тураһында фекер алышты.

VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары 2013 йылдың 26 февраленән алып 3 мартына тиклем үтәсәк. Ярыштарҙа бөтә донъянан йыйылған меңгә яҡын спортсы ҡатнашыуы көтөлә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары талисманы итеп һайланған һоро айыуға бер ай самаһы дауам иткән исем әҙләү акцияһына йомғаҡ яһалды. Шулай итеп, иң күп тауыш йыйып, бер-нисә вариант араһынан Батыр тигән исем еренселеккә сыҡты. "Батыр" - ғәскәри хеҙмәт менән бәйле лексикала "ғәскәр башы" тигән мәғәнәлә ҡулланылған. Ә бөгөнгө көндә был исем ҡурҡыу белмәҫ, ҡуш йөрәкле кешеләргә ҡарата ғына ҡулланылып, мәғәнәһе тарайған. Әммә, нисек кенә булмаһын, дөйөмләштереп, "Батыр" тип, һоро айыуға ғәскәр башлығы исеме ҡушылған икән, был талисман спортсыларыбыҙҙы еңеүгә әйҙәр әле! Ярыш талисманының исеме милли үҙенсәлегебеҙҙән сығып, "Батыр" тип атала икән, ойоштороусыларға рәхмәт әйтергә генә ҡала.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

# ХОҠУҠТАРЫБЫҘҘЫ...

## ҡуллана беләбеҙме?

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтендә ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау темаһына арналған файҙалы осрашыу үтте. Төрлө матбуғат сараларынан килгән журналистар менән осрашып, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфиә Миңнулла ҡыҙы Баҡыева йыйып сыҡҡылыҡ булып күренгән был өлкәгә байҡау яһаны.**

Билдәләнеүенсә, егерме йыл элек ҡабул ителгән "Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау тураһында"ғы Федераль Закондың һатыусы менән һатып алыусы, хеҙмәт күрһәтеүсе һәм ҡулланыусы араһында килеп тыуған аңлашылмаусылыҡтарҙы хәл итеүҙәге әһәмиәте ҙур, әммә уның йөкмәткеһендә лә, үтәлешендә лә ҡытыршылыҡтар юҡ түгел. Белгес фекеренсә, был закон буйынса элек һатып алыусы боҙолған тауарын бушлай ремонтҡа биреү хоҡуғына ғына эйә булһа, бөгөнгө көндә ошо закон сиктәрендә башҡа төрлө дәғүәләр ҙә белдерә ала. Ләкин граждандарҙың был өлкәләге белеме етерлек кимәлдә түгел. Күпселек осраҡта ҡулланыусылар, теге йәки был ҡаршылыҡ менән күҙмә-күҙ осрашып, юғалып ҡала. Сауҙа өлкәһендә, әлбиттә, күптәр үҙҙәренең хоҡуҡтарын белә, һатыусылар ҙа көсөргәнешле хәлгә юл ҡуймаҫҡа тырыша. Ә бына банк өлкәһендә хәлдәр бөтөнләй икенсе: ҡулланыусы банк менән килешеү төҙөгән саҡта ике яҡтың да тип-тигеҙ хоҡуҡтарға эйә булыуы тураһында белмәй, һәм банктар ошо томаналыҡты үҙ файҙаһына ҡуллана һала. Шуға күрә, белгестәр ҡулланыусыларҙы кредит тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыр алдынан унда яҙылған барлыҡ мәғлүмәтте лә аңлап уҡып сығырға һәм айыҡ аҡыл менән ҡарарҙар ҡабул итергә саҡыра.

Артабан Әлфиә Баҡыева Өфө ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса бүлегенең эшмәкәрлеге менән дә таныштырҙы. 2011 йылда граждандарҙан ун меңдән ашыу мөрәжәғәт, шул иҫәптән, 1198 яҙма ғариза ҡабул ителгән. 932 һорау судҡа барып еткермәйенсә хәл ителһә, 266 мөрәжәғәт буйынса граждандарға судҡа мөрәжәғәт итеү өсөн документтар әҙерләп бирелгән. Был эштәрҙе аткарыу арҡаһында ҡулланыусылар өсөн янаған 20 миллион һумлыҡ сығым кисектерелгән. Граждандарҙың был өлкәләге белемен арттырыу маҡсатында бүлек хеҙмәткәрҙәре тарафынан ай һайын төрлө саралар, күсмә семинарҙар, консультациялар уҙғарылған, махсус күсмә бригада 600-ҙән ашыу кешегә мәғлүмәт ярҙамы күрһәткән. Бынан тыш, ҙур сауҙа үҙәктәрендә ойошторолған 191 консультация ваҡытында 670 кеше шундай уҡ ярҙам алған. Тағы ла, 62 "тура бәйләнеш" ойошторолоп, 465 граждаңға ғәмәлдәге закон нормалары аңлатылған. Йәнә, был законға үҙгәрештәр индерелеүе тураһындағы мәғлүмәт еткереүҙе маҡсат итеп ҡуйған, ҡулланыусының белемен камиллаштырыуға йүнәлтелгән 46 дәрес ойошторолған.

**Әйткәндәй, 28 мартта Өфө ҡала округы хакимиәте бинаһы янынан Үҙәк баҙарғаса хәрәкәт итеүсе ҡулланыусылар һорауҙарына белгестәр яуабын еткереүсе "Ҡулланыусы экспресы" троллейбус хәрәкәте ойошторолаҫаҡ.**

**Вәкил РӘХИМОВ.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ғафури районы Сәйетбаба ауылының мәҙәниәт йортонда "Әсәләр һәм ҡыҙҙар" конкурсы үтте. Сараны "Сәйетбаба" башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге ойошторҙо, унда биш әсә һәм биш ҡыҙ ҡатнашты. Ҡыҙҙар йырҙа, бейеүҙә, шиғыр һөйләүҙә, милли ризыҡтар әҙерләүҙә үҙ оҫталыҡтарын күрһәтте. Һәҙәмтәлә Рисәлә Фәхретдинова - иң яҡшы әсә, Нәркәс Байбулдина иң яҡшы ҡыҙ бала тип табылды.

✓Өфө ҡала Советының яңы составы билдәле булды. Уның составында дүрт фракция буласаҡ. Партия исемлеге буйынса "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһенән - 12 депутат, Рәсәй Федерацияһының Коммунистар партияһынан - дүрт , "Ғәҙел Рәсәй"ҙән - өс, Рәсәй Либераль-демократик партияһынан - ике депутат үткән. Бер мандатлы һайлау округтары буйынса 18 депутат һайланған.

✓Өфөнөң Киров районында "Кағыҙға - икенсе ғүмер!" экологик акцияһының сираттағы этабы старт алды. Махсус экомобиль мәктәптәр буйлап йөрөп сығасаҡ. Уның графигы менән Башҡортостан Республикаһының ЭкоПорталында танышырға мөмкин. Акция баш ҡалабыҙҙа былтыр ноябрь айында башланғайны. Бөгөнгө көндә ул Өфөнөң Октябрь, Ленин, Дим һәм Совет райондарында үткән. Бында уҡыусылар көсө менән 56 тоннанан ашыу макулатура йыйылған. Эстафетаны Өфөнөң Орджоникидзе һәм Калинин райондары ҡабул итәсәк.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетында Нидерландтар Короллегенең Stoas университеты уҡытыусылары һәм бизнесмендар составындағы делегацияһы булды. Сит ил партнерҙары менән Голландияның заманса ҡорамалдарын поставкалау, Нидерландтар Короллеге һәм Рәсәй араһында студенттар менән алмашыуҙы үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Университеттың Голландия менән хеҙмәттәшлек итеү тәжрибәһе бар. Stoas менән юғары уҡыу йорто 10 йылдан ашыу килешеп эш итә: БДАУ-ның 50-гә яҡын студенты унда бакалавр дәрәжәһен алған.

✓19 мартта "Нефтсе" мәҙәниәт һарайының Бәләкәй залында "Аҡ тирмә" башҡорт мәҙәни клубы оләсәйҙәр ҡоро үткәрә. Ҡорҙа балалар баҡсалары, мәктәптәр уҡыусылары, олатай-өләсәйҙәр сығыш яһаясаҡ, төрлө халыҡ йолалары күрһәтеләсәк, дебет шәл, вәл һәм башҡа ҡул эштәре күргәҙмәһе ойошторолаҫаҡ. 19 сәғәттә башлана.

✔ *Әгәр кешенең 30 йыл эш стажы бар һәм ул шул саҡта ла пенсия тәғәйенләүҙе һорамай эшләүен дауам итһә, һәр өҫтәмә йыл өсөн пенсияһының нигеҙ өлөшө 6 процентҡа арта бара. Ә стажы 30 йылға тулмаған осраҡта - 3 процентҡа.*



*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ОҘАҒЫРАҠ ЭШЛӘҺӘҢ...

## күберәк пенсия алырһың



**Пенсия йәше арттырылмаясаҡ, ләкин рәсәйлеләр оҙағыраҡ эшләһен өсөн матди ҡыҙыҡһындырыу саралары күреләсәк. Ошо һәм пенсияға ҡағылышлы башҡа һорауҙар буйынса Рәсәй Пенсия фонды белгестәре аңлатмалары уҡыусыларыбыҙ өсөн ҡыҙыҡлы булыр тип уйлайбыҙ.**

### Апрель өҫтәмәһе

1 февралдән 37 миллион кешегә хеҙмәт пенсиялары 7 процентҡа арттырылды - был былтырғы йыл инфляцияһынан юғарыраҡ. Һәм был һуңғыһы түгел. Апрелдә илдәге эш хаҡтары үҫеше кимәле буйынса хеҙмәт пенсияларын индексациялау ҡарала, ул яҡынса 3 процент тәшкил итәсәк. 1 апрелдән шулай уҡ пенсионерҙың йәшәү минимумы үҫеше кимәленә социаль пенсияларҙы ла 11 процент самаһына идексациялау планлаштырыла. Августа шулай уҡ эшләүен дауам итеүсе һәм шуның менән бер үк ваҡытта хеҙмәт пенсияларын да алыусы пенсионерҙар өсөн индексация үткәрәсәкбеҙ. Апрелдән ҡайһы бер социаль түләүҙәр 6 процентҡа артасаҡ, ә әсәлек капиталы 1 ғинуарҙан уҡ арттырылғайны, һәм хәҙер ул 387,6 мең һум тәшкил итә. Шулай итеп, йыл аҙағына уртаса хеҙмәт пенсияһы 9500 һум, ә ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы 9800 һум тәшкил итәсәк. Социаль пенсия апрель индексацияһынан һуң 6000 һумға етәсәк. Ә пенсиялары төбәктәге йәшәү минимумынан түбән булған эшләмәүсе өлкән йәштәгеләрҙең пенсияһына социаль өҫтәмә түләнә.

### Пенсия фонды ҡытлыҡ кисерәме?

Фонд бюджеты өс йылға раҫланған, унда пенсияларҙы планлы рәүештә бөтә төр арттырыуҙар ҙа иҫәпкә алынған. Ул финанс сығанаҡтары, шул иҫәптән дәүләт бюджетынан трансферттар иҫәбенә тәьмин ителгән. 2011 йылда дефицит пландағынан бер ни тиклем кәмерәк булды. 2012 йылда федераль бюджеттан трансферт 1,075 триллион, ә 2013 йылда - 1,2 триллион самаһы һәм 2014 йылда 1,3 триллион һум тәшкил итәсәк. Һәр хәлдә, ҡот осҡос дефицит һәм аҡса булмау тураһындағы хәбәрҙәргә бер ниндәй нигеҙ юҡ. Бөтә пенсиялар ҙа ваҡытында һәм тулы күләмдә түләнәсәк.

Әлеге ошо һандарҙан күренеүенсә лә, йылдар үтеү менән дефицит арта барасаҡ. Әле үк уны нисек кәметеү хаҡында бәхәстәр бара. Һөҙөмтәлә, реформаның сираттағы этабы ниндәйҙер бигүк популяр булмаған ҡарар ҡабул итеү менән тамамланыуы ихтимал.

### Тәүмаҡсат - тормош кимәлен күтәреү

Дефицит проблемаһы бар, ләкин уны кәметеү иң төп һәм берҙән-бер маҡсат түгел. Тәү сиратта пенсионерҙарҙың тормош кимәлен күтәреү мөһим. Кеше пенсияға сыға икән, ул килеменең ҡырҡа кәмеүен тоймаһын - системаны реформалауҙың маҡсаты шунда. Үҫешкән ҡайһы бер илдәрҙә оло йәштәгеләр үҙҙәренең элекке эш хаҡының 70-80 процентын ала. Әммә был бөтә ерҙә лә һәм хатта бөтә үҫешкән илдәрҙә лә улай түгел, һәм беҙ күп илдәрҙә пенсияларҙың кәмеүен күрәбеҙ, ә Рәсәйҙә пенсиялар арта. Халыҡ-ара стандарт - ул пенсия взностары түләнгән эш хаҡынан 40 проценттан да кәм булмаған пенсия күләме. Бөгөн беҙҙә күп осраҡтарға айырым ҡараш талап ителә. Мәҫәлән, әгәр кеше әҙ эш хаҡы алып эшләгән булһа, уның өсөн алмаш коэффициент 60-70 процент булыуы ла ихтимал. Ә кем юғары эш хаҡына эшләгән, уның пенсияһы, эш хаҡы менән сағыштырғанда, аҙыраҡ. Уртаса 40 процент самаһы тәшкил итә. Ләкин был уртаса алынған коэффициент, ул статистика өсөн, тенденцияны аңлау өсөн билдәләнгән.

"Стратегия-2020" программаһын әҙерләү барышында пенсия системаһы мәсьәләләре менән шөғөлләнгән эксперт төркөм үҙ эшен тамамланы. Хәҙер ике меңенсе йылдар башында хаҡлы ялға сыҡҡан граждандарҙың пенсияһы киләсәктә эш хаҡының 40 процентынан да кәм булмаһын өсөн комплекслы саралар эшләнәсәк.

### Стаждың әһәмиәте

Ысынлап та, әлеге ваҡытта стаждың пенсия күләменә бер ниндәй ҙә йоғонтоһо юҡ. Ә бит Халыҡ-ара хеҙмәтте ойоштороу стандарттары буйынса тулы күләмдә пенсия алыу өсөн 30 йылдан да кәм булмаған стаж кәрәк. Элек беҙҙә пенсия шулай, стаж һәм эш хаҡынан сығып иҫәпләнә ине лә. Әле ошо йүнәлешкә кире ҡайтыу тураһында тәҡдимдәр бар. Был тәҡдим етди иғтибар талап итә һәм ул ҡараласаҡ. Әйткәндәй, бөгөнгө көндә лә хаҡлы ялға китеүҙе кисектереүселәр өсөн закон тарафынан дәртләндереү системаһы ҡаралған. Әгәр кешенең 30 йыл эш стажы бар һәм ул шул саҡта ла пенсия тәғәйенләүҙе һорамай эшләүен дауам итһә, һәр өҫтәмә йыл өсөн пенсияһының нигеҙ өлөшө 6 процентҡа арта бара. Ә стажы 30 йылға тулмаған осраҡта - 3 процентҡа. Ул норма 2015 йылдан индереләсәк. Тулы күләмдә пенсия алыу өсөн 2015 йылда 5 йыл түгел, ә 9 йыл стаж кәрәк буласаҡ.

### Тупланма пенсиялар менән ни булыр?

Пенсия реформаһы 2001 йылда башланғайны, һәм пенсия тупланмаһына аҡса күсерелеп барған ҡайһы берәүҙәр хаҡлы ялға сыға башланы. Улар тупланма өлөштө 2012 йылдың икенсе яртыһында ала аласаҡ. Кем пенсияға сыҡҡан һәм тупланма өлөшкә эйә, улар июлдән башлап йәшәгән урындары буйынса Пенсия фонды бүлексәһенә килеп ғариза яҙырға тейеш. Ә кем әле пенсияға китмәгән, уларға тупланма өлөш пенсия тәғәйенләнгән ваҡытта түләнәсәк. Ләкин 2001 йылдан һуң ни бары 10 йыл үтте, һәм ҡайһы берәүҙәрҙең тупланма өлөш суммаһы бик ҙур түгел. Шуға күрә лә пенсия тупланмаһын түләү тураһында закон тарафынан уны түләү тәртибе ҡаралған. Әгәр тупланма өлөш 5 процент тәшкил итә һәм хеҙмәт пенсияһынан аҙыраҡ икән, ул шунда уҡ бер тапҡыр түләнә. Әгәр кеше пенсияны финанслау буйынса дәүләт программаһында ҡатнашҡан һәм үҙенең буласаҡ пенсияһы иҫәбенә әсәлек капиталы аҡсаһын күсергән булһа, түләүҙе пенсия тәғәйенләгән ваҡытта һорап мөрәжәғәт итә ала. Өсөнсө вариант буйынса пенсияның тупланма өлөшөн ай һайын алып барырға мөмкин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# МӘҘӘНИӘТ...

## ни рәүешле һаҡлана?

**ҺОРАУ: Мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау, уны киләһе быуындарға сайпылтмай тапшырыу өсөн ниндәй саралар тәҡдим итер инегеҙ?**

**Байым РӘХИМЙӘНОВ, хеҙмәткәр:** Иң тәүҙә "Нимә ул мәҙәниәт?" тигән һорауҙы үҙемсә аңлатып ҡарайым. Минеңсә, мәҙәниәт - ул кешеләр тарафынан барлыҡҡа килтерелеп, кешелек йәшәйеше хаҡына йүнәлтелгән ғәмәл һәм уның һөҙөмтәһе. Мәҙәниәтте шулай уҡ изгелеккә хеҙмәт итергә тейеш булған философик төшөнсә булараҡ та ҡарарға кәрәк. Тик һуғыш, яу ҡоралдары, кешеләрҙең йәнен ҡыйыу өсөн уйлап табылған башҡа саралар, кешелеклелек принцибына ҡаршы килгәнлектән, мәҙәниәт емеше була алмайҙыр. Ә кешелек йәшәһен, үҫһен өсөн уйлап сығарылған бөтә нәмәне лә ошо төшөнсә эсенә һыйҙырырға була.

Башҡорт халҡының мәҙәниәте тураһында фекер йөрөтөп ҡарайыҡ. Тәү сиратта, ул - быуаттар буйына барлыҡҡа килтерелеп, быуындан-быуынға тапшырылған тел. Тел - мәҙәниәтте тапшырыусы үткәргес ролен дә үтәй. Был осраҡта телде тотош бер система тип аңларға кәрәк. Телде һаҡлаһаҡ, мәҙәниәтебеҙ ҙә һаҡланасаҡ. Телдән башҡа, ғөрөф-ғәҙәттәр, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре, матди байлыҡтар ҙа - мәҙәниәт төркөмөнә ҡарай. Ҡағиҙә булараҡ, донъяла бер нәмә лә мәңге була алмай. Һәр нәмә, матди әйберме, әллә идеямы — тарҡала, онотола, тип әйтергә урын бар. Шуға күрә, нимәнелер быуаттар буйына һаҡларға, килер быуындарға тапшырырға теләйбеҙ икән, уны иң тәү сиратта көнкүрештә ҡулланыу талап ителә. Тормошта ҡулланыла торған нәмәне кеше һәр ваҡыт төҙөк көйө тота: ямай, йыша, яңы элементтар менән байыта. Мәҙәниәтте бер туҡтауһыҙ хәрәкәт иткән, үҫкән техник прогресс ҡуласаһына "таҡһаҡ", нығыраҡ һаҡланмаҫмы икән, тигән һорау тыуа.

Йәнә, нисек кенә ябай тойолмаһын, мәҙәниәтебеҙгә тышҡы факторҙар ул тиклем үк ҡурҡыныс түгел кеүек. Иң хәүефлеһе - эске факторҙар: теләк, ихтыяж һәм кәрәклекте аңлау. Шулай ҙа, һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау йүнәлешендә бик күп эштәр атҡарылды. Ошо йүнәлешебеҙҙе тағы ла дауам итергә яҙһын.

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Сәс ҡойолһа

Киптерелгән, ваҡ ҡына итеп ыуылған 1 балғалаҡ кесерткәнгә 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Таҙа сәсте ошо төнәтмә менән сылатҡас, 30 минут-1 сәғәтән һуң сәсте йыуырға. Төнәтмәне бер нисә ай дауамында аҙнаһына 1-2 мәртәбә ҡулланырға.

### Ҡулдар ҡалтыраһа

❖ Бәләкәйерәк төймә ҙурлығындағы (2 гр) прополисты көнөнә ике мәртәбә - иртәнге аштан һуң һәм киске ашты ашағас 20-30 минут үткәндән һуң сәйнәгеҙ. Һеләгәйҙе йышыраҡ йотоғоҙ. 40-50 минуттан һуң прополисты ла йотоғоҙ. Прополис бик файҙалы, һәр көн яңы киҫәк (2 гр) сәйнәгеҙ. 2 аҙнанан һуң киҫәкте ике мәртәбә кесерәйтегеҙ. Дауаланыу курсы - 1 ай. 2 аҙна тәнәфестән һуң дауалауҙы тағы ҡабатларға.

### Яҙ етә, һипкел сыға

❖ Иртәнсәк йыуыныр алдынан биткә иң тәүҙә йомортҡа һарыһы һөртөргә һәм 1-2 минуттан лимон киҫәге менән ышҡырға; ❖ дүрт өлөш спиртҡа өс өлөш петрушка һуты ҡушып (4:3), өс аҙна төнәтергә һәм шуны биткә һөртөргә.

### Тиреләге бәшмәк ауырыуы

❖ Марганцовкалы йәки тартылған ҡәһүә ҡатнаштырылған ванна ҡабул итергә (ҡәһүә ныҡ ҡуйы итеп бешерелһен);

❖ тирегә ҡаймаҡ һөртөү, мандарин ҡабығы һалып ҡайнатылған һыу, лимон һуты, һарымһаҡлы өй майы (1:1) менән эшкәртеү ҙә файҙалы;

❖ 10 грамм прополисты 50 мл күләмендәге 30 процентлы спиртта иретеп, бәшмәк зарарлаған урындарға һөртөү ҙә шифа бирә.

### Организм йонсоһа

❖ Шыттырылған бойҙайҙан әҙерләнгән ризыҡтар ашарға.

❖ 1 стакан йәшел борсаҡты төнгөлөккә 2 стакан һыуға бүрттерергә ҡуяһың. Иртәнсәк һыуын һарҡытып, һыуытҡысҡа ҡуйырға һәм 1 тәүлек шыттырырға. Үҙендә ҡалған һыуҙы әҙерәк сельдерей, йәшел һуған, тәмләткестәр ҡушып ныҡ ҡына болғатырға һәм һалҡын көйө ашарға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Тамбурлы сигеү - борон-борондан милли мәҙәниәтебеҙҙең сағыу бер өлгөһө булған. Был сигеү төньяҡ-көнсығыш райондары ҡатын-ҡыҙҙарының өҫ кейемен, йортон биҙәгән.*



ҺАБАҠТАР



# ҒҮМЕР БУЙЫ ӨЙРӘНӘБЕҘ

## Күрәҙәсе Тәнәй

**Ҡыҙым бәләкәй саҡта бер бесәй балаһы алғайныҡ. Уға Ләйлә Тәнәй тигән ҡушамат бирҙе. Тәнәй бик аҡыллы бесәй булып үҫте. Бушҡа-юҡҡа мыяулап, теңкә ҡоротманы, "йомоштары" өсөн дә мотлаҡ тышҡа йөрөнө. Ҡыҙым да, атаһы ла бесәйҙе нык яратты, иркәләне. Тик минең үҙемдең был тәпәйлеләргә ҡарата "мөхәббәт" самалы булды. Тәнәй ҙә быны аңлай ине, шикелле, минең тирәлә артыҡ урандығаламаны.**

Бер мәлде ҡыҙым ҡапыл ауырып китте: температураһы күтәрелде, тамағы, башы ауырта. Түшәктән дә тора алмай ята. Тәне ут кеүек яна. Дарыу эсерҙем дә, эргәһенән китеп, бер ни тиклем үҙ эшем менән булып йөрөгәс, ҡыҙымдың хәлен белешергә янына барҙым. Барҙым да, ҡотом алынды - Тәнәй Ләйләнең муйынына шарф һымаҡ һуҙылып ятҡан. Минә ул ҡыҙымды быуып ятҡан һымаҡ тойолдо һәм йән асыуыма бесәйҙе тартып алдым. Ә Ләйлә бер нәмә белмәй йоҡлай.

Бесәйҙе ҡыуып, кире эшем менән булып йөрөнөм дә, тағы ҡыҙым янына барҙым. Бесәй йәнә теге урынға менеп ятҡан. Тағы алып ташланым. Өсөнсөгә ингәндә Тәнәй ҡыҙымдың башына көпәс һымаҡ итеп уралып ятҡайны. Ә ҡыҙым күҙҙәрен асҡан, хәле еңеләйеп ҡалған. Һуңынан ғына аңлап ҡалдым - Тәнәй бит ҡыҙымды дауаларға тырышҡан...

Тәнәйебеҙ менән булған йәнә бер ваҡиға хәтерҙә ҡалған. Инә бесәй ине ул. Сираттағыһында күршеләрҙең һарай баштарында көсөкләгән. Көнөнә әллә нисә тапҡыр шунда менеп-төшөп йөрөгәненән аңғарып ҡалдыҡ. Йәй булғас, артыҡ әһәмиәт бирмәнек. Бер көндө иртәнсәктән был ҡабаланып йөрөп балаларын өйҙән төндөгөнә ташый башланы. Аптыраныҡ. Көндәр ҙә йылы тора ине былай. Быны сере төштән һуң ғына асылды - күршеләр һарай баштарына бер трактор бесән алып ҡайтып бушатҡан икән...

Йәнә бер ҡыҙыҡ сифаты булды бесәйебеҙҙең. Ҡайһы көндәрҙә, командировкаға сыҡһаҡ, кискә генә ҡайтырға тура килә өйгә. Шуға Тәнәйҙе көн һайын эшкә киткәндә тышта ҡалдыра торғайным. Һыуыҡта көнө буйы тышта йөрөү кемгә оҡшаһын инде. Тәнәй ҙә хәйләгә kereште: иртәнсәк пальтомды кейеүем була, бер нәмә белмәй йоҡлағанға һалышып ятҡан бесәйебеҙ ырғып тора ла, шкаф артына йәшерәнә.

Күрәҙәсе булдымы ул бесәй, хәҙергесә әйткәнсә, экстрасенсмы - аңламай ҡалдыҡ.... Күрәҙәлегенә лә, дауалау һәләтенә лә үҙебеҙ шаһит булдыҡ бит. Тәбиғәттең асылмаған серҙәре күп шул әле, бик күп. Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы**
**Иҫке Собханғол ауылы.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ИНӘЙҘӘРЕБЕҘ...

## тамбурлы сигеү серен аса

**Яҙҙың тәүге көндәрендә Малояз ауылындағы Салауат Юлаев музейында Балаҡатай районы Билән, Ҡайып, Кәркәй ауылдарынан килгән тамбурлы сигеү оҫталары менән осрашыу ысын мәғәнәһендә байрам төҫө алды.**



Тамбурлы сигеү - борон-борондан милли мәҙәниәтебеҙҙең сағыу бер өлгөһө булған. Был сигеү төньяҡ-көнсығыш райондары ҡатын-ҡыҙҙарының өҫ кейемен, йортон биҙәгән. Бынан 10 йыл элек Балаҡатай районы Билән ауылының бала саҡтан ошо сигеү менән шөғөлләнгән бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙары "Тамбур" халыҡ клубын ойоштороп ебәрә. Шунан алып уларҙың сигелгән әйберҙәре республика, Рәсәй кимәлендәге күргәҙмәләрҙә ҡатнашып, күҙҙең яуын ала. Ҡайҙа ғына булмай улар: Уфалей, Силәбе, Екатеринбург, Тверь, Мәскәү... Һәр ерҙә сигеү оҫталарын күтәп алалар. Салауат Юлаев музейы директоры Зилә Әмин ҡыҙы Садиҡова тамбур сигеү оҫталарын интернет аша таба һәм ҡунаҡҡа саҡыра. "Тамбур" халыҡ клубында 11 алтын ҡуллы ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнһә, Малаяҙға уларҙың дүртәүһе - Венера Ғәлиәкбәрова, Сәйҙә Әхтәмова, Рәғиҙә Хафизова, Рая Хужина килде.

- Йәшлек йылдарында сигелгән әйберҙәребеҙ көнкүрешкә матурлыҡ, өйөбөҙгә йылылыҡ бүләк итте. Хәҙер инде ғүмер йомғағын һүтеп, уның матур яҡтарын барлап, ҡул эше менән ултырыу үҙе бер ҡыуаныс, күңел дауаһы, - ти "Тамбур" халыҡ клубы етәксеһе Венера Мәжит ҡыҙы Ғәлиәкбәрова.

Оҫта ҡуллы инәйҙәр менән осрашыуға технология уҡытыусылары, уҡыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, районыбыҙ ауылдарынан тамбурлы сигеүҙе өйрәнергә теләүселәр бик күп йыйылды. Сигеүселәр уларға оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте. Ошонда уҡ уларҙың зауыҡлы эштәренән күргәҙмә лә асылды. Теләге булғандар сигеү серҙәренә өйрәнде. Үҙенсәлекле өҫ кейемдәре, ашъяулыҡ, диван япмалары, хатта сигеүле сумкаларға заказ биреүселәр бихисап булды. Балалар иһә сағыу күргәҙмәне күреп кинәнде.

**Ирина НУРЫЕВА.**
**Салауат районы.**

ҮӘТ, ӘКӘМӘТ!

# ТЫҢЛАЙ БЕЛЕҮ...

## үҙе бер һөнәр

**Оҫта балыҡсы һәм һунарсы булараҡ ҡына түгел, ә оҫта әңгәмәсе булараҡ та танылыу тапҡан оло ағай эргәһенә саҡырып алды ла, минең менән әңгәмә ҡороп ебәрҙе.**

- Ултыр әле, ҡустым, яҡынyраҡ. Әҙерәк баштан үткән хәлде һөйләп үтәйем әле. Шулай бер көндө балыҡҡа йыйынып сығып киттем мин. Ҡыш көнө балыҡ тотоу үҙе бер ғүмер бит ул. Боҙ өҫтөнән йөрөп, балыҡ ятыуын самалайһың, шунан бисмилланды әйтеп, боҙҙо тишәһең. Һыу төрәнлеген самалайһың. Хәҙер генә хөрриәт ул, борон беҙ ҡармаҡын да, ятырмаһын да үҙебеҙ әтмәлләп ала торғайнык. Былай мин үҙемде уңышлы ғына балыҡсы тип иҫәпләйем. Күп тоттом мин заманында балыкты. Быны ошондайҙарын (ҡулы менән апаруҡ оҙон балыҡ күрһәтә) гел кире һыуға ебәрә инем.

Үҙ эше менән булышҡан булып, әңгәмәсем тынис ҡына минең һорау биргәнде көтә. Ысынлап та, беләк буйлы балыҡтарҙы нишләп кире ебәрҙе икән ул? Уйға килгән һорауым телдән ысҡынып та китте.

- Эй, ҡустым, бигерәк әкәмәт кеше икәнһең һин (күҙҙәрен ҡыҫа биреп, башын артҡа ташлай биреп һене ҡатып көлгән кеше була). Ундай бәләкәй балыҡтарҙы нимә тип оялмай алып ҡайтып йөрөйөм инде. Былай ҙа, башҡалар күреп ҡалмаҫ элек, тиҙ генә һыуға ебәрә һалам мин ундай ыуаҡ балыҡтарҙы. Әммә был юлы юл уңманы, йүнле балыҡ тотоп булманы. Берәү генә эләкте. Шуны балта менән урта биленән сабып (ай-һай, тип уйлап ҡуям мин) рюкзакка һалып алдым. Бетәү килеш алып ҡайтҡанда шәп булаһы ине. Һыйҙырып ҡына булманы. Балыҡтың еллеһе эләкте шул. Әле сапҡан килеш ҡойрого ялпылдап тороп ҡалды әле рюкзак тышында. Ярай, насип иткәне ошолор, тип нәмәләремде йыйып йөрөһәм... яр сите бер аҙ боҫрап ята һымаҡ!

Кеҫә-меҫәһен ҡапшаған булып, минең һорауҙы көтә әңгәмәсем. Ысынлап та, нилектән яр сите боҫрап ята икән? Был юлы һорауым күҙ ҡарашым аша атылды, буғай.

- Айыу ята, ҡустым! Шуның йылыһы сығып тора. Һин нимә, айыу әллә самауыр торбаһы һымаҡ төтөн сығарып боҫрап йоҡлап ята, тип уйлайһыңмы. Юҡ, ҡустым, өңдән һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылы сығып тора. Уны бик үткер күҙле кешеләр генә күрә ала (үҙен күҙ уңында тотҡаны һиҙелеп тора). Бар эшемде ташлап киттем өң янына. Ысынлап та, айыу өнө булған. Эт бәхетле кеше икәнмен үҙем дә, өңдә айыу ҙа бар! Хәҙер берәй нисек алырға кәрәк уны. Саптым ауылға.

Әңгәмәсем тағы минең һорау биргәнде көтә. Ысынлап та, нишләп сапти икән ул ауылға?

- Эй, ҡустым, айыу алыу һиңә тауыҡ бото кимереп ултырыу түгел. Уны яңғыҙ ғына алып булмай. Оҫта һунарсылар кәрәк. Бәхеткә ҡаршы, өмөт итеп барған кешеләр өйҙә булды. Бер аҙҙан дүртәүләп кире килеп тә еттек. Шунан керештек өсәүләп өңдө соҡорға, ә беребеҙ ситтәрәк мылтыҡ менән әҙер тора. Бер мәл үкереп айыу килеп сыҡмаһынмы... Былай тиҙ генә сығыр тип кем уйлаған. Кемуҙарҙан ситкә һибелдек. Беҙҙең ыңғайға мылтыҡлы иптәшебеҙ ҙә бер аҙым ситкә һикерҙе лә ... шул ыңғайы артҡа ҡоланы ла китте. Ярай әле, айыу беҙгә ташланманы, туп-тура урманға елдереп инеп китте.

Был юлы һорау биргәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым: нишләп мылтыҡлы һунарсы ҡолап киткән икән?

- Эй, ҡустым, урманда төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр булып тора шул. Эргәләге ҡайындың ботағын сабып, шунда фуфайкаһын элеп торғайны. Ҡапыл артҡа һикергән ыңғайы шул ботаҡҡа арҡаһы менән төкөгән дә ҡуйған. Балта менән сабылған ботаҡ осо ослo була ла инде. Ауыртыуҙан бигерәк тертләүҙән ҡолап киткән ул.Тынyслана алмай, апаруҡ ҡына ултырҙыҡ әле. Бер аҙ тынyслана төшкәс, йәлап айыу эҙенән киттек. Эй, барабыҙ, эй, барабыҙ. Ҡыуып етеп булмай ҙа ҡуя. Биш-алты саҡырымдан саҡ ҡыуып еттек тегене. Был юлы һунарсыбыҙ һынатманы. Әллә ҡайҙа китеп барған айыуҙы бер атыуҙа сәсрәтә атты! Алып ҡайтыуы ла ыңғай килеп сыҡты. Тиҙ генә кәшмәк бәйләп (биш-алты ағасты бергә бәйләп эшләнгән һал кәшмәк тип атала), шунда айыуҙы һалып, эңерләтеп кенә ағып килдек тә төштөк ауылға.

Шул саҡ мин, әһә, тотолдоңмо, тигән ҡиәфәттә һорай ҡуйҙым: "Иртәнсәк кенә боҙ тишеп балыҡ тотоп йөрөй инегеҙ түгелме һуң?" Бер килке өндәшмәй ултыра биргәс, әңгәмәсем әйтеп ҡуйҙы:

- Дөрөҫ һорау биреп, тыңлап ултыра белеү үҙе бер һөнәр, ҡустым!..

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

✓ *Шундай хәлгә төшөп, шундай кимәлгә барып еткәнбеҙ - миһырбанлылыҡ, итәғәтлелек, изгелек онотола бара, ят - яттан, дуҫ - дуҫтан, туған - туғандан, хатта бала ата-әсәнән сәғәтлек-минутлыҡ эш өсөн дә мәгәрис талап итә.*



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# МӘГӘРИСҺЕҘ ГЕНӘ...

## ярҙам итеү йолаһына ҡайтайыҡ!

**Хисмәтте төн уртаһында ғына таптылар. Ауылға ҡайғылы хәбәрҙе йылға туғайына костер яғырға йыйылған йәш-елкенсәк алып ҡайтты. "Алтай" тракторы, көҙҙән быуылған, яҙғы ташҡын мәлендә лә йырылмай ҡалған быуаның урта тәңгәлендәге текә ярҙан төшөп, мороно менән ҡаҙалған...**

Ҡайғылы хәбәр төнгә ауылда таралып, фараз итеүҙәр башланғанда, өс бала әсәһе, йәш ҡатын Нәфисәнең ҡайнар йәштәренә быуылып, күҙҙәре томаланғайны. Был ике көнгә һуҙылған мәхшәрҙең шулай осланырын һиҙемләгәнгә-тойомлағанғамы, тол ҡатын "белдем, белдем" тип ҡысҡырып, ҡулдары менән өҫтәлдә төйә-төйә, үҙен тыя алмай ярһыны, сәстәрен йолҡто...

Үткән яҙ, әмәлгә ҡалғандай, халыҡтың картуф ерен һөрөүҙе Хисмәткә йөкмәттеләр. Яңыһы сәсеү эштәренән артмай, ә был трактор ҡыйралһа ла үкенесле түгел, тип уйланы, ахрыһы, бригадир. Был эштең ни икәнлеген яҡшы тойомлаған Нәфисә, ирен эскенән ҡурсаларға теләп, идара йортона ла барып ҡараны, бригадирҙан был эшкә уны тәғәйенләмәүен дә инәлеп һораны, тик ышандыра, күндерә генә алманы - түрә халҡы кемде ҡайҙа эшкә ҡушырға үҙе белә шул. Унан, элеккесә, халыҡ та, тракторсы үҙе лә эш алдынан ныҡлап иҫкәртелде, киҫәтелде. "Араҡы менән шаярыусылар, һыйлаусылар була ҡалһа, үҙегеҙгә үпкәләгеҙ. Шул минутта эште туҡтатасаҡбыҙ, Хисмәтте иһә хеҙмәт хаҡынан мәхрүм итәсәкбеҙ..."

Ауылдың бер осонан төшөп, эшкә керешә Хисмәт - ярты көндә әллә күпме баҡсаны һөрөп ташланы. Иҫкәртеү иҫкәртеү менән дә, ауылдаштары барыбер яман йоланан, ҡанға һеңгән ғәҙәттән тыйыла алманы - эше бөткәс, шешәһен, уға өҫтәп, закускаһын һуҙҙы. Ҡул һелтәп, кире ҡағып та маташты Хисмәт, тик, ғәҙәт буйынса, һыйлаусылар өҙмәне лә ҡуйманы, үпкә белдерҙе.

- Ал инде, ҡулымды мәхрүм итмә. Әле эсмәһәң, кисен бер-ике рюмка төшөрөп алырһың, йә берәй йомошоңа булһа ла ярар, - тип ҡырталаштылар. - Белерҙәр тип хафаланма - һин күр ҙә мин күр...

Ҡаршы тора алманы, һынды ул - ҡараңғы төшөр алдынан ярайһы уҡ шешә, ризыҡтар йыйҙы. Был кәсептең ни икәнен белгән эскесе таныштоноштары, һалырға яраткан дуҫтары, емтеккә йыйылған ҡоҙғон кеүек, Хисмәтте шул арала һырып алды. Күҙ бәйләнгән мәлдә, йәшел үләнгә ултырып, мәжлес ҡороп ебәрҙеләр - әлеге хәмер, татлы ризыҡтар күҙгә лә күренмәй ҡалды, "һә" тигәнсе юҡҡа сыҡты. Ул ғына түгел, һый хужаһы (ул тапҡан мал бит) Хисмәт үҙе көскә-көскә ҡайтып ауҙы - ҡатынының күҙ йәштәрен күреү түгел, һуҡраныу һүҙҙәрен дә ишетмәй, әүен баҙарына китте...

Иртән башы сатнап килеп уянды. Ауыҙына тәғәм ризыҡ та ҡапмай, тракторын ҡыҙҙырҙы ла вәғәҙә иткән кешеһенә китте. Кисәге "суфый" Хисмәт түгел ине был юлы - эшкә керешкәнгә тиклем уҡ баш төҙәтеп алды, бер аҙҙан тағы өҫтәп, күңелен күтәрҙе. Тик артабанғы пландарын кәләше өҙҙө - имсәк балаһын әхирәтенә ҡалдырып, иренең тракторына ултырып уҡ алды Нәфисә, һыйлаусыларҙы ла, аңһат ҡына һыйланырға теләүсе иратты ла тракторға яҡын ебәрмәне. Күпме генә һаҡламаһын, ауыҙына яман ризыҡ алған ир барыбер яйын тапты, рәтен сығарҙы. Аҙағыраҡ, тамам ҡыҙмаса булып алғас, Нәфисәнең ялыныу-ялбарыуына ла иғтибар итмәне, картуф ере хужаһынан үҙе далаулап алып эсте. Әлеге фажиғә тап шул мәлдәрҙә, ике ут араһында янған ҡатыны балаһын имеҙергә генә ҡайтып киткән ваҡытта булды - һыуы рәтләп тартылмаған йылға аша сығырға ынтылғанда, трактор соҡорға тура килде...

Мәгәрис... Был һүҙҙең этимологияһын төплө өйрәнгән, уның асылына төшкән, әһәмиәт биргән кеше лә юҡтыр, моғайын, әммә уның халыҡ араһында мәғлүм булған мәғәнәһе һәммәбеҙгә билдәле. Ул - башҡарылған йә иһә башҡарыласаҡ эш, күрһәткән хеҙмәт өсөн, спиртлы иҫерткес эсемлектәр менән иҫәпләшеүҙе аңлатыр булыр. Эйе, бер генә һүҙ, бик бөрәйәле, киң мәғәнәгә эйә, һушынды алыр һүҙ. Уның көсө, ҡөҙрәте самалаҙы аша.

Әҙәми зат араһында әлеге мөнәсәбәттәр, үҙ-ара иҫәп-хисап, дөрөҫөрәге, алама ғәҙәт, яман сир ҡасан барлыҡҡа килгәндер зә йәшәйешебеҙгә, тормош-көнкүрешебеҙгә ҡасан тамырланғандыр - әйтеүе ҡыйын, әммә бөгөн беҙ мәгәрисһеҙ йәшәй алмаҫ хәлгә еттек. Ул беҙҙе быуа, тонсоҡтора, унан йырылырға көс тә, форсат та юҡ. Эйе, мөнәсәбәттәребеҙҙең араланыуыбыҙ һәм бәйләнешебеҙҙең бер үлсәмәнә, эталонына әүерелде ул. Шундай хәлгә төшөп, шундай кимәлгә барып еткәнбеҙ - миһырбанлылыҡ, итәғәтлелек, изгелек онотола бара, ят - яттан, дуҫ - дуҫтан ғына түгел, туған- туғандан, хатта бала ата-әсәнән сәғәтлек-минутлыҡ эш өсөн дә мәгәрис даулай, талап итә. Һис юғында, күп саҡ шуға иҫәп тотоп, өмөтләнеп хеҙмәт күрһәтә. Ауыл өсөн дә, ҡала өсөн дә был берҙәй ауырыу, берҙәй бәлә. Был сирҙән бигерәк тә ауыл яфалана, нужалана. Унда, ысынлап та, бер генә эш тә мәгәрисһеҙ эшләнмәй һәм атҡарылмай. Крәҫтиән өсөн иң мәшәҡәтле, иң кәрәкле эштәрҙе - бесән, һалам килтереү, ағыулыҡ ташыуҙы мәгәрисһеҙ эшләү турағында уйлау ҙа яҙыҡ. Ни генә ҡылайым тиһәң дә "ярты" кәрәк, уны ултыртыу - мотлаҡ. Был - яҙылмаған, әммә, һис шикһеҙ, бойомға ашырға тейешле ҡанун. Уны бер кем дә боҙмай, боҙорға ла теләмәй. Тәүәккәлләгәндә, ниәтләгәндә лә булдыра алмаҫтар ине, сөнки быға батырсылыҡ иткән кешене бик күп яфалар, нужалар, михнәттәр көтәсәк. Нисек тиһегеҙме? Бик ябай: уға бер кем дә ярҙамға бармаясаҡ, эшен эшләмәйәсәк, хеҙмәтен күрһәтмәйәсәк, башҡалар араһында уны "аҡ ҡарға" яҙмышы көтә. Быңдай кешеләрҙе мин үҙем дә күргәнем, осратҡаным бар. Ундайҙарға, ғәҙәттә, "карун" исеме йәбештерелеп, улар үҙ алдына йонсоп, нужаланып көн күрә, башҡаларҙың хеҙмәтенә, ярҙамына өмөтләнә алмай. Әйткәндәй, әлеге мәгәрис ҡараусыһыҙ, ярҙамсыһыҙ ҡалған кешене бигерәк ныҡ ҡаҡшата - әҙәмсә донъя көтәйем тиһәң, әлеге араҡы кәрәк, бик күп кәрәк...

Ҡала кешеһе, тәү ҡарамаҡҡа, әлеге мәгәрис шауҡымынан, уның тәьсиренән азат кеүек. Тыштан ғына шулай, асылда, бында ла уныһҙ ҡыл да ҡыбырҙатып булмай. Унһыҙ әлегәсә гараж, баҡса йорто һалдырырмын, тиреҫ алдырырмын тимә. Техникаһына түләгәндә лә һин уның хужаһы була алмайһың әле. Эш башлар алдынан, халыҡ әйтмешләй, тракторсыһын йә шоферын майларға-йәйларға кәрәк, шунда ғына йомошоңдо йомошлау форсаты тейә.

Эйе, әйткәнебеҙсә, мәгәристең көсө-ҡеүәте ҙур, баһалап бөткөһөҙ. Ул ҡулдарҙы сисә, складтарҙы аса, түрәләр ҡушмағанды эшләтә, булмаған, табылмаған әйберҙәрҙе таптыра, бер ниндәй документһыҙ, рөхсәтһеҙ эштәр ҡылдыра. Әйткәндәй, бөгөн теҙәләп тиерлек шәхси йорттарҙа мәгәристең "өләшө" бигерәк тә тос - нигеҙ урыны ҡаҙыуҙан алып, йортҡа күсеүгә, кәртә-ҡураны теҙәкләндереүгә тиклемге эштәрҙең береһе лә унан башҡа атҡарылмай. Ул сығымдарҙы әҙәм балаһы сығымдарға иҫәпләп тә бармай, сөнки, әйткәнебеҙсә, кеше уны хәҙер тәбиғи хәл тип ҡабул иткән, ғәҙәтләнгән, тормошобоҙҙоң, йәшәйешебеҙҙең ҡотолғоһоҙ бер мәшәкәте генә итеп күрә. Дөрөҫөрәге, уға күҙ йомғанбыҙ, күнгәнбеҙ. Сәбәбе билдәле: ҡанға һеңгән ҡылыҡ-ғәҙәттән арыныуы, айырылыуы, ай-һай, ҡыйын!..

Ниһайәт, мәгәристең тормошобоҙға килтергән мораль һәм физик зыянын да күрмәй, барламай булдыра алмайбыҙ. Ул көнкүрешебеҙҙең ауыр бер йөгө, дауаланмаҫ сире булып йөшәй. Иң ҡыҙғанысы: быуындан-быуынға күсә килә, "яҙылмаған ҡанун", йола рәүешендә йәштәргә тапшырыла. Физик ҡазаһы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Күпме кешенең байлығын һура, ғаиләһен туҙҙыра, татыулығын бөтөрә. Мәгәристең аҙағы оло ҡазалар, фажиғәләр менән осланмаһа, быларына күнергә лә булыр ине хатта. Шул арҡала күпме ғүмерҙәр өҙөлә, балалар етем ҡала. Һүҙ башындағы Хисмәттең яҙмышын ҡабатлаусылар аҙмы хәҙер? Йыраҡ йөрөйһө түгел - һәр ауылда, ҡалала тулып ята. Ҡайҙа бесән-һаламға барып, утын ташып, трактор менән әйләнгәндәр, ҡайҙа кирбес килтереп, гараж башы яһып, машина менән ҡолағандар. Был хаҡтағы мәғлүмәттәрҙе, яңылыҡтарҙы көн һайын ишетеп, ғибрәт алып торабыҙ. Хафаланабыҙ, әммә бынан һаман фәһем алып, һығымта яһай белмәйбеҙ.

Билдәле, бер ынтылғанда ғына был күренеш хаҡында барын да һөйләп бөтөү мөмкин түгел, тәрәнгә төшкән һайын, йөрәк яна, күңелде бушлыҡ биләй, һүҙ ахырында фекеребеҙҙе шундайыраҡ һығымта менән тамамлағы килә. Нисек кенә ауыр булмаһын, халыҡ мәгәрис ише сирҙән арынырға, "яҙылмаған ҡанун"дан баш тартырға тейеш. Уның урынын һәйбәт йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр алһын ине, тиген теләктә ҡалайыҡ. Ғорур, үҙенең киләсәген хәстәрләр көслө халыҡ ундай ғына дарманды табырға тейеш, табырға бурыслы. Бигерәк тә киләһе, йәш быуын хаҡына...

**Юнир КИНЙӘБАЕВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТ ТАРИХЫ ҺӘМ ЭТНОГРАФИЯҺЫ...

## башҡорт һәм татар ғалимдары хеҙмәттәрендә

**Крепостной право бөтөрөлгәндән һуң Рәсәйҙең иҡтисади һәм сәйәси тормошондағы үҙгәрештәр ғилми-техник прогреска этәргес була, белем биреүҙең, донъяуи мәҙәниәттең һәм гуманистик фекерҙең үҫешенә йоғонто яһай. Башҡорт халҡының мәҙәниәте демократик Рәсәй фәне һәм Көнсығыштың ижтимағи-сәйәси фекеренең ыңғай йоғонтоһо аҫтында үҫешә бара. Яңы формалашып килгән милли зыялылар араһынан төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы, филологияһы, ижтимағи фекере һәм традициялары буйынса ҡиммәтле хеҙмәттәр ҡалдырыусы ғалимдар һәм крайҙы өйрәнеүселәр үҫеп сыға.**

Неплюев исемендәге Ырымбур хәрби училищеһының көнсығыш телдәре уҡытыусыһы, көнсығыш телдәре буйынса "Башланғыс ҡулланма..." ("Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с кратким объяснением существующих в Оренбургском крае наречий башкир и киргизов") уҡытыу әсбабының авторы М.М. Биксурин Ырымбур крайының этнографияһын, фольклорын, иҡтисадын, ижтимағи үҫешен, мәҙәниәтен, көнкүрешен өйрәнеүгә ҙур өлөш индерә. Көнсығыш халыҡтарының матди һәм рухи мәҙәниәтен өйрәнеүсе ҡазаныштары өсөн башҡорттар араһынан беренсе булып Рус география йәмғиәтенең (РГО) ағза-хеҙмәткәре һәм уның Ырымбур бүлексәһенең мөхбир-ағзаһы итеп һайлана.

1870 йылда РГО-ның Ырымбур бүлеге ағзаһы С. Батыршин 200 башҡорт йырын һәм уларҙың русса тәржемәһен баҫтырып сығара. Башҡорттарҙың ауыҙтел ижадын өйрәнеүҙә 1895 йылда башҡорт мәҡәлдәре һәм әйтемдәре йыйынтығын баҫтырып сығарыусы М. Ҡыуатов ҙур эҙ ҡалдыра. 1890 йылда "Этнографическое обозрение" журналында П. С. Назаров менән авторҙашлыҡта М. Юлиев башҡорттарҙың матди һәм рухи мәҙәниәте буйынса ҡиммәтле материалдар баҫтыра.

Башҡорт эшмәкәрҙәренең тәүге тарихи хеҙмәттәре иҫәбенә XIX быуат башы шағиры Тажетдин Ялсыголдоң "Тәүәрихы Болғар" ҡульяҙмаһын килтерергә мөмкин. Унда башҡорт ҡәбиләләре һәм ырыуҙары тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр һаҡлаған шәжәрә бирелә. Китап башҡорттарҙың Урта Азия менән этник бәйләнеше тураһында ла мәғлүмәт һаҡлай.

XIX быуат аҙағы - XX быуат башында Рәсәйҙең төрки халыҡтары тураһында беренсе баҫма китаптар донъя күрә. Был авторҙар араһында Шиһабетдин Мәржәни, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ғәйнетдин Әхмәров, Ризаитдин Фәхретдинов, Морат Рәмзи, Закир Шакиров, Хәсән-Ғата Ғәбәши, Мөнир Һаҙыев, Зәки Вәлиди һ.б. була. Уларҙың хеҙмәттәрендә башҡорттарҙың килеп сығышы, "башҡорт" этнонимы, теле, таралыу территорияһы, ҡәбилә-ырыу составы, башҡа халыҡтар менән бәйләнеше, крайҙың топонимикаһы тураһында һөйләнелә. Мәҫәлән, "Ҡазан һәм Булғар тарихы буйынса сығанаҡ" китабының беренсе томында билдәле татар ғалимы, тарихсы, философ һәм мәғрифәтсе Ш. Мәржәни ирәкте ырыуының 21 быуынына сыҡҡан башҡорт шәжәрәһен килтерә. Китапта ғәрәп, фарсы авторҙарының боронғо һәм урта быуаттағы башҡорт ырыуҙарының таралып ултырыуы, уларҙың күрше халыҡтар һәм дәүләттәр менән мөнәсәбәте, хужалыҡ эшмәкәрлеге, инаныуҙары, ғәҙәттәре тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерелә. Билдәләүҙәренсә, һунынан донъя күргән барлыҡ татар һәм башҡорт авторҙарының хеҙмәттәре "Ҡазан һәм Булғар тарихы буйынса сығанаҡ"тың "балалары" булып тора.

**К. КӘРИМОВ.**

**(Дауамы бар).**

# ИРГӘ ХЫЯНАТ

## Йәки "Ай тотолған төндә"гә

**Әхмәр ҮТӘБАЙ: М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһы буйынса ҡуйылған спектаклдә 2011 йылдың ваҡиғаһы булырлыҡ премьера тип әйтергә була. Спектаклдә сәхнәгә театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов ҡуйҙы, рәссам-ҡуйыусыһы Варвара Чувина, музыкаль биҙәүсеһе - Илшат Яхин, хореографтары Сулпан Асҡарова менән Ярослав Францев. Баштан уҡ шуны әйтергә кәрәк: спектакль театр һөйөүселәрҙә һәм сәнғәт белгестәрендә төрлө фекер тыуҙырыуы менән иғтибарға лайыҡ. Югиһә, беҙҙә бит иғтибарға лайыҡ булмаған сәхнә әҫәрҙәре хаҡында ғына бер ни ҙә өндәшмәйҙәр, йә булмаһа, шаштырып маҡтарға керешәләр. Был осраҡта, ниңәлер, матбуғатта спектаклдең асылын аңларға һәм аңлатырға тырышыуҙан гәйре, уның тик кире, етешһеҙ яҡтарын табырға тырышыуға оҡшаш мәҡәләләр генә күренгеләп алды ла, аҙаҡ бөтөнләй тынып ҡалдылар. Әллә кемделер сәмләндерергә тырыштылар, әллә кемгәләр "күҫәк күтәрҙеләр". Ә миңә һәм минең менән спектаклгә барыусы дуҫтарыма премьера бик оҡшаны. Бигерәк тә автор әҫәренә яңыса ҡараштың барлыҡҡа килеүе һөйөндөрҙө. Эйе, тап шулай: режиссер трагедияны быға тиклем ҡуйыусыларҙан айырмалы рәүештә, баҫым нөктәләрен бөтөнләй икенсе урындарға ҡуйған. Хәйер, был хаҡта спектакль режиссеры Айрат АБУШАХМАНОВ менән ҡорған әңгәмәне уҡып белерһегеҙ.**

"Шоңҡар" журналына интервью ("Аусы ҡоштар затынан түгелмен". 1994, №4) әҙерләгәндә Мостай Кәримгә: "Һеҙ "Ай тотолған төндә" әҫәрендә Аҡъегет менән Зөбәржәтте далаға ҡыуып сығараһығыҙ. Был ваҡиғаны илгә килгән фажиғәнән арыныр өсөн бүреләргә ҡорбан биреү тип аңларғамы? Бындай йола боронғо халыҡтарҙа бар..." - тигән һорау биргәйнем, әҫәр авторы аптырабыраҡ ҡуйҙы. Сөнки уға бындай һорауҙы тәү башлап мин биргәнмен, ғөмүмән, әҫәрҙе яҙған ваҡытта ул был хаҡта бөтөнләй уйлап та ҡарамаған булып сыҡты. Шулай ҙа: "Әгәр ҙә мин был хаҡта яҙғанмын һәм ошо турала һорау бирәһең икән, миндә лә, һиндә лә йәшәй ул боронғолоҡ", - тип яуап бирҙе әҫәр авторы. Хатта авторҙың үҙе өсөн көтөлмәгән яңылыҡ булды минең был һорауым.

Был интервьюны ни өсөн иҫкә алдым һуң? Ни өсөн тигәндә, яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрен ижад иткәндә идея-тематик йүнәлеш хаҡында баш вата алмай, күберәк осраҡта әҫәре ваҡиғалары юҫығына эйәрә. Әйткәндәй, Мостай Кәримдең был әҫәре беҙҙең төп театрыбыҙ сәхнәһендә 1967 йылда Шәүрә Мортазина, 1992 йылда Рифкәт Исрафилов сәхнәләштергәндән һуң өсөнсө тапҡыр ҡуйыла. Шәүрә Мортазина менән Рифкәт Исрафилов трагедияның төп фекере итеп йолалар, ҡалыптар ҡорбаны булыу кешене, илде нимәгә алып килә, тигән фекерҙе үҙәк идея итеп алһа, Айрат, һин үҙеңдең спектаклеңдә баҫымды бөтөнләй икенсе урынға ҡуйғанһың һәм бының менән нимә әйтергә теләйһең?

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Бик ҡыҙыҡ һорау. Бына, мәҫәләң, Шекспирҙы ни өсөн һаман да ҡуялар һуң? Бәлки, автор, үҙе лә белмәйенсә, әҫәрҙәренә код һалып ҡалдырғандыр? Заман алышына бара уның әҫәрҙәрендә яңы фекерҙәр асыла бара бит. Бәлки, Мостай Кәрим дә үҙенең әҫәрҙәрендә, үҙе лә белмәйенсә, ошондай кодтар һалғандыр. Мин уның "Ай тотолған төндә" әҫәрен ҡуйыр алдынан был әҫәр менән бер нисә тапҡыр осраштым. Күп кенә спектаклдәрен ҡараным, студент саҡта Рифкәт Исрафилов сәхнәләштергән спектаклдә күмәк сәхнәләрҙә уйнаным. Шәүрә апай Мортазина ҡуйған вариантты күрмәнем, әммә уның нисек ҡуйылыуы хаҡында күп кенә яҙма сығанаҡта уҡыным. Ғөмүмән, Башҡортостанда был әҫәрҙе ҡуймаған театрҙар ҡалманы ла шикелле. Минеңсә, был әҫәр буйынса ҡуйылған барлыҡ спектаклдәр ҙә төп фекергә яһалған баҫым буйынса оҡшаш. Ҡыҫҡаһы, мин ҡуйған вариантта ла, тәүге ҡуйылған спектаклдәргәге кеүек үк, сюжет линияһы, фабула һаҡлана. Тик мин бөтөн ошо ваҡиғалар эсендә башҡа режиссерҙарҙың иғтибарынан ситтә ҡалған бер фекергә иғтибар иттем. Ул да булһа, Тәңкәбикәнең яуҙа йөрөгән иренә хыянаты. Уның шул хыянаттан ауырға ҡалыуын берәү ҙә белмәгән. Тәңкәбикә депрессия хәлендә булып, башҡаларға белдермәҫ өсөн ҡорһағын һығып бәйләп йөрөп, аҡылға бер төрлө Диуананы тыуҙырған. Башҡа спектаклдәрҙә был ваҡиға һүҙ менән әйтелеп, өҫтәмә мәғлүмәт рәүешендә генә үтеп китә. Был ваҡиға Тәңкәбикәнең тойғо-кисерештәрен биҙәй генә, фекер баҫымы ул урынға ҡуйылмай. Ошо хыянат миңә әҫәргә тотонорға этәргес көс булды ла инде.



**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Мине һинең спектаклеңдәге ике деталь һоҡландырҙы. Беренсеһе - күмәк сәхнәләге төрлө хайуан битлектәре кейгән ярымаллалар-ярымхайуандар образы, икенсеһе - ил ҡарарын сығарыусы аҡһаҡалдар образы. Хәҙер һинең был образдар менән нимә әйтергә теләгәнеңде үҙемсә аңлатып ҡарайым. Әйтәйек, Шәүрә Мортазина, Рифкәт Исрафилов спектакль ҡуйған заманда хайуан битлектәре кейгән персонаждарҙы сәхнәгә сығарыу мөмкин түгел ине. Сөнки ул саҡта соцреализм һәм коммунистик идеология ил граждандары алдына бөтөнләй икенсе маҡсат ҡуйҙы. Ә был персонаждарҙы хәҙерге көн күҙлегенән сығып ҡарағанда ҡабул итеп була. Сөнки массаларҙың аңы менән идара итеүселәр хатта тотош ил халҡын һоро төркөм, көтөү итеп күрә һәм эш итә башлай. Бында кешелеккә ҙур иҫкәртеү бар. Бөгөн Африка, Ғәрәбстан, Урта Азия илдәрендә, Европала шундай идара итеүҙәр бара һәм "дәрүиштәр" был йәһәттән ҙур ғына уңышҡа ла өлгәшә кеүек.

Мине һоҡландырған тағы бер күренеш: аҡһаҡалдар образы. Әҫәрҙә улар ир заттары, һиндә иһә - ҡатын-ҡыҙҙар. Мин был образдар артында һис бер ташламаға, килешеүгә килмәй торған, ҡатынан-ҡаты закондар сығарыусы милләттең Дәүләтен күрҙем. Бығаса мин сәхнәлә Дәүләт образының ошо кимәлгә еткерелеп эшкәртелгән сағылышын күргәнем юҡ ине әле. Быға тиклем ҡуйылған спектаклдәрҙә ҡарар сығарыусы аҡһаҡалдар комик планда ғына ине. Бында иһә, уларҙың хәрәкәттәре аныҡ, бер төрлө, улар автомат кеүек, тойғоға бирелмәй, кисермәй, ҡарар ғына сығара һәм уларҙың ҡарарын тыңлағандан һуң икеләнеүгә бөтөнләй урын ҡалмай. Беҙгә ошоға тиклем "Башҡорттарҙың дәүләте булмаған, тик Октябрь революцияһы ғына башҡортҡа үҙ дәүләтселеген төҙөргә мөмкинлек бирҙе", тигән фекерҙе көсләп тағырға маташтылар һәм маташалар. Бында иһә, беҙҙең милләттең дәүләтселеге йола-традициялар кимәлендә ныҡынған булған, тигән фекер тыуа. Тик дәүләтселеге булған халыҡтың ғына ошондай ҡанундары була ала. Мин спектаклдән һуң ошондай һығымталар яһаным. Дөрөҫ уйланыммы, әллә былар барыһы ла минең фантазия емеше генәме? Кем белә, бәлки, бер илле йылдан һуң яңы режиссер килеп сығып, күмәк сәхнәләге хайуан битлекле персонаждарҙы сит планета кешеләре итеп күрһәтер...

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Эйе, спектаклгә индерелгән өҫтәмә персонаждарға тап шундай фекер йөгө һалындың ла инде. Мин уларҙы уйлап сығарманым, автор әҫәренән алдым. Кешене малға тиңләү хаҡында пьесала күп әйтелә. "Беҙҙе малға һанағас, һатығыҙ, һуйығыҙ..." ти Аҡъегет. Мин спектаклгә хайуан битлекле персонаждарҙы индергән саҡта, бәлки, шул тиклем үк итеп уйламағанмындыр, был ҡарарға интуитив рәүештә килгәнмендер, әммә дөрөҫ эшләгәнмендер тип уйлайым. "Беҙ бит мал түгел, беҙ бит тере кешеләр", тигән протест та бар был персонаждар уйынында. Миңә ҡалһа, бындай идара һәр ваҡыт булған. Совет осоронда был идара идеология аша тормошҡа ашырылһа, Америкала был ролде "демократия" төшөнсәһе башҡара. Минеңсә, кешелек йәшәгәндә был ҡаршылыҡ һәр ваҡыт буласаҡ. Кеше алдына һәр ваҡыт: "Кем һин, үҙ һүҙеңде һүҙ итерлек кешеме, әллә башҡалар ыңғайына йөрөүсе көтөү ағзаһы ғынамы?" - тигән һорау һәр ваҡыт ҡуйылған һәм ҡуйыласаҡ.

Аҡһаҡалдар әҫәрҙә комик планда бирелгән. Ҡарттарҙың береһе ашап-эсеп, икенсеһе эсен тырнап ҡына ултыра, өсөнсөһө нисә йәштә бисә ҡуйынына инеүе менән маҡтана. Быға тиклемге спектаклдәрҙә аҡһаҡалдар образы әҫәрҙә нисек яҙылһа, шул рәүешле бирелде. Йәйгеһен бер рәссам менән Шүлгәнташҡа барғайныҡ. Шунда экскурсовод мәмерйә стенаһындағы ҡатын-ҡыҙ символы булған өсмөйөштәр хаҡында аңлатып һөйләгәндә матриархат дәүерен иҫкә алды һәм бөгөн дә шул уҡ замандың кире әйләнеп килеүен әйтеп ҡуйҙы. Ошонан сығып, Тәңкәбикә идара иткән йорттағы закондар сығарыусы аҡһаҡалдарҙы ҡатындар менән алмаштырыу идеяһы тыуҙы ла инде...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Ә бына һин, Айрат, спектакль өҫтөндә эшләгәндә Тәңкәбикәнең иренә хыянатын аҡлай алырлыҡ

*Кешене малға тиңләү хаҡында пьесала күп әйтелә. "Беҙҙе малға һанағас, һатығыҙ, һуйығыҙ..." ти Аҡъегет. Мин спектаклгә хайуан битлекле персонаждарҙы индергән саҡта, бәлки, шул тиклем үк итеп уйламағанмындыр, был ҡарарға интуитив рәүештә килгәнмендер. "Беҙ бит мал түгел, беҙ бит тере кешеләр", тигән протест та бар был персонаждар уйынында. Миңә ҡалһа, бындай идара һәр ваҡыт булған. Совет осоронда был идара идеология аша тормошҡа ашырылһа, Америкала был ролде "демократия" төшөнсәһе башҡара. Кеше алдына һәр ваҡыт: "Кем һин, үҙ һүҙеңде һүҙ итерлек кешеме, әллә башҡалар ыңғайына йөрөүсе көтөү ағзаһы ғынамы?" - тигән һорау һәр ваҡыт ҡуйылған.*

✓ *Мостай Кәримдең был әҫәрҙәге иң яратҡан персонажы Шәфәҡ булған, тиҙәр. Шәфәҡ ныҡ өҙгөләнгәндә лә үҙен тыя ала. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һыҙаты Шәфәҡтә Тәңкәбикәгә ҡарағанда көслөрәк.*



сәбәп хаҡында уйланманыңмы? Нимә генә тимә, ниндәй генә быуатта йәшәһә лә ҡатын-ҡыҙ ҡатын-ҡыҙ булып ҡала...

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Ысынлап та, ни өсөн Тәңкәбикә ире яуға киткәс, уға хыянат иткән? Дәрүиш уға был хыянаты тураһында әйткәс, Тәңкәбикә ҡойолоп төшә. Ул үҙе килене Шәфәҡкә "Ирҙе яуға оҙатмайҙар, ҡаршы алмайҙар", тип, тойғоларын эсендә тоторға өйрәтә. Әммә үҙе йәш сағында был ҡағиҙәне үтәмәгән булып сыға бит. Ире яуға киткәс, ул нык ҡайғырған, әммә бер йыл үтеүгә ул икенсе бер иргә ғашиҡ булған. Ул йәшлегендә кисергәндәренән, хаталарынан бөгөн килеп балаларын араларға тырыша. Шуға күрә ул мөхәббәтте кешегә зыян килтереүсе тойғо тип аңлай.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Ысынлап та, ни өсөн Тәңкәбикә был юлға барған? Сөнки уны үҙенең теләге буйынса түгел, йола ҡушыуы буйынса кейәүгә биргәндәр. Аҡъегет менән Зөбәржәттең яҙмышын йола ҡанмаған. Ә ни өсөн уны аҡһаҡалдар йортҡа башлыҡ итеп һайлап ҡуйған һуң? Сөнки ул көслө һәм ҡаты ҡуллы. Ҡасандыр ҡылған хыянатын йәшерер өсөн дә ул үҙен ошондай ролдә тотоп йәшәргә мәжбүр, хатта балаһы Диуананы ла ҡосағына алып, бала итеп һөйөүҙән мәхрүм.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Минеңсә, әҫәрҙең текст аҫтында ир-атҡа ҡарата шундай өндәмә лә яһала, дәғүә лә белдерелә кеүек: яуҙарҙы ҡатын-ҡыҙ башламай. Һеҙ үҙегеҙ уйлап сығарған һуғыштарҙа ҡатнашып, оҙайлы йылдар буйына яуҙарҙа булып, ҡырылып, илде таяуһыҙ ҡалдырған ваҡытта тәбиғәт тарафынан әсә булыр өсөн яратылған ҡатын-ҡыҙҙың ил-йорт менән идара итергә тырышыуы бына нимәгә килтерә. Шуның өсөн дә һинең әҫәр аҙағында Тәңкәбикәнең ире менән тере аттың сәхнәгә килеп сығыуы үҙ-үҙен аҡлай төҫлө. Унда шундай аңлатма ла һалынған кеүек: "Әле булып үткән ваҡиғалар барыһы ла ирҙәр яуҙа саҡта булды..." Үҙәренсә, теге донъяла бөтә нәмә ғәфү ителә. Спектаклдең финалы ошолай булырын мин эшкә тотонмаҫтан алда уҡ белә инем. Был хәл пьесала юҡ, әммә логик яҡтан ҡарағанда иренең ошолай килеп инере булған кеүек тойола.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Кемгә нисектер, мин һинең спектаклеңдә бөтөнләй башҡа Дәрүиште күрҙем. Алмас Әмиров үҙе лә актерлыҡ һәләтен ҡулланып, был персонаждың бығаса автор ҙа, тамашасы ла тоя алмаған сифаттарын аса алды кеүек. Бығаса ҡуйылған спектаклдәрҙә Дәрүиш хәйләкәр, аҫтыртын зат кеүек күренһә, бында ул Иблис һынланышын ала. Ул үҙенә Шәфәҡ кәрәк булған өсөн генә ошондай юлға бармай, ә үҙенең йола-традициялары менән, үҙ дәүләтселеге менән йәшәп ятҡан халыҡты эске яҡтан тарҡатыу, көтөүгә әйләндереү маҡсатын ҡуя.

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Алмасты Дәрүиш роленә алғанда мин башта нык шикләнгәйнем. Күберәген ул үҙе шикләнде, башта аптырап та кеше икәнен Шәфәҡ кенә аңлай һәм уны йәлләп аяҡтарын һөртә. Дәрүиш үҙенең маҡсатына өлгәшә, әммә был ғәмәленән ҡәнәғәтлек таба алмай. Шәфәҡтең ҡулын һорауы ла уға һылтау ғына. Финалда ул үҙе кеүек ярымхайуандар рәтенә баҫа, уларҙың битлеген кейә. Алмас, минеңсә, бына ошондай образды тыуҙыра алды.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Дәрүиштең маҡсаты тағы ла ҙурыраҡ: ул ошо илдең ҡанундар сығарыусы аҡһаҡалдар ҡоронан Аҡъегет менән Зөбәржәтте далаға ҡыуыу хаҡындағы ҡарарын сығарта, йәғни дәүләттең закондар сығарыусы Юғары ҡорон ҡулға төшөрә. Беҙ халҡыбыҙ тарихының шундайын ирекле осорон да беләбеҙ. Халҡыбыҙ Тубылдан Волгағаса тиклем ике ҡитға араһында һауалағы ҡоштай, һыуҙағы балыҡтай азат рух хозурында көн иткән. Әммә яйлап-яйлап еребеҙгә ситтәр килә башлаған, килмешәктәр үҙҙәре менән халҡыбыҙҙы эске яҡтан тарҡатыусы идеологияны ла алып килгән. Дәрүиштең был балаһы ғына түгел, ә күңеленә йәшерелгән гонаһының сағылышы, иләүҙе фажиғәгә алып килеүсе персонаж. Диуана тағы ла хәҙерге замандың бер күңелһеҙ хәлен иҫкә төшөрә. Ни өсөн беҙҙең илдә ҡот, бәрәкәт юҡ? Сөнки кешеләр үҙҙәренең гонаһын йәшерер өсөн ҡарттар, ғәриптәр, етем балалар йорттарына төҙөй. Был хәл шундай һығымта яһарға мәжбүр итә: диуанаһын, ҡарт-ҡороһон, етем балаһын аҫрай алмайынса, ситкә типкән ауылға, илгә бәлә килә.

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Ысынлап та, беҙҙә диуаналарҙы махсус йорттарға, дауаханаларға йәшерәләр. Бындай шарттарҙа ундай ауырыуҙарҙың сире аҙа ғына. Ә Америкала булғанда мин уларҙың диуаналарҙы, киреһенсә, йәмғиәт эсенә сығарырға тырышыуҙарына шаһит булдым. Аэропортта теркәү үткәндә сират йыйылып китте. Яҡынлашҡас, ҡараһам, унда билеттарҙы һәм документтарҙы тикшереүсе ике аэропорт хеҙмәткәре янында тәпәш буйлы диуана баҫып тора. Уның бурысы -

# ИЛГӘ ХЫЯНАТМЫ?

**яңыса ҡараш**

ҡушыуы буйынса хәл итергә тырышыуы был йәйләүҙә трагик ситуация тыуҙыра һәм Ай тотола. Әйткәндәй, ошо уҡ йола-традициялар арҡаһында халҡыбыҙ меңәр йылдар үҙ-үҙен, әхлағын, рухын юғалтмай һаҡлап ҡалған да инде. Әҫәр буйынса бығаса ҡуйылған спектаклдәрҙә йола ҡоло булыуҙың нимәгә алып килеүе төп фекер итеп үткәрелһә, һин бер кешенән, был осраҡта, ҡатын-ҡыҙҙың иренә хыянаты, иртәмеһуңмы, тотош ырыуҙы трагик хәлгә алып килә, тигән фекерҙе үткәрәһең. Бында шулай уҡ халыҡтың "Иргә хыянат - илгә хыянатҡа тиң" тигән аҡылы ла сағыла. Бер генә гонаһ бөтә илгә бәлә килтерә.

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** "Ата-әсәнең гонаһы өсөн балалар яуаплы түгел", ти урыҫтар. Әммә был осраҡта әсәнең әллә ҡасанғы хыянаты өсөн әле килеп балалары һәм башҡа туғандары яуап тота. Элекке ҡуйылыштарҙа йола-традициялар иҫкелек ҡалдығы итеп ҡаралып, Аҡъегет менән Зөбәржәт инҡилапсылар итеп кәүҙәләндерелһә, мин төп фекер баҫымын Тәңкәбикәнең хыянатына күсерҙем. Ни өсөн балаларын яҡларға ташланмай ул? Ни тиһәң дә, ул бит әсә кеше. Мине был һорау бик нык борсоно. Элек Тәңкәбикәне уйнаған артистар олораҡ ине. Ә бит әҫәрҙә ул әбей түгел, ә урта йәштәрҙәге ҡатын йәшендә. Ул, бер яҡтан, әсә, икенсе яҡтан, ил башлығы, уның ҡатынлыҡ танһығы ла

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Тап шулай. Икенсенән, Тәңкәбикә бер кемдән дә ҡурҡмай, тик яуҙа үлгән иренең рухынан ғына ҡурҡа. Ә ни өсөн Тәңкәбикә ире ҡайтҡас, уға хыянат итеүе хаҡында әйтеп, ғәфү үтенмәгән икән? Спектакль әҙерләгәндә лә артистар менән бәхәс тыуҙы. Ҡатын-ҡыҙ артистар: "Әйтмәй, дөрөҫ эшләгән",- тиһә, ир-егеттәр: "Әйтһә, таш менән бәреп үлтерһәләр, гонаһы юйылыр ине", - тигән белдереү яһаны. Шунда уҡ: "Әгәр ҙә иренә хыянаты хаҡында әйткән булһа, ире уны ғәфү итер ине",- тигән күҙаллауҙар ҙа ишетелде. Ә бит ире ҡатынының хыянатын белмәйенсә, бәхетле ир булып яуҙа үлеп ҡалған. Ире теге донъяға эләккәс, Тәңкәбикәнең хыянаты хаҡында барыбер беләсәк бит инде. Ире, бәлки, уны яратҡандыр ҙа, теге донъяла көйө ҡатынын ошондай кәмһетелеүҙән араларға итәлер. Шуға күрә финалда ул Тәңкәбикәне үҙе менән алып китер өсөн һыбай килә. Нимә генә тимә, әйте-

йөрөнө. Ролде уның ихтыяры ҡаршылығы аша тыуҙырҙыҡ. Ул башта Дәрүиш олораҡ булырға тейеш, тип үҙен был ролдә тойманы. Алмас тәбиғәте менән комик пландағы актер. Тәүге репетицияларҙа йыуаш ҡына, көлкөлө генә бер кеше килеп сыҡты. Әҫәрҙә лә Дәрүиш башта ыңғай ғына герой кеүек, ул хатта Диуана менән уйнай-шаяра. Ундағы амбициялар һуңыраҡ асыла. Алмас менән дә шулай килеп сыҡты, ул репетициянан репетицияға асыла барҙы. Мостай Кәрим был әҫәрҙе яҙған саҡта ул заман ҡанундары буйынса геройҙарын "ыңғай" һәм "киреләр" рәтендә төркөмләгән. Башта беҙ ҙә Дәрүиште "йәлләп ҡарарға" тырыштыҡ. Дәрүиш утыҙ йыл элек Тәңкәбикәнең иренә хыянатына шаһит булһа ла, тормошон дингә, Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итеүгә бағышлап ҡарай һәм һуңынан үҙен бушҡа йәшәгән кешеләй тоя. "Бәхетһеҙ кеше бик ҡурҡыныс кеше", тигән бер аҡыл әйтә. Бәхетһеҙ кеше бәхетлеләрҙе күрә алмай, уларға хеҙмәтсе булып яллана ла, бәхетле ғаиләне тарҡатыу эшенә тотона. Дәрүиштең бахыр һәм бәхетһеҙ йортҡа килеүен ошо тарихи факт менән дә бәйләргә була. Халыҡ, милләт, әгәр ҙә үҙенең ҡанундары буйынса ғына йәшәһә, һаҡлана ала, әгәр ҙә ситтән килгәндәр йоғонтоһона бирелһә, юҡҡа сыға, тигән фекер ҙә үткәрергә була бында.

Ә шулай ҙа һинең күҙлектән ҡарағанда "Ай тотолған төндә" спектаклендә төп баҫым ҡайһы урынға һәм ҡайһы персонажға ҡуйылған?

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Төп баҫым бер нисә персонажда: Тәңкәбикәлә, Дәрүиштә, шулай уҡ минең өсөн Шәфәҡ тә эпизод ҡына түгел. Күп спектаклдәрҙә Шәфәҡ шәүлә һымаҡ ҡына күренеп ҡала. Мостай Кәримдең был әҫәрҙәге иң яратҡан персонажы Шәфәҡ булған, тиҙәр. Шәфәҡ ныҡ өҙгөләнгәндә лә үҙен тыя ала. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һыҙаты Шәфәҡтә Тәңкәбикәгә ҡарағанда көслөрәк. Ул сая ла, ғүмере үтеп барғанын аңлап, бала табып ҡалырға теләп, хатта Аҡъегеткә яҙмышҡа буйһонорға тәҡдим яһай.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Диуана образы ла бик ҡыҙыҡлы. Диуана, минеңсә, Тәңкәбикәнең

*Диуана образы ла бик ҡыҙыҡлы. Диуана, минеңсә, Тәңкәбикәнең балаһы ғына түгел, ә күңеленә йәшерелгән гонаһының сағылышы, иләүҙе фажиғәгә алып килеүсе персонаж. Диуана тағы ла хәҙерге замандың бер күңелһеҙ хәлен иҫкә төшөрә. Ни өсөн беҙҙең илдә ҡот, бәрәкәт юҡ? Сөнки кешеләр үҙҙәренең гонаһын йәшерер өсөн ҡарттар, ғәриптәр, етем балалар йорттары төҙөй. Был хәл шундай һығымта яһарға мәжбүр итә: диуанаһын, ҡарт-ҡороһон, етем балаһын аҫрай алмайынса, ситкә типкән ауылға, илгә бәлә килә.*

билеттарға мисәт һуғыу һәм ситен йыртып биреү. Ҡайһы саҡ ул мисәтте яңылыш ситкә һуға, шунан башҡалар уға билетте кире һуҙа. Диуана үҙ эшен башҡарғас, эй, ҡыуанған була. Ә американлылар, был хәлде аңлағанға күрә, сабыр ғына сиратта баҫып торалар. Был осраҡта, билдәле, беҙҙең илдән килеүселәр йөҙҙәренә һәм телдәренә сабырһыҙлыҡ билдәһе сығара.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Айрат, ә һин нисек уйлайһың: Тәңкәбикә заманындағы ҡатын-ҡыҙ менән хәҙерге ҡатын-ҡыҙ нимәһе менән айырыла?

**Айрат АБУШАХМАНОВ:** Айырма әллә ни юҡтыр, тием. Шул уҡ ваҡытта Тәңкәбикә ябай ғына ҡатын булһа, уның йорто ошондай фажиғәне күрмәгән дә булыр ине. Тәңкәбикә сәйәсмән дә. Әммә ҡатын-ҡыҙға сәйәсәткә барырға ярамайҙыр, тип уйлайым. Сөнки ул сағында уның әсәлек хисе һәм иң тәүҙә ғаиләһе, балалары зыян күрә. Был осраҡта ирҙәр әсә ролен башҡара алмай.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Билдәле дин әһеле, халыҡ табибы Әхмәтйән Ишҡыуатов ағайҙан бер мәл: "Ҡасан беҙҙең илдә хөррият буласаҡ", - тип һорағайным, ул: "Рәсәйгә ҡатын-ҡыҙ президент булып торғас. Ҡатын-ҡыҙ ул әсә кеше, ә әсә кеше бөтөн балаларына ла тигеҙ ҡарай", - тип яуапланы. Бәлки, хаҡлыҡ барҙыр был һүҙҙәрҙә...



✓ *Ҡатын кешене ярты ҡартайтҡан - ғәмһеҙ ир ҙә, сей утындыр. Сей утынды яндыра алмай һәм бөтөнләй утынһыҙ ҙа нығыҡ ыҙаланы Сәғирә. Кәртә-фәләнде турап яҡҡан саҡтары ла булды.*



Йәйге селлә. Былай мәлдә, нығыҡ эҫелә, бигерәк тә ҡояш ҡыҙҙырғанда, һикһәнгә яҡынлашҡан ҡарсыҡҡа күләгәлә генә ултырырға ине лә. Мәгәр ул һис кенә лә ҡул ҡаушырып ултыра алмай. Быға өйрәнмәгән дә, күнекмәгән дә. Йәш сағындағы һымаҡ таң һарыһынан тора, самауыр ҡайнатып, сәй эсә, шунан йорт-ҡаралты, ҡул эштәренә тотона. Уға әле "ҡуй", "етәр", "ял ит" тиеүсе юҡ, үҙ ихтыярынса һәм ҡарамағынса көн итә. Хәләле Әғләм менән алты малай, ике ҡыҙ үҫтерҙе ул. Балалар иһә күптән бик алыҫта, ҡалала йәшәй. Кесе ҡыҙы ғына етмеш саҡырымда ятҡан ауылда тормош ҡормош. Һәр ҡайһыһының - үҙ ғаиләһе, үҙ хәстәрлектәре үә мәшәҡәттәре. Олораҡтары - үҙҙәре олатай-өләсәй. Шулай ҙа телефондан шылтыратып хәл белешеп, байрамдарҙа, ял ваҡыттарында килгеләп, өйөн рәтләп, кәртә - ҡураһын йүнәтеп торалар.

Етмешен уҙғанда, һикһәнен ҡыуғанда ла гөрләтеп донъяһын көтә ине әле Сәғирә ҡарсыҡ. Йәйҙәрен ейән-ейәнсәрҙәре килеп тула, улар менән мәж була. Өләсәй бешергән икмәкте, ҡоротло ашты, ойоткан ҡатыҡты, ҡойған буҙаны бик яраталар. Һөтө, ҡаймағы, әжегәйе, сейәле майы ла үтемле. Өҫтәл тирәләй бергә йыйылғанда айырыуса шәп тарта тирмәндәре. Яҡты йөҙ, йылы һүҙ, ихлас күңел менән үҫтерешәте Сәғирә балаларының балаларын. Инде буй етеп, өйләнешеп, үҙҙәре инәйатай. Хәҙер һирәк килгәстәре, ҡайһы берҙә өләсәләре танымай ҙа ҡуя уларҙы. Олоғайған һайын хәтере нығыраҡ томалана, күрәһең. Мәгәр әүәлгесә үҙен һаман да хужабикә итеп тоя һәм һис кенә лә йорт эштәренән бушамай.

Баҡсаһында бәрәңгеһенең гөл кеүек аҡ, күк сәскә атҡан, хозурлығы менән күңеленә әйтеп бөтә алмаҫлыҡ рәхәтлек биргән мәлен ярата Сәғирә ҡарсыҡ. Мәгәр ошо йәмде ҡаплап, әллә ни арала алабута, билсән, кесерткән, күҙлут, һарут күтәрелә лә китә. Абайламайыраҡ йөрөгәндәрҙең бил быуырҙан үҫә, бәрәңге һабағы ла күренмәй. Ҡарты иҫән саҡта орлоҡ шытмаҫ элек ерҙе әллә нисә рәт тырмата торғайны, ҡый-һай самаһыҙ ҡотормай ине. Бабайы юҡ шул хәҙер, биш йыл әүәл ҡапыл ғына әхирәткә китте лә барҙы. Бер көн төштән һуң тауға селеккә барып, һепертке бәйләне, йорт-ҡура эсен һеперҙе. Шунан өй алдындағы эскәмйәлә йәйге эштәрҙе барлап, оҙаҡламай бесән етәсәген, бесәнгә кемдәр киләсәген уйлап, гәпләшеп ултырҙылар. Эңер төшөр саҡта ҡаланан ялға уртансы улдары Йәмил ҡайтып төштө. Ҡыуанышып, сөйләп, серемгә талдылар. Таң һарыһында ҡыштыр - ҡыштыр иткәнгә уянып китте Сәғирә ҡарсыҡ. Ҡараһа, иҙән буйлап ҡарты ары - бире йөрөп ята, ниңәлер йөрәк тирәм ауыртып тора, ти. Тороп кейенгәнсе, йомшаҡ урындыҡҡа һырышҡан. Шул арала ҡабат йоҡоға сумған әллә?

- Әғләм, Әғләметдин, - тип өндәшеп, кейеменән тартҡысланы, әммә ҡарты уянманы. Сәғирә ҡарсыҡ соланда йоҡлап ятҡан улын һелкетте:

- Тор әле, тор, Йәмил. Атайыңа әллә ни булған.

Йәмил йоҡоһо осоп та етмәгән килеш тегеләй ҙә, былай ҙа итеп яһалма һулыш алдырырға, атаһын иҫенә килтерергә маташып ҡараны, әммә ҡарт иренен дә, бармағын да ҡыбырлатманы. Ул ҡарсығы кейенгәндә үк тауышһыҙ - тынһыҙ ғына теге донъяға үткәйне.

Әғләм менән хушлашырға балалары ла, туғандары ла килде. Бөтә йоланы үтәп, мәңгелек йортҡа оҙаттылар, һәйбәт кеше ине, йәне йәннәттә булһын, тинеләр. Киткән артынан китеп булмай, Аллаһы Тәғәлә ҡалғандарға сабырлыҡ, һаулыҡ насип итһә икән. Әммә бик үк насип итмәне.

Атаһын ерләгәс, бер-нисә көндән Йәмил ҡатыны Гөлгөнә менән бергәләп зыяратҡа ҡәбер ҡоймаһын буятырға барҙы. Тупраҡты тигеҙләп, көрәкте йәнәштәге ҡарт ҡайынға һөйәгәйне - ауҙы, торғоҙғайны - тере йәндәй, тағы ҡоланы. Йәмил шомланды, тәне земберләне. Ҡойманы буяғас, Гөлгөнә: "Буяу артып ҡалды", - тине. Нимә әйткәнен үҙе лә аңғармай, Йәмил: "Минең ҡоймаға ла етер", - тип ҡуйҙы. Гөлгөнәнең йөрәге жыу итеп ҡалды. "Кеше ҡурҡытып, юҡты һөйләп тораһың", - тигән булды.

Яҙмыштың, уның асылының, хәл-тороштоң илаһи нескәлектәрен әҙәм нәҫеле асыҡ ҡына итеп белеп, төшөнөп тә етмәйҙер. Әммә ниндәйҙер сихри тәьҫирҙәнме, әйҙәүҙәнме, Йәмил йорттоң тимер ҡапҡаһын семәрләп эшләп бөтөрҙө, бер көндә ат менән биш бәрәңге баҡсаһын, үҙҙәренекен дә, күршеләрҙекен дә, күмде һәм барыһын да аптыратып, түшәккә ауҙы. Көс-ғәйрәте ташып торған бәһлеүәндәй ирҙе ашығыс ярҙам машинаһы ҡала дауаханаһына алып китте. Ике аҙна ятҡас, иртәгә өйгә ҡайтам инде тигәндә, кисен ятыр алдынан тәмәке тартырға сыҡҡан һәм баҫып торған урынында, зыяраттағы көрәктәй ауып, йән биргән.

Атаһы әхирәткә күскәндән һуң ни бары егерме көн уҙғас, быға шулай уның артынан эйәреп, ҡараңғы донъяға китте лә барҙы Йәмил. Туғандарына осрашҡан һайын: "Мин һеҙҙе тыуһан йәшемә саҡырам әле", - тигән уҙаман. Күршекүлән уның көтмәгән вафатын шулай аңлатты: Әғләм ағай үткән мәлдә Сәғирә апай улын ҡапыл уятҡан икән, йоҡо аралаш атаһына ҡағылып, Йәмилдең ҡото осҡан икән...

Йәшен йәшәне, тип, Сәғирә ҡарсыҡ ҡартының гүргә инеүенә әллә ни бошонманы, ә Йәмилен уйлап, уның балиғ булмаған балаларын йәлләп янды, эстән көйҙө. Һуңғы йылдарҙа хәтирәләргә бирелеп, үткән ғүмерҙе барлағанда, йәшәйешкә төрлө ҡараш тыуғанда, һүҙгә килгәндә, Сәғирә ауыр саҡтарҙы иҫенә төшөрөп, үҙенсә ҡартына һеңгәҙгәнсе, һеңдергәнсе бернисә мәртәбә әйткеләне:

- Мин һине һәйбәтләп ҡарамаһам, тәрбиәләмәһәм, етмеште уҙыр инең, уҙмай. Анау үпкә сиреҥ менән иллегә лә етмәҫ инең. Тик минең арҡала ғына атайыңдың йәшенән күпкә уҙҙың. Һиңә йәшләй генә кейәүгә сығып, әрәм булдым. Сыҡмаһам, уҡыр инем, әллә кем булыр инем. Заманалар ауыр ине шул, заманалар...

* * *

Һай, ҡара иҫәпкә шәп ине Сәғирә. Һуғыш башланғас, ун дүрт йәшендә генә күмәк хужалыҡҡа хисапсы итеп ҡуйҙылар. Артабан да ауыл, мал-тыуар мөхитенән айырыла алманы. Быға хәтле Совет власы өсөн көнө-төнө сапҡан атаһы "халыҡ дошманы" ялаһы яғылып, төрмәлә үлеп ҡалғас, биш балалы ғаиләнең көнитмеше тағы ла нығыраҡ мөшкөлләнде. Нишләргә белмәй, туғандарымдың, инәйемдең хәлен еңеләйтәйем, артыҡ тамаҡ булмайым, тип, ун етеһе тулыр-тулмаҫтан кейәүгә сығырға ризалашты Сәғирә. Етеш ғаиләлә үҫкән Әғләм малай-шалай холҡонан да арынып бөтмәгәйне, уйындарға ҡойма аша һикереп ҡаса торғайны.

Ҡатын кешене ярты ҡартайтҡан - ғәмһеҙ ир ҙә, сей утындыр. Сей утынды яндыра алмай һәм бөтөнләй утынһыҙ ҙа нығыҡ ыҙаланы Сәғирә. Кәртә-фәләнде турап яҡҡан саҡтары ла булды. Эй күҙенән йәш субырланы, эй һыҡтаны. Мәгәр тормош һынауҙары тауҙай өйөлөп алда көткән икән. Көн итә-итә итәге бала менән тулды. Ҡайһы һандыҡ, ҡайһы өҫтәл өҫтөндә, ҡайһы мейес башында йоҡлай. Йәшәргә йүнле өй, мал-тыуарға аҙбараран юҡ. Йөҙ бәлә менән яңы өйгә бура бураҡкайнылар, үҙһүҙле, ҡаты бәғерле ҡайныһы менән ҡәйнәһе өндәшмәй генә һатып ебәргән. Ҡайныһы үтә уҫал, ҡырыҫ. Ашҡа интеккәс, килене Сәғирәне белмәгән, күрмәгән тарафҡа башаҡ йыйырға ебәрҙе. Өшөп ҡатып, урыҫтарҙан баҫтырылып, һынһыҙ булып ҡайтып йығылды ул. Әғләм иһә үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртҡан, гелән үҙ туҡһанын ғына туҡһан иткән ата-инәһенән хәләл ефетен һис ҡасан ҡурсаламаны, быға ҡыйыулығы етмәне. Сәғирә меҫкен бөтә ҡыйынлыҡҡа түҙҙе, ҡаршы һүҙ ҡатманы. Төртмә телле һеңлеһе генә: "Еҙнә, ир исемен күтәреп йөрөйһөң, ә әҙәмсә донъя ҡормайһың, көтмәйһең, бала әтмәләп ятырға ғына эшкинәһең", - тип Әғләмде сәнскеләп ала ине.

Урман ҡарауылсыһы булып торғанда, уҙған бал эсеп, һушынан яҙып, ҡарҙа оҙаҡ ятып, ҡаты һыуыҡ алдырҙы Әғләм. Үпкә сире менән йыш-йыш, оҙон-оҙаҡ дауаханала ятты. Шул арҡала бөтә донъя йөгөн яңғыҙы тартты Сәғирә, бер минут та буш торманы, әхирәттәре, күршеләре менән аралашырға, һөйләшеп ултырырға ла форсаты булманы.

Бер йәйҙе шифаханала ятып, ҡымыҙ эсеп, шәбәйеп ҡайтты Әғләм. Холҡо ла, үҙен тотошо ла үҙгәргәнгә оҡшай. Аҙна ла үтмәне, артынса ауылға сәсе ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған ҡатын килеп төштө. Буялған ирендәрен бүлтәйтеп, күҙен дә йоммай: "Шәфҡәт туташы булам, Әғләмдең сәләмәтлеген күҙәтергә килдем. Үпкә сире менән шаярырға ярамай", - ти. Туташ ҡашын һикертеп, ым яһаһа, ат егеп, урманға еләләр. Имеш, Әғләмде ҡарағай урманында йөрөтә, үпкәһен таҙартыр ылыҫ һауаһын һулата. Сәғирә аш-һыу әҙерләп биреп, оҙатып ҡала.

Был хәлгә ғәжәп итеп, ауылдаштары шыш-быш килә, төрлө хәбәр һөйләй башланы. Әхирәттәре, түҙемдәре бөтөп:

- Сәғирә, әллә бөтөнләй бер ҡатлыһың, әллә тома һуҡырһың инде, - тиҙәр. - Ҡыҫҡа сәс Әғләмеңдең шифаханала танышҡан нәмәкәйе бит...

- Шәфҡәт туташы, ти ҙә һуң...

- Ирендe аҙҙырған, һине мыҫҡыл иткән туташ. Элгәре көн еләк сүпләргә сыҡҡан Мәмдүҙә еңгәй ниндәй туташ икәнен үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтҡан.

- Эйе, эйе, ҡасып-боҫоп ғиш-ғишрәт ҡылалар. Әҙәмдән оялмайҙар, әстәғәфирулла тәүбә. Ҡайтар ҡыуып ул кәнтәйҙе!

Сәғирә һөмһөрө ҡойолоп, аҡайып ҡарағас, ҡыҫҡа сәс нәфрәтен тойҙомо, балаларын йәлләнеме, йәһәт кенә йыйынып ҡайтып китте. Әғләме, ат егеп, оло юлға сығарып ҡуйҙы.

Әлбиттә, балалары башлыкүҙле, үҙе олатай булғас, Әғләм нығыҡ үҙгәрҙе, илла яҡшы, һоҡланырлыҡ олатай булып китте, үҙен ғүмере буйы тормош мәғәнәһен төшөнөп йәшәгән уҙаман һымаҡ танытты, аҡыл өләште, кәңәш бирҙе, тәртипкә үә әҙәпкә әйҙәне, хәленән килгәнсә һәр кеменә булышты, уландарының тырышлыҡтарын хупланы, ҡарсығының да ыңғайына ғына торҙо, уның һәр йомошон ихлас башҡарҙы. Бына шулай донъя һәйбәтләнеп, һөйөнөшөп, сөкөрләшеп һәүетемсә генә йәшәп ятҡанда, Сәғирәһен яңғыҙ ҡалдырып китте лә барҙы Әғләметдине.

* * *

Ҡояш нуры - шәфҡәт ҡулы, тип, Сәғирә ҡарсыҡ көйләй-йырлай тағы ла бәрәңге баҡсаһына ыңғайланы:

*Исеме Шәмси Ҡояшым*
*Тыуа ул матурланып.*
*Киң болонға ризыҡ сәсә*
*Йәмләнеп, ғорурланып.*
*Исеме Шәмси Ҡояшым*
*Нурланып ҡына килә.*
*Йоҡламайыҡ шул сағында -*
*Ул беҙгә ризыҡ булә...*

Йылдың иң хозур миҙгелендә, бар донъя терелгән, теремекләнгән мәлдә, тик тороу һис кенә лә килешмәй. Эше барҙың ғына - ашы бар. Бәрәңге иһә - ауыл ерендә көн дә ашаған аш. Был хәҡиҡәт йәненә уйылған, йәшәү ғәҙәтенә әйләнгән Сәғирәнең. Шуғамы, һикһәнгә еткәнен дә һиҙмәй, өс көн буйы бил яҙмай утаны ла утаны баҡсаһын. Дүртенсе көндө, ғүмерҙә булмағанса хәле бөтөп, тәне ауырайып, лыпын ятты ла ҡуйҙы. Бер ваҡытта ла дарыу ҡапмаған, дауаланып ятмаған, сәғәт һымаҡ йөрөп торған кеше.

Һаулығы бығаса иҫ китмәле ине ҡарсыҡтың. Һимеҙ итте лә һоғона, ҡоротлап һөҙләклө һурпаны ла һемерә, буҙаһын, ҡымыҙын да... Тотһа, беләгендә ҡыҫа тота. Тулы биҙрә һыу ташый. Сәғәттәр буйы эйелеп тороп эш атҡара, "билем" тип "ыһ" та итмәй. Ен ҡағылғандай, уйламағанда, көтмәгәндә нимә булды уға? Ҡапылғара күтәрелгән ҡойон да шәм һымаҡ ағастарҙы һындырып, йолҡоп ташлай бит. Ошондайыраҡ күренеш ғүмер ахырына яҡынайғанда Сәғирә ҡарсыҡты яҙмыш һуҡмағынан яҙлыҡтырҙымы икән?..

Төпсөк улының улы, йәғни ейәне, елғыуарыраҡ егет, ҡаланан талсыбыҡтай ҡыҙсыҡ эйәртеп алып ҡайтты. Ника-



хһыҙ-ниһеҙ ҡушылып йөрөп яталар, имеш. Ата-инәһе хәмер һаҙлығына батҡан, аҙған-туҙған, төрмәгә лә эләккән бәндәләр, тиҙәр. Ҡыҙҙарының да рәте-сираты, морон төртөр урыны юҡтыр инде, ейәненә дегәнәктәй йәбешкән дә ҡуйған. Ғибрәт итеп, "Был ниндәй заман!" - тип, уфтанып ҡуя ҡарсыҡ. Уфтанырһың да. Ауылда эш юҡ. Аҡса артынан Себер сығып китеп, төпсөгөнөң ғаиләһе пыран-заран булды. Айҙар буйы ситтә йөрөгәс, үҙе тегендә, ҡатыны бында сит-ят менән сыуала. Буталды, болар ҙы донъялар, ярылды яҙмыштар. Айырылышып ҡуйҙылар балаларының бәхетен уйламай. Икеһе ике яҡта интегә хәҙер.

"Никахһыҙ йәшәү - гонаһ. Фатиха ҡылыу фарыз" тип туҡый торғас, ниһайәт, никах уҡыттылар. Туй мәжлесенә ейәне яғынан туғандарының береһен дә саҡырманылар. Күрәһең, ҡыҙҙың бәйелһеҙ нәҫеле менән осраштырырға теләмәнеләр. Бүләккә күпереп торған мендәрен тотоп, йәштәргә ҡот-ырыҫ теләргә өләсәй генә барҙы.

Туйға барыу Сәғиҙә ҡарсыҡ өсөн тәүбә ҡылырлыҡ булды. Шарылдаҡ ҡоҙасалар: "Беҙ түгел әбейҙәр эсә, өшкөрөп алған аҡсаға", - тип, оло ҡоҙағыйҙы эсергә ҡыҫтаны. Оло баштары менән холоҡһоҙҙар, тотанаҡһыҙҙар. Бер "араҡы мискәһе" боларып, хәмерен ҡарсыҡтың башына, түшенә түгеп бөттө. "Беҙҙе һанлаһаң, тот, тот!" тигәстәре, ниңәлер биреште, шайтан һыуын йотто. Ҡойондай ҡыҫтауға ҡаршы тора алмай, тағы ғолтолдатты. Башы әйләнгәс, тәнтрәкләй-тәнтрәкләй ҡайтырға сыҡты. Уны бер кем дә оҙатып ҡуйманы. Көс-хәл менән атлай торғас, һөрләктө һәм башы менән осло ташҡа барып төштө. Күршеләре шәйләгәндә, ҡарсыҡ иҫһеҙ, туйға ябынған байрам яулығы һыҙып алырлыҡ ҡан ине. Ошо хәлдән һуң Сәғирә ҡарсыҡ һиҙелер-һиҙелмәҫ яңылыша башланы.

* * *

Ауылдың шәфҡәт туташы, күнегелгәнсә, Сәғирә ҡарсыҡты яҡындағы Алтынтау ҡасабаһы участка дауаханаһына ебәрҙе, үҙ өҫтөнән мөллә төшөрҙө. Ҡайҙалыр ҡабаланған кәйефе ҡырылғанырыҡ ҡатынҡыҙ табип, әбейҙе ашыҡ-бошоҡ ҡына ҡарап, йөрәк гипертрофияһы һәм быға бәйле мөмкин булған хәүеф диагнозын ҡуйҙы. Шунан һуң уны ғүмерендә лә эсмәгән, ҡапмаған, ҡулланмаған онтаҡ үә шыйыҡ нәмәләр менән дауаларға керештеләр.

Иң тәүҙә яҡындараҡ йәшәгән кесе ҡыҙы менән уртансы улы килеп етте, улары туғандарына хәбәр итте. Йөрәге сирле, тип, инәйҙе ятҡан урынынан торғоҙманылар, хәжәтенә лә тышҡа сығарманылар. Дауалаусы табип, үҙе лә әллә ни төшөнмәйенсә, кәрәк-кәрәкмәгән матдәләрен тәғәйенләүҙе белде. Өҫтәүенә, баш ҡаланан ҡуптән түгел медицина институтын тамамлаған ейәнсәре, телефондан шылтыратып, фәлән-фәлән антибиотиктар биреүҙе нығытты. Былдай имдән, ҡырау һуҡҡан үләндәй, ләж ятты ҡарсыҡ.

**(Дауамы бар).**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ТӘБИҒӘТ - БЕҘҘЕҢ ТӘНЕБЕҘ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тоңолдорған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Басир АҠСУРИН, философия фәндәре докторы, профессор:** Бөгөн кешелек глобаль проблемалар алдында тора, тигән ҡараштағы ғалимдарҙың күбеһе таный. Глобаль проблемалар нимәнән ғибәрәт һуң? Йәмғиәттең тоторо ҡло үҫешен өс аспект билдәләй. Беренсеһе - экологик аспект. Ҡыҙғаныс, әммә бөгөн кеше тәбиғәт ресурстарын ун тапҡырға артығыраҡ файҙалана. Ысынында кешегә ул ресурстарҙың ундан бер өлөшө генә кәрәк, ә ҡалғаны нәфсеһен туйҙырыуға китә. Һөҙөмтәлә тәбиғәт яңырып өлгөрә алмай ҡала, шуға ла ҡырҡыу хәл барлыҡҡа килә. Әгәр тәбиғәткә мөнәсәбәт үҙгәрмәһә, Еребеҙҙә ҡотолғоһоҙ процесс башланыуы ихтимал. Йәғни биосфера үҙгәрәсәк һәм кешелекте юҡҡа сығарасаҡ. Уйлап ҡарағыҙ, кеше ҡатлы-ҡатлы йорттар һала, ҡиммәтле автомобилдәрҙә йөрөй һ.б. Былар барыһы ла үҙенә тәбиғи ресурстар талап итә. Карл Маркс әйтмешләй, тәбиғәт - ул беҙҙең органик булмаған тәнебеҙ. Йәғни беҙҙе тәбиғәт йәшәтә. Тәбиғәткә зыян килтерәбеҙ икән, тимәк, беҙҙең тәнебеҙ зыян күрә. Рәсәй ғалимдары билдәләүенсә, илебеҙҙә халыҡтың 67 проценты яраҡһыҙ һыу эсә. Ә донъя статистикаһы буйынса, рәсәйлеләрҙең 90 проценты бысраҡ һыу ҡуллана. Башҡортостанда ла хәл шәптән түгел. Өфө, мәҫәлән, иң бысраған ҡалалар араһында 9-сы урында тора.

Икенсе аспект - социомедицина. Медицина фәне үҫешкәндән-үҫешә, диагностика яҡшыра, яңы дауалау ысулдары уйлап сығарыла. Ләкин ауырыуҙар артҡандан-арта. Йәғни медицина кешеләрҙе һауыҡтырып өлгөрмәй. Тимәк, кешелек яңынан-яңы сирҙәр барлыҡҡа килтерә торған йәшәү рәүешен үҙ итә.

Өсөнсөһө - гуманитар аспект. Бөгөн дегуманизация күренеше күҙәтелә. Йәғни йәмғиәт кешелеклелек сифаттарын юғалта. Намыҫ, аң, оялсанлыҡ кеүек сифаттарҙы прагматизм, матди ҡыҙыҡһыныуҙар, үҙүҙенде генә ҡайғыртыу, башҡаларға ҡарата битарафлыҡ алыштыра. Элек ыңғай һаналған сифаттар хәҙерге йәмғиәттә кәрәкмәй булып сыға. Балаларҙы, оялма, алға бар, бер нәмәгә ҡарамай үҙ маҡсатыңа өлгәш, тип тәрбиәләйҙәр. Ә революцияға тиклем ҡайһы бер уҡыу йорттарында "Оялсанлыҡ тәрбиәләү" тигән дәрес булған. Цивилизация арҡаһында аҫыл сифаттарға эйә булған кеше хәҙер шул уҡ цивилизация йоғонтоһонда яңынан хайуанға әүерелеп бара.

Был проблемаларҙы төрлө яҡтан тотоноп ҡына хәл итеп була. Традицияларҙы, ғаилә ҡиммәттәрен ҡайтарырға кәрәк. Совет заманында улар булды бит. Бөгөн демократия бит, тигән булабыҙ. Демократия - ул закондарҙың теүәл эшләүе, уларҙың үтәлеүе. Ә беҙҙә кем нимә теләй, шуны эшләй. Кеше үлтереү енәйәте буйынса, мәҫәлән, Рәсәй донъяла беренсе урында килә. Проблемалар, әлбиттә, беҙгә йә бер нисә илгә генә ҡағылмай, ул тотош кешелектең бәләһе. Кешелек алдында һайлау тора: йәки аңына ҡайтыу, йәки артабан да ошо рәүешле йәшәүҙе дауам итеп, юҡҡа сығыу, кеше булыуҙан туҡтау.

**Рубриканы Мөнир ИҠСАНОВ алып бара.**

*ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...*



# БЕРӘЙ УТРАУҘА ҠАЛҺА ЛА...

## йәшәү рәтен табасаҡ

**"Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тигән башҡорт халыҡ мәҡәләнә таянып, ир-атҡа ҡағылышлы әллә күпме һөнәрҙәрҙе һанарға була икәнен Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың гәзитебеҙҙең 7-се һанында баҫылған мәҡәләһенән белдек. Уның юморға манып һанап сығылған был һөнәрҙәрен нисек, ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа өйрәнеүе тураһындағы уйланыу-хәтерләүҙәрен берсә аптырап, берсә һоҡланып уҡып сыҡҡандан һуң, минең дә ошо темаға нимәләр яҙғым килде. Үҙемдең һөнәрҙәрем етмешкә тулмай икәнен беләм. Маҡсатым - етмеш төрлө һөнәрҙе лә ашатлаусы атайымдың, Баймаҡ районы Темәс ауылында йәшәүсе Вәкил Рәхимйән улы Ишбулатовтың һәләт-һөнәрҙәренең иң кәттәләрен һанап сығыу.**



Бер уйлаһаң, беҙ, ауыл малайҙары, "ыштанһыҙ" малай саҡтан уҡ төрлө һөнәрҙәргә өйрәнгән булабыҙ икән. Һәр хәлдә, өй эсендәге, йорт-ҡура, ихаталағы күпселек эштәр менән малайҙар иртә таныша. Әйтәйек, мейескә ут яғыуҙы ғына алайыҡ: беренсе тапҡыр был эш менән танышыуымды әле булһа хәтерләйем - мунса яҡтым. Ай-һай, енел булманы был эш: утындарҙы нисек етте, шулай һалыу менәнме ни, тоҡанмай ҙа ҡуя, бер-ике тапҡыр мөрйә ябыҡ килеш тә тоҡандырып маташтым. Мейескә ут яғыуҙың ауырлығын татып ҡарағандан һуң, атайымдың был эште нисегерәк башҡарыуын ҡарарға булдым. Күҙәтеп торам: туҙҙарҙы ваҡлап, килешле генә итеп мейес эсенә һалды ла, бер-ике сыҙыр-сотор менән бәләкәйерәк усаҡ яғып та ебәрҙе. Артабан өҫтөнә ҙурыраҡ ағастарҙы өҫтәне... Әйткәндәй, атайым һәр эштең рәтен белеп башҡара. Уның ағас эшкәртеү станогында барлыҡҡа килгән күҙҙең яуын алып торған йорт йыһаздары, ишек-тәҙрәләр, умарталар бөгөнгө көндә хатта күрше өлкәләргә лә таралған. Уның тәүге һөнәре - токарь, йәғни, тимерҙе кәрәкле формаға еткереүсе "скульптор". Күп кенә йылдар ошо эштә эшләгәндән һуң, балта оҫтаһы һөнәренә өйрәнеп алды. Уның ниндәй оҫта булыуы тураһында үҙебеҙ йәшәгән йорт дәлилләп тора. Күрергә теләһәгеҙ, ҡунаҡҡа килегеҙ.

Атайымдың ваҡ һөнәрҙәрен һанап та тормайым, бары шуны әйтәм: ул теләһә ниндәй урманда, утрауҙа яңғыҙы тороп ҡалһа ла, йәшәрлек уңайлыҡтар тыуҙырып ала белә торған кеше. Бер хәл иҫкә төштө: бер мәл бесәнгә барғайныҡ, ҡалаҡтар өйҙә ҡалған. Атай тиҙ генә ағастан ҡалаҡтар юнып бирҙе, үәт!

Йәнә, атай спортты бик ярата. Волейбол, баскетбол, футбол уйындары оҫтаһы, турникта йәштәрҙең танауына "сиртеүсе" лә ул. Йәш сағында иң етеҙ саңғысы булған районда, әле - беренсе мәргән атыусы.

Уҡыусыларының яратҡан уҡытыусыһы ла ул атайым, Башҡортостан республикаһының мәғариф отличнигы. Тағы бер профессияһы - физкультура уҡытыусыһы. Уның бөгөн дә "ҡояш" тигән ҡатмарлы күнекмәне башҡара алыуына шигем юҡ. Атайымдан ҡарап мин, мәҫәлән, ҡулда йөрөргә, нунчаки менән төрлө хәрәкәттәр эшләргә, эт өйрәтергә (уныһына әрмелә өйрәнгән), бейергә, ҡурайҙа, баянда уйнарға, станокта "шәкәр һымаҡ" тип-тигеҙ таҡталар бысырға өйрәндем, рәхмәт уға.

Атайым тарих уҡытыусыһы һөнәрен дә үҙләштерҙе, тик үҙенең күңеленә нығыраҡ ятҡан военрук һөнәренә тоғро ҡалды. Күптән түгел "Йәгеҙ әле, егеттәр" конкурсында еңде уның егеттәре. Бер туған ҡустым Иҙел унда үҙен районда иң мәргән уҡыусы итеп танытты. Ярыш тамамланғас, уҡыусылары үҙҙәрен "һөләк кеүек" итеп әҙерләгән военруктарын күтәреп йөрөткәндәр. Был тиклем дә ҡыуаныс кисереүҙәрен мин аңлайым, сөнки атайҙың иң ҙур һәләте, минеңсә, кешеләрҙе дәртләндерә белеүе. Кемде генә уҡытмаһын, кем менән генә һөйләшмәһен - уны һәр ваҡыт яраталар, ихтирам итәләр. Ни өсөн? Сөнки ул кешеләге таланттың, ҡеүәтте күреп, аса белә торғандарҙан. Быныһы, йәғни, күҙгә күренеп үк бармаған нәмәне лә һиҙемләүе - тағы бер һәләте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо һүҙҙәрҙе яҙып ултырған саҡта атайыбыҙҙың һөнәрҙәренән бигерәк, уның холҡо тураһында күберәк уйланылған икән. Билдәле, минең өсөн атайым - һәр яҡлап өйрәнеү өлгөһө: берәй сетерекле хәл килеп тыуһа, атай ошо ваҡытта ни эшләйәсәк, тигән һорау ҡуям бит мин үҙ алдыма. Быны әле лә атайҙың ҡайһы бер һөнәрҙәрен күҙ алдынан үткәреп, үҙемә маҡсаттар билдәләнем.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЦИТРУС ЕМЕШТӘРЕ...

## инсультты иҫкәртә

■ Һирәк тәмәке тартҡан һәм тәмәке тартыуҙың был ысулы һаулыҡҡа зыян килтермәй, тип иҫәпләгәндәрҙең организмы тәмәкене күпләп тартыусыларҙыҡы кеүек үк зарар күрә. Нортумбрия университеты ғалимдары билдәләүенсә, көнөнә 20 тәмәке тартыусы менән 1 тәмәке тартыусы араһында айырма юҡ тиерлек. Доктор Том Хеферсон белдереүенсә, тәмәке тартыусының иң тәүҙә хәтере юғала. "Тартыу хәтер функцияһының түбәнәйеүе, бигерәк тә баш мейеһенең дегенерацияһы, мәсәлән, уның күләме кәмеү менән бәйле, - ти доктор. - Шуға ла бында тартылған тәмәкенең һаны бөтөнләй мөһим түгел".

■ "Донъяла яңғыҙ кешеләр шул тиклем күп һәм был яңғыҙлыҡ уларҙы яйлап үлтерә" тигәнде ишеткәнегеҙ бармы? Яңы ғына үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә яңғыҙлыҡ һәм сәләмәтлектең яҡшы булмауы араһында тура бәйләнеш барлығы асыҡланған. Чикаго университетының социаль психологы Джон Качиоппо яңғыҙлыҡтың кеше биологияһына йоғонтоһон тикшереп, шундай һығымтаға килгән. Баҡтиһәң, был тойғо гипертонияға, организмдың ялҡынһыныуына, хәтер менән проблемаларға, иммун системаһындағы үҙгәрештәргә килтереүсе веналар склерозы тыуҙыра икән. Кеше араһына сығып йөрөмәгән кешеләрҙең иммун системаһы эшмәкәрлегенең дөрөҫ эшләүе өсөн яуап биргән гендары үҙгәрә. "Кешенең иммунитет күҙәнәктәре һаҡланыу стратегияһына эйә. Яңғыҙ кешеләрҙә стресс һәм психологик факторҙар һөҙөмтәһендә был система әүҙемлеген юғалта. Шул уҡ ваҡытта стресс гормоны кортизол, ҡан баҫымы кимәле күтәрелә, былар иһә үҙ сиратында, инфаркт йәки инсультҡа килтереүе ихтимал. Даими рәүештә депрессия хәлендә булыусыларҙа ҡан әйләнеше системаһы функцияһы боҙола", тип аныҡлыҡ индерә Качиоппо. Бындай кешеләр яңғыҙлығына шул тиклем өйрәнә һәм ярҙамды кире ҡаға.

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Әфлисунда, грейпфрутта һәм башҡа цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационында юғары күләмдәге флаванондарға өҫтөнлөк биргән ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флавanoндар - флавоноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флавоноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

ӘЙҘӘ, БАҠСА ҮҪТЕРӘЙЕК!

# БУЛДЫҠЛЫ КЕШЕ...

## баҡса үҫтерер



**"Булдыҡлы баҡса эшләр, булдыҡһыҙ аҡса эҙләр" ти башҡорт халыҡ мәҡәле. "Сәсмәһәң яҙ көнө, ни йыйырһың көҙ көнө?" тигәне лә бар халыҡ аҡылының. Шуға ла, "Яҙ етә, әйҙәгеҙ, матур итеп баҡса үҫтерәйек!" тип өндәшергә булдыҡ әле һеҙгә беҙ ҙә. Март айы баҡса эштәре башланған осор. Был айҙа үҫентеләр өсөн орлоҡтар сәсеп ҡалырға кәрәк.**

● Мәсәлән, төслө һәм иртә өлгөрә торған кәбеҫтәне, шулай уҡ томат, ҡыяр, борос, баклажан, сельдерей орлоҡтарын, ҡайһы бер сәскәләрҙе лә ошо арала үҫенте итеп сәсергә кәрәк. Айҙың икенсе яртыһында кәбеҫтә үҫентеләренең һәр береһен айырым һауытҡа күсерергә онотмағыҙ. Томат һәм боросто, ғәҙәттә, айҙың өсөнсө декадаһында айыралар. Ошо ваҡытта уларға ашлама индереү уңышты бермә-бер арттырыр ғына. Баҙҙа һаҡланған сәскә тамырҙарын һәм бүлбеләрен сығарып, тикшереп сығығыҙ, серегәндәрен алып ташлағыҙ. Үҫентеләрҙе үҙегеҙ сәсеп үҫтермәһәгеҙ, йыл һайын бер үк кешенән һатып алырға тырышығыҙ. Йәй буйы үҫтереп, уныш йыя алмаһаң, түккән көс әрәм була, шуға ла белгән кешенән алһаң, ышаныслыраҡ була.

● Үҫенте ултыртыуҙың төрлө ысулдары бар. Мин түбәндәгесә эшләйем: ҡумтаға кәрәгенсә тупраҡ тултырғас, өҫтөнә ҡайнар һыу һибәм дә, әҙерәк тора бирғәс, шырпы менән орлоҡтарҙы ярты сантиметр тәрәнлеккә төртөп сығам. Өҫтөнән полиэтилен менән ҡаплап, шыттырырға ҡуям. Элек орлоҡтарҙы еүеш сепрәккә төрөп, көн һайын сылатып тора инем. Улар морон төртә башлаһалар, 1 тәүлеккә һыуыткысҡа һалып алаһың, шунан ергә сәсәһең. Был осраҡта полиэтилен менән ҡаплап тороу кәрәкмәй. Ике ысул менән сәскәндә лә һыуҙы алһыу ғына итеп буятырлыҡ марганцовка һалаһың һәм шунда орлоҡтарҙы ике сәғәт тотаһың.

Беренсе ысул ер тиреҫкә бай булғанда яҡшы, сөнки ҡайнар һыу тиреҫтең көсөн кәметә, юғиһә, ул боростоң тамырын яндырып яфалай. Борос үҫентеһе артыҡ тиреҫле тупраҡты яратмай. Шуға ла уны июнь айында ҡырауҙар бөткәс кенә ергә күсереп ултыртҡанда ла янған тиреҫ өҫтәргә кәрәкмәй. Борос яҡтылыҡты ла үҙ итә, шуға рәт араларын 50-60 см, борос үҫентеләре араһын 30-35 см итеп ҡалдырырға кәрәк. Тәҙрә төбөндәге үҫентеләргә һыуҙы самалап һибегеҙ, артыҡ һыу уларҙың тамырын серетә. Борос үҫентеләренең артыҡ ботаҡтарын алып ташлау (пасынкование) бөтөнләй кәрәкмәй.

Помидорҙы март урталарында ултыртһаң да була. Помидор менән бер юлы баклажан сәсергә онотмағыҙ. Уның үҫентеһен үҫтереү ҙә, ергә күсереп ултыртыу ҙа, хатта өлгөрөү мәле лә помидорҙыҡына тура килә. Көҙ етеп, өлгөрә алмаҫтай сәскә төйөмдәре булһа, уларҙы өҙөп ташлау талап ителә. Баклажанды картуфтан йырағыраҡ ултыртығыҙ, сөнки уны колорадо ҡуңыҙы бик ярата. Помидорҙы асыҡ ергә күсереп ултыртҡанда уның соҡорона бер килограмдай янған тиреҫ менән стакан ярымдай ағас көлө һалып, тупраҡ менән бутарға онотмағыҙ. Әйткәндәй, помидорҙың һабағын ергә төпкәрәк күмһәң, яҡшыраҡ була, ә борос менән баклажанды тәрән ултыртмайһың. Был үҫемлектәрҙең барыһы ла яҡты урын һәм уңдырышлы тупраҡ ярата.

● Теплицаһы булмағандарға бер "сер"емде асмаҡсымын. Помидор үҫентеләрен 20 май тирәһендә үк ергә ултыртам да, һәр береһен марля менән 4 ҡат урайым. Һауа ла инеп тора, әҙ булһа ла, ҡояш та төшә, һалҡынға ла бирешмәй. Һауа йылыла килә - 3 ҡат, унан 2, 1 ҡатҡа ҡалдырып, ҡырауҙар үтеп бөткәс, 10 июнь тирәһе бөтөнләй алып ҡуям. Бындай ысул менән үҫтерелгән помидор иртә өлгөрә, тик үҫенте өсөн орлоҡто ла иртәрәк сәсегеҙ. Шулай уҡ көҙ етеп, көн һыуыта башлау менән помидорҙарымды бер ҡат марля менән урай башлайым. Шул рәүешлә ҡаттарҙы арттыра барып, помидорҙарҙы октябргә тиклем үҫтерәм. Помидор һабаҡтарын өҙөп ташлап бармайым, борсаҡ хәтле генәләре ҙурайып, ҡыҙарып өлгөрә. Помидорҙың йәш ботаҡтарын да өҙөп ыҙаламайым. Марля булмаһа, көҙ ябыу өсөн төрлө сепрәк ҡулланырға була.

● Ҡыяр, ҡарбуз, ҡауын, ҡабаҡ, ташҡабаҡ бик наҙлы була. Уларҙы утағанда йәки уңышын йыйғанда бик һаҡ ҡыланырға кәрәк. Тегеләйбылай этеләй башлаһаң, улар насар үҫә, йә бөтөнләй үҫеүен туҡтата. Яҙ йомшаҡ түтәлгә орлоҡтарын сәскәс, түтәл тирәһендә ҡаҙылған, йомшартылған урын ҡалдырам. Үҫентеләр шытып сыҡҡас та, түтәлдә һәм уның тирә-яғын йомшартып торам. Былай сүп үләне лә үҫмәй, унан үҫентенең елеһе шәбәйеп китһә, үҙе үләнде үҫтермәй. Әгәр ҙә ее берәй үләнгә мыйығын урап өлгөргән икән, үләнде йолҡмай, өҫкө яғын ғына өҙөп ташлап торам.

● Картуфты бик иртә ултыртһаң, уға колорадо ҡуңыҙҙары ябырыла. Шулай уҡ картуф сығып өлгөрмәгән булһа, был ҡуңыҙҙар помидор менән баклажан үҫентеләренә лә һөжүм итеүсән. Шуға картуфты бөтә күрше-тирәләрегеҙ ултыртып бөткәс кенә сәсегеҙ, был осраҡта ҡуңыҙҙар артыҡ күп булмай. Голланд картуфын колорадо ҡуңыҙы яратмай. Был картуфтың һабағы ҡара көҙгә тиклем йәшел була, шуға ла унда ҡуңыҙҙар көҙ генә барлыҡҡа килһә лә, картуфҡа зыян булмай. Шуға ла ағыу һипмәй генә картуф үҫтерәм, тиһәгеҙ, голланд картуфын ултыртығыҙ. Картуфтың был сортын һирәгерәк сәсергә кәрәк, сөнки уның һабағы оҙон булыу сәбәпле, бер нисә тапҡыр күмеп торорға тура киләсәк. Картуфы эре була, әммә әллә ни тәмле түгел, шулай ҙа ашарға була.

Ултыртҡан үҫентеләрегеҙ насар үҫһә, тимәк, ере килешмәй. Икенсе йыл бүтән урынға ултыртып ҡарағыҙ, сөнки төрлө үҫемлектәрҙең үҫеше тупраҡтың составына ла бәйле.

● Ваҡ орлоҡтарҙы көҙҙән ултыртып ҡалдырһам, түтәлдәрен көндәр йылыраҡ ваҡытта әҙерләйем, һыуыҡта баҡсала оҙаҡ булышып булмай. Ләкин орлоҡтарҙы көндәр һыуығас сәсәм. Йылы булһа, көҙгө ямғырҙарҙа орлоктар көҙҙән үк шыта башлап, боҙола. Кишер орлоғон бигерәк һуң сәсәм, ул һыуыҡҡа бирешмәй. Тик көҙҙән сәскән кишер орлоҡтарының барыһы ла ҡар ирегәс, ҡатҡан түтәлде тишеп сыға алмай. Шуға ла иртә яҙ түтәлдең өҫтөн тырма менән иплән кенә һуҡҡылап, йомшартып ҡуям. Яҙ ҡоро килһә, һыу һибергә лә кәрәк.

● Мартта урамда ла эш етерлек. Иң тәүҙә ағастарҙан еүеш ауыр ҡарҙы һелкетеп төшөрөгөҙ, юғиһә, артыҡ ауырлыҡты күтәрә алмайынса, ботаҡтарҙың һыныуы бар. Ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтар һыуға туйынһын тип, уларҙың төбөндәге ҡарҙы тығыҙлап тапарға ярамай, был тамырҙарҙың ууыуын оҙайтасаҡ. Ҡар тиҙерәк иреһен өсөн уға көл һибергә була, сөнки ҡояш нурҙары аҡ ҡар өҫтөнә төшөп, уны йылытмай, киреһенсә, сағылып тик тора, ә был осраҡта ҡар тиҙерәк йылынасаҡ һәм тиҙерәк ирейәсәк.

● Күп йыллыҡ сәскәләр ултыртылған түтәлде торф йәки көл кибеп, өҫтөнән полиэтилен япһаң, улар тиҙерәк сығасаҡ. Тик март әле ҡаты һыуыҡтар булыу мөмкинлеген дә оноторға ярамай, был осраҡта уларҙың һәләк булыуы бар. Ҡайһы бер баҡсасылар күп йыллыҡ үҫентеләрҙең тамыры өшөмәһен өсөн уларҙы ҡар менән ябып ҡуя.

● Ер еләге, ҡарағат, ҡурай еләге, крыжовник үҫентеләрен ҡайнар һыу менән эшкәртергә тырышығыҙ. Бының өсөн ҡайнатылған һыуҙы лейкаға ҡойоп, ҡыуаҡлыҡтарҙың өҫтөнән ҡойорға кәрәк. Үҫемлектәргә эләккән һыуҙың температураһы +60, +65 градус булырға тейеш. Әйткәндәй, был ысулды күп баҡсасылар үҙ итмәй, был ысул менән эшкәртеү ҡоротҡостарҙы кәметмәй, етмәһә, ер еләгенең уңышын кәметә, ти улар.

● Был осор теплицаларҙы әҙерләп ҡуйыу өсөн дә уңайлы. Уларҙы дезинфекциялап, ремонтлап, кәрәк булһа, тупраҡты әҙерләп ҡуйырға була.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЫСЫН САБЫРЛЫҠ...



## тәүге тетрәнеүҙә

Шундай хәҙис бар. Бер ваҡыт Аллаh Илсеhе (с.ғ.с.) ҡәбер янында күҙ йәштәрен түгеп ултырған ҡатын янынан үтеп барған. Ҡатындың хәлен күреп, уға:

- Аллаһтан ҡурҡ һәм сабыр ит! - тигән. Бәйғәмбәрҙе танымайынса, ҡатын:

- Кит янымдан, мин кисергәнде һинең кисергәнең юҡ бит әле! - тип ҡысҡырып ебәргән.

Әле генә уға өндәшеүсенең Бәйғәмбәр булғанын әйткәстәр генә ҡатын Аллаһ Илсеһе артынан тороп йүгергән һәм:

- Мин Һеҙҙе таныманым! - тип ғәфү үтенгән.

- Ысын сабырлыҡ тәүге тетрәнеүҙә! - тип яуап биргән Бәйғәмбәр.

Хәҙистә телгә алынған ҡатындың исеме билдәле түгел, әммә риүәйәттәрҙән аңлашылыуынса, был ҡатын үҙ балаһының ҡәбере янында илап ултырған була. Алдында Бәйғәмбәр торғанын белмәйенсә, ул Уға тауыш күтәрә. Әлбиттә, бер мосолман да эргәhендә Бәйғәмбәр булғанын күрә тороп, уға тупаҫ өндәшмәҫ ине. Ҡатындың тупаҫлығына Аллаh Илсеhе бер ни ҙә өндәшмәй, үҙ юлында була: йәнә һүҙ ҡушһа, яуап тағы ла тупаҫыраҡ яңғырар, ә ҡатын үҙе унан да ауыр, хәүефле хәлгә ҡалыр ине.

Сәхәбәләрҙең береһе, ҡатындың аңһыҙ хата ҡылыуын күреп, унан һорай: "Һине түҙемлеккә һәм Хоҙайҙан ҡурҡырға саҡырған кешенең кем икәнен беләһеңме?" "Юҡ", - тип яуап бирә ҡатын һәм эргәһендә Аллаһ Илсеһе булғанын белеп, уның артынан ғәфү үтенергә ашыға. Бәйғәмбәр нәсихәт итеп ҡатынға ысын сабырлыҡтың нимә икәнен аңлата. Сабырлыҡ - тәүге тетрәнеүҙә, тигәнен шулай аңларға кәрәк: ҡайғының тәүге минуттарынан уҡ түҙемлеккә эйә булыу.

Кешенең күпте кисереүе һәм барыһына ла күнегеүе билдәле. Ләкин иң ҡыйыны - тәүге һинауҙы, беренсе һыҙланыу тойғоһон кисереү, сөнки һыҙланыу ваҡыт үтеү менән генә баҫыла һәм үҙенә күнектерә. Кешенең ҡайғыға һәм һынауға әҙер булмауы тағы ла ҙурыраҡ фажиғәгә, зиһене томаланыуына йәки үҙ-үҙенә ҡул һалыуға килтереүе ихтимал.

Үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашҡанда - сабырлыҡтың иң кәрәкле сағы, шул ваҡытта мосолмандың ысын иманы күренә. Кешеләрҙең яҡындарын юғалтҡанда һыҡтау, ҡысҡырыу, илауҙары бер кемгә файҙа килтермәй. Бындай ҡайғылы мәлдәрҙә булғанды ҡабул итеп кенә ҡотолоу юлын табырға мөмкин. Кире осраҡта кешегә хәүеф янай, сөнки тыйылған һүҙҙәр әйтеп, ул Бәйғәмбәргә, хатта Аллаһҡа ҡаршы сығыуы бар. Кеше ихтыярын юғалтҡанда әйткән һүҙҙәренә, ҡылған эштәренә яуап бирерлек түгел. Ысын мосолман, яҡындары фажиғәгә тарығанда, "Иннә лилләһи үә иннә иләйһи раджиун"(Беҙ Аллаһтыҡы, һәм Уға ҡайтабыҙ) тигән һүҙҙәрҙе телгә алып, үҙен тотанаҡлы тоторға тейеш.

**Хәҙистән һабаҡтар:**

❖ Яҡшылыҡҡа өндәгәндә, ҡаршылыҡтарға һәм ризаһыҙлыҡҡа әҙер булырға кәрәк.

❖ Ҡәбергә килеү рөхсәт ителгән, әммә ҡәбер өҫтөндә теге донъяға күскәндәр өсөн янып-көйөү, өҙгөләнеүҙе динебеҙ тыя.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Фатирҙы энергетик таҙартыу

Фатирҙы, торлаҡты даими рәүештә энергетик таҙалап тороу бик мөһим. Әгәр торлаҡта энергетик бысраҡ бар икән, ул, алда әйткәнебеҙсә, төрлө энергетик ендәрҙе (биреләрҙе) ылыҡтыра.

Ҡайһы бер ваҡыт балалар тамаҡтары туҡ, аҫтары ҡоро булһа ла, төндә уянып илаусан. Улар биреләрҙе күреп ҡурҡыуын шулай белдерә. Бинаны энергетик таҙартыу теләһә ниндәй кире энергетиканы боҙа, һаҡ булдыра. Шуға күрә космоэнергетиканың 5-6 сеансынан һуң (етерлек кимәлдә таҙарғандан һәм һаҡланғандан һуң) зарядларға тоҙ, майшәм килтерергә һәм фатирҙы үҙ аллы таҙаларға мөмкин. Фатирҙы майшәмдәрҙе алып ҡайтҡандан һуң өс көн дауамында таҙартырға мөмкин (заряд энергияһы максималь була).

Түбәндә шундай таҙартыуҙарҙың һөҙөмтәле һәм ябай ысулдарының бер нисәһе тәҡдим ителә:

*Һуғанды ҡабығы менән урталай ярып, уны ҡырҡылған яғы менән өҫкә ҡаратып кәрәкмәгән ҡағыҙға һалығыҙ һәм һәр бүлмә уртаһында таҫаҡса ҡалдырығыҙ (шул иҫәптән йыуыныу бүлмәһендә, бәҙрәфтә, лоджияла һ.б.). Иртән һуғанға ҡулығыҙ менән ҡағылмай, ҡағыҙ менән төрөп тотоп, берәй пакетҡа һалып, сүплеккә сығарып ташлағыҙ.

*Көндәҙ фатирҙа еүеш таҙартыу яһағыҙ, һыуға зарядланған тоҙ һалығыҙ (бер биҙрәгә 3-5 аш ҡалағы тоҙ һалырға).

*Форточкаларҙы асып ҡуйығыҙ. Барлыҡ бүлмәләрҙең дә уртаһына шәм яндырып ҡуйығыҙ, янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итегеҙ. Әгәр бар икән, төрлө еҫле таяҡсаларҙы яндырырға мөмкин.

*Пульверизатор ярҙамында барлыҡ бүлмәләрҙе зарядланған тоҙ һалынған һыу менән таҙартыу үткәрегеҙ, бигерәк тә мөйөштәргә, ҡараңғы урындарға (шкафтарға, антресолдәргә һ.б.) иғтибар итегеҙ.

*Һауытҡа зарядланған тоҙ һалып, унең менән барлыҡ бүлмәләрҙең мөйөштәрен таҙартығыҙ (бер семтем тоҙ алып, уны бүлмәнең өҫкө мөйөшөнә һибегеҙ). Бигерәк тә йыуыныу бүлмәһенә, бәҙрәфкә һәм аш-һыу бүлмәһенә айырым иғтибар бирегеҙ.

*Өҫтәмә майшәмде яндырып, ингән ишектән башлап сәғәт йөрөшө буйынса ашыҡмай ғына периметр буйынса барлыҡ бүлмәләрҙе йөрөп сығығыҙ. Майшәм тәтәгәндә йәки сытырлап янғанда бер аҙ туҡтап торорға кәрәк.

*Фатир алдындағы баҫҡыс майҙанын таҙартығыҙ (лифтты һәм баҫҡыстарҙы ла таҙартырға мөмкин).

*Майшәмде һүндерегеҙ, уларҙы артабан да ҡулланырға мөмкин. Фатирҙы, торлаҡты таҙартыу тамам.

Иҫкәрмә: торлаҡты квартал һайын, шулай уҡ шаулы байрамдарҙан һуң мотлаҡ таҙартырға кәрәк.

## Һаҡланыу тураһында

Ҡеүәтле һаҡлау сараһы мотлаҡ! Ул дауалаусыға ғына түгел, һәр кемгә кәрәк - күҙ тейеүҙән, боҙомдан, сихырҙан, ҡарғыштан һаҡланыу өсөн! Күҙ тейеү - бер кешенең икенсе кешегә аңһыҙ тәьҫире. Ҡағыҙә булараҡ, күҙ ҡарашы менән. Насар күҙле кеше хатта бал турала үҙе лә белмәүе мөмкин. Күҙ тейеү сәләмәтлеккә генә насарайтып ҡалмай, тормоштағы уңышһыҙлыҡтар сәбәбе лә булыуы мөмкин. Бигерәк тә үҙҙәрен күрһәтергә, үҙәктә булырға тырышыусы кешеләргә күҙ тейеүсән. Шулай уҡ күҙ тейеүҙән, боҙомдан ҡурҡҡан кешеләр ҙә бығa дусар.

Күҙ тейеүҙән ололар ҙа, балалар ҙа интегә (уларҙы зарядланған тоҙ һалынған һыуҙа йыуындырығыҙ). Күҙ тейеүҙең билдәләре булып ҡапыл ғына үҙеңде насар тойоу, йоҡо килеү, хәлһеҙлек, тиҙ ҡуҙғыусанлыҡ, иламһырау тора.

Боҙом - бер кешенең икенсеһенә аңлы рәүештә кире тәьҫире. Боҙомдан килгән ауырыуҙар төрлө була. Улар - депрессия, ҡурҡыу, йоҡоһоҙлоҡ, йөрәк эшмәкәрлегенең боҙолоуы, баш ауыртыуы.Боҙом шулай уҡ төрлө ауырыуҙарға, бәхетһеҙлек осраҡтарына, ғаилә аңлашмаусанлыҡтарына, эштәге уңышһыҙлыҡтарға килтереүе мөмкин.

Арбау - кемдеңдер теләгенән тыш уны әүрәтеү, унең иғтибарын йәлеп итеү өсөн кемгәлер йүнәлтелгән аңлы кире тәьҫир. Арбаусылар әүрәтеү ярҙамында бәхетле ғаилә ҡороп булмауын аңламай, әммә был эшмәкәрлек өсөн Хоҙай алдында яуап бирергә тура киләсәк. Арбалған ирҙәр һәр саҡ үҙен унайһыҙ хәл-торошта, стреста була. Улар көсөргәнеште алып ташлау өсөн йыш ҡына эсә, ҡатындарына ҡул күтәрә башлай.

Ҡәһәр, ҡарғыш - көслө рухи стресс ваҡытында әйтелгән, ваҡыты билдәһеҙ кире тәьҫир. Ҡарғыш алған кеше уңышһыҙлыҡҡа тарый, бер эше лә алға бармай. Бәхетһеҙлектәр, ҡағиҙә булараҡ, системалы характерҙа була. Быуындан-быуынға дауам иткән ҡәһәр ҙә була (бер төрлө кармалы кешеләр бер ғаиләгә тура килә йәки өләсәһе, ейәнсәре бер уҡ йән булыуы ихтимал).

Космоэнергетика сеансы ваҡытында атап үтелгән, аураны боҙоуға килтереүсе барлыҡ тәьҫирҙәр алып ташлана, бынан тыш, пациенттар ҡеүәтле йыһан һаҡлауы ала.

Кеше алдында йыш сығыш яһаған, кире тәьҫиргә дусар булған кешеләргә шар формаһында өҫтәмә һаҡланыу тәҙәргә тәҡдим ителә. Был иң ябай, тәбиғи һәм ҡеүәтле һаҡланыу сараһы. Шарҙың яҫылығы юҡ, теләһә ниндәй энергетик нур шыуып төшә.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега-тормош" вәғәҙәһе

**Әгәр аҡылығыҙға һәм үҙегеҙҙең эске донъяғыҙҙағы әкиәти һарай ишегенә асҡыс таба алһағыҙ, унда һеҙгә сикһеҙ киңлек, тәрәнлек асылыр. Һеҙҙең эске донъяғыҙҙа алтын тамыр бар, унан һеҙ имен, ҡыуанyслы, тулы тормош өсөн кәрәкле нәмәләрҙең барыһын да ала алаһығыҙ.**

***Джозеф Мерфи.***

"Мега-тормош" тормошто камиллаштырыу буйынса 30 көнлөк программа тип әйткәйнек инде. Бөгөндән башлап һәр үткән көнөгөҙ өсөн үҙегеҙгә яуаплылыҡ алығыҙ. Һеҙҙән башҡа бер нәмә лә талап ителмәй. Әммә бер нәмә лә бушҡа килмәй. Әгәр аҡсағыҙ нимәгәлер етмәй икән - тормошоғоҙҙо үҙгәртеү тураһында ҡарар ҡабул итегеҙ һәм хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн маҡсатлы эш башлағыҙ. Әгәр һеҙҙе урап алыусылар менән идеаль мөнәсәбәттәр кәрәк икән - үҙегеҙҙе шундай мөнәсәбәттәргә лайыҡлы кеше булырға мәжбүр итегеҙ. Әгәр көн һайын быға тиклем ҡабатлаған ғәмәлдәрҙе башҡарып, үҙгәрергә ҡарар ҡабул итмәһәгеҙ, уңыш үҙенән-үҙе килмәҫ.

Ә хәҙер минә бер нисә һорау бирергә рөхсәт итегеҙ һәм уларға яуап биреү өсөн бер аҙ ваҡытығыҙҙы бүлегеҙ.

**Һеҙ тормошта еңеүсе булырға теләйһегеҙме?**

**Аҡыл көсөгөҙҙөң күберәк булыуын теләйһегеҙме?**

**Ныҡлы сәләмәтлеккә эйә булырға теләйһегеҙме?**

**Күп энергияға һәм йәшәү көсөнә эйә булырға теләйһегеҙме?**

**Тормошоғоҙға ҡыуаныс өҫтәргә теләйһегеҙме?**

**Хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырырға теләйһегеҙме?**

**Тормошоғоҙҙоң күберәк тыныс булыуын теләйһегеҙме?**

**Тормошоғоҙҙа күберәк мажаралар теләйһегеҙме?**

**Ныҡлы характерға эйә булырға теләйһегеҙме?**

**Оҙаҡ йәшәргә теләйһегеҙме?**

**Камиллыҡҡа ынтылаһығыҙмы?**

Әгәр бер генә һорауға булһа ла "эйе" тип яуап бирһәгеҙ икән, тәҡдим ителгән программа һеҙҙең өсөн баһаһыҙ буласаҡ һәм һеҙ матур тормошҡа һуҡмаҡ һаласаҡһығыҙ. Мендәрсә кеше тормошон яҡшыртыу өсөн ошо программаны ҡулланған, һеҙгә лә уны ҡулланырға бөрәү ҙә ҡамасауламай. Дәртегеҙҙе тоҡандырып, эске донъяғыҙға ут өҫтәгеҙ. Үҙегеҙҙе яҡшырта башлауығыҙҙы тойһағыҙ, ышанысығыҙ һәм энтузиазмығыҙ емештәрен бирә башлар. Шул ваҡытта энергияғыҙ һәм мөхәббәтегеҙ ҙә артыр. Энергияғыҙ артһа, тормошоғоҙҙа уңышҡа өлгәшеү өсөн мөмкинлектәр бер-бер артлы тыуып ҡына торор. Һеҙ һәр көндәң - мөғжизә, ә тормош - уға аяҡ баҫыр өсөн һалынған матур юл булыуына ышанырһығыҙ. Ул нирвана ла, мәхшәр ҙә булыуы мөмкин - уныһы инде үҙегеҙҙән тора.

**Робин ШАРМА.**

*БАШҠАТЫРҒЫС*

# ТЕЛ ӘЙТКӘН ҺҮҘ - ЕЛ ТҮГЕЛ



1. Йүкә ағасының һыҙырыу өсөн һыуға баҫтырылған ҡабығы. 2. Ҡырып бөтөрөлгән көлһыу буҙ төҫлө ҡырағай ат. 3. Йәш ҡайын. 4. "Килен (...) эҙенән китер". 5. Ауыҙҙан "иң йыраҡ" тән өлөшө. 6. Бер бөтөн нәмәнең үҙ аллы бер бөтөн өлөшө. 7. Һуңғы ваҡытта күренмәгән йорт бөжәге. 8. Өйөргә ҡушыу өсөн өлгөрөп етмәгән йәш айғыр малы йәки өйләнмәй йөрөгән егет. 9. Низағ, шаушыу, бола. 10. "Бер (...)да ҡырҡ ир хәйләһе булыр". 11. Туҡмас таяғы. 12. "Атаға ул булмаһаң, (...)ға ҡол булырһың". 13. Башҡорттарҙың ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙағы атамаһы. 14. Йәш бәрәс тиреһе. 15. Һыу буйында үҫә торған эре ағас. 16. Тегенсенең эш ҡоралы. 17. Затлы металл. 18. "Улым бер булһа, (...)ем биш булыр". 19. Ваҡ ҡына сирень сәскәле ҡуҙаҡлы үлән. 20. Ҡатын-ҡыҙға исемен "биргән" сәскә. 21. "(...) алһаң, төн ҡыҫҡара". 22. Кәштәм тулы аҡ тауыҡ. 23. Башҡортостанда һәм Татарстанда йәшәгән этник төркөм. 24. Кемгәлер яғылған ялған ғәйеп. 25. Тәндәге тыумыштан булған тап йәки төйөрсөк. 26. "Ағаһын күреп эне үҫер, апаһын күреп (...) үҫер". 27. Сыбыҡ кәртә. 28. Ниҙелер эшләмәҫкә бирелгән ант һүҙе. 29. Йоҡа тауарҙан эсләп тегелгән оҙон еңле киң өҫкө кейем. 30. Ул быҫҡаҡ, ләйсән була. 31. Буҙ башлы, ҡара төҫлө ҡош. 32. Ҡарауыл. 33. Ҡарлы-ямғырлы, йонсоу, һыуыҡ көн. 34. Тере булмаған баҡса "һаҡсыһы". 35. Төшөнә тары "кергән" йорт ҡошо. 36. Белдереү. 37. Аҡ, ҡара, ҡыҙыл емешле баҡса ҡыуағы. 38. Һаҡаллы йылға балығы. 39. Ҡайыш, айыл кеүек нәмәләрҙең башына ҡуйылған металл эләктергес. 40. Ҡар булып төшкән ысыҡ. 41. Муйынға (...) кейеү. 42. Ҡышҡы аяҡ кейеме. 43. Энцефалит бөжәге. 44. Ана бара эҙе юҡ, боғаҙлаһаң, ҡаны юҡ. 45. Айғыр менән ишәктән булған ҡатнаш тоҡом хайуан. 46. Тимер-томор уға йәбешә. 47. Был үләндең атҡа булған үсен һабан ала. 48. Белем кимәлен билдәләү өсөн алынған һынау.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**9-сы һандағы кроссворд яуаптары:**
**Горизонталь буйынса:** Олигархия. Рәхмәтуллина. Диктор. Азарт. Бүрек. Ғәлиева. Тәңре. Мәжитова. Ранчо. Директива. Раджа. Шифахана. Гүр. Роза. Лар. Ҡултамға. Маҡтансыҡ. Идеал. "Сәсмәүер". Донъя. Улъя. Суҡмар. Ашҡаҙар. Мәҡәлә. Металл. Кәрәсин. Корд. Институт. Сафина. Европа. Навага. Аҙна. **Вертикаль буйынса:** Грим. Ғорурлыҡ. Ноҡот. Реалия. Ифтар. Урал. Олос. Рада. Бараба. Ҡалъя. Аккордеон. Осмот. Радио. Ректор. Груһ. Сара. Аһәң. Умыртҡа. Фиҙа. Хризантема. Ҡорт. Тормош. Ҡорос. Транса. Ижау. Әфтиәк. Лотос. Ишарат. Мәхшәр. Алиһә. Алым. Үкенес. Ашхана. Раввин.

*ХОККЕЙ*

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" НИҢӘ ОТОЛДО?

**Былтыр "Салауат Юлаев" һәм "Аҡ Барс"командалары шулай уҡ плей-оффта сирек финалда көс һынашты. Юлаевсылар аҡ барстарҙы, 5 тапҡыр осрашыуҙа 4:1 иҫәбе менән еңде. Быйыл тарих йәнә ҡабатланды. Юлаевсылар һәм аҡ барстар үҙ-ара 6 тапҡыр осрашты. "Салауат Юлаев" 2:4 иҫәбе менән отолдо.**

"Салауат Юлаев" командаһының ниңә отолғанын берике һүҙ менән генә аңлатыу мөмкин түгел, еңелеү сәбәптәре бихисап. Иң төп сәбәптәрҙең береһе: Гагарин кубогын яулап алғандан һуң, хоккей клубы етәкселеге менән уйынсылар араһында низағ килеп сыҡты. Чемпионатта еңгән өсөн тейешле премия аҡсаларын түләү һуҙылды, аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡты. Һөҙөмтәлә, иң яҡшы уйынсыларҙың бер-нисәүһе команданы ҡалдырҙы. Иң яҡшы һаҡсы Владимир Антипов Силәбегә "Трактор"ға китте. Ә Патрик Торесен Санкт-Петербургтың "СКА" командаһын һайланы. "Салауат Юлаев" хоккей клубы етәкселәре киткән уйынсылар урынына лайыҡлы кандидаттар таба алманы. Баш тренер Вячеслав Быков шулай уҡ команданы ҡалдырҙы. Унын урынына Сергей Михалев саҡырылды. Яңы баш тренер Александр Радулов кеүек иң яҡшы уйынсылар менән уртаҡ тел таба алманы, улар араһында низағ килеп сыҡты. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне: "Салауат Юлаев" яңы миҙгелде бик насар башланы. Октябрь айында бер-бер артлы еңелде лә еңелде. Көнсығыш конференцияла ғәмәлдәге чемпион иң һуңғы урынға хәтлем тәгәрәне.

Клуб етәкселеге баш тренер Сергей Михалевты алмаштырырға мәжбүр булды. Юлаевсылар араһында татыулыҡтың юҡҡа сығыуына төп сәбәпсе Максим Сушинский коллективтан сығарылды. Ул Магнитогорск ҡалаһының "Металлург" хоккей клубына китте. Бынан һуң "Салауат Юлаев" командаһының яңы тренеры Венер Сафин көрсөк соҡоронан сығыу өсөн бик күп көс һалды һәм команданың Көнсығыш конференцияла 2-се урынға күтәрелеүенә булышлыҡ итте. Әммә команда плей-оффҡа етер алдынан бер-бер артлы 3 тапҡыр еңелде, 5-се урынға төшөп ҡалды. "Салауат Юлаев" уйынсыларының плей-оффҡа көстәрен һаҡлап ҡалырға тырышыуы һөҙөмтәһе булды буғай был.

Әйтеүебеҙсә, "Салауат Юлаев" былтырғы кеүек сирек финалда "Аҡ Барс" менән көс һынашты. "Салауат Юлаев" сирек финалдың беренсе һәм икенсе уйындарын Ҡаҙанда үткәрҙе. Беренсе матчта юлаевсылар "Аҡ Барс"ты 3:0 иҫәбе менән ҡыйратты. Икенсе осрашыуҙа өҫтәмә ваҡытта ғына еңелде. Икенсе матч юлаевсылар өсөн бик уңышлы башланғайны. Ул тәүҙән үк алға сыҡты. Әммә матч тамамланыр алдынан Александр Свитов уйын ҡағиҙәһен тупаҫ боҙған өсөн артабан уйнауҙан мәхрүм ителде. Етмәһә, команда 5 минут аҙсылыҡта уйнарға мәжбүр булды. Юлаевсыларҙың икенсе матчты еңеүгәсә алып барырға көсө етмәне. "Аҡ Барс"тың өлкән тренеры В. Крикунов икенсе матчҡа команданы бик яҡшы әҙерләгәйне, звеноларҙы үҙгәртеп ҡорғайны. Ә Венер Сафин, киреһенсә, иң яҡшы һөжүмсе Сергей Зиновьевты, күнекмәләргә һуңлап килгән өсөн, уйынға сығарманы. Өҫтәүенә, юлаевсыларҙың ҡапҡасыһы Эрик Эрсберг ҡапҡаны бик үк яҡшы һаҡламаны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**"Салауат Юлаев" Гагарин кубогы өсөн артабанғы көрәштән төшөп ҡалды. "Салауат Юлаев" хоккей клубы етәкселегенә ике миҙгел араһында булған хатаны ҡабатламау өсөн эшлекле, һөҙөмтәле саралар күрергә кәрәк буласаҡ.**

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

*ҮӘТ ӘЙ!*

# ЭШ ҺӨҘӨМТӘҺЕ...
## тартыуға ла бәйле

**Рәсәйлеләргә эш урынында тәмәке тартҡан өсөн эштән бушатыу һәм штраф менән янайҙар. Эш биреүселәрҙең 60 проценты хеҙмәткәрҙәрен тәмәке ҡулланыуҙан баш тартырға мәжбүр итергә тырыша. Ғәмәлдә иһә, офистарҙа эшләүселәрҙең барыһы ла тиерлек үҙе теләп төтөн йота. Рәсәйҙә 44 миллион кеше - ил халҡының өстән бер өлөшө һәм хеҙмәткә яраҡлыларҙың яртыһынан күберәге никотинһыҙ йәшәй алмай. Был РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 2010 йылғы мәғлүмәттәренән алынған. Ә эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәрен алама ғәҙәттәрҙән аралар өсөн ниндәй ысулдар ҡуллана икән?**

**Бинала тартыуҙы тыйыу.** Юридик күҙлектән ҡарағанда, етәксе эш урынында хеҙмәткәрҙәре сәләмәтлеген һаҡлау өсөн бөтә шарттар булдырырға тейеш. Әммә тәмәке тартыу урыны булдырыу был исемлеккә инмәй, шуға күрә эш биреүсенең ошо мәсьәләлә пассивлығы аңлашыла. Компанияларҙың 34 проценты шулай эшләй ҙә инде. Тәмәке тартыу кеүек алама ғәҙәт хеҙмәткәрҙең иммунитетына кире йоғонто яһай, шул сәбәпле улар йыш ауырый һәм эш һөҙөмтәлелеге түбәнәйә. Ғәҙәттә, тәмәкеселәр махсус тартыу урыны булмау сәбәпле төтәтеүен ташламай, ә берҙән-бер мөмкинлеккә мөрәжәғәт итә - урамға сыға. Һөҙөмтәлә ҡышын кейенмәй, еңелсә генә сығып, улар йышыраҡ сирләй, шулай уҡ лифт менән унда-бында йөрөү арҡаһында файҙалы эш ваҡыты сарыф ителә. Ә эш биреүселәрҙең 11 проценты хеҙмәткәрҙәрҙең тәмәке тартыуға киткән һәр минутын контроллэй.

**Эштән ебәреү.** Мәскәүҙәге бер инженер компанияһында күпләп эштән ебәреү процесы саҡ-саҡ тормошҡа ашмай ҡалған. Әммә был көрсөккә бәйле түгел. Бары тик етәксе хеҙмәткәрҙәренең көнөнә күпме ваҡытын тәмәке тартыуға сарыф итеүен иҫәпләргә була. Көнөнә бер сәғәт тә 10 минут самаһы килеп сыға. Асыуланған начальник тәмәке тартыусыларҙың барыһын да эштән ебәрергә була. Әммә был аҙымдан уны эшселәрҙең тәмәке тартҡанда эш мәсьәләләрен хәл итеүе генә ҡотҡарып ҡалған.

Тағы бер яңылыҡ - эшкә алыуҙан баш тартыу. Ҡайһы бер эш биреүсе вакансиялар булғанда эшкә тәмәке тартмаған хеҙмәткәрҙе алырға әҙер булыуын күрһәтә.

**Штрафтар.** Эш ваҡытын тәмәке тартыуға исраф иткән хеҙмәткәрҙәр өсөн компанияларҙың 7 проценты штраф билдәләй. Был, нигеҙҙә, премияны ҡырҡыу тип атала, сөнки Хеҙмәт кодексы буйынса штрафтар тыйылған. Тәү ҡарашҡа был хеҙмәткәрҙең хоҡуғын ҡыҫыуға килтерә һәм үҙ хоҡуғынды яҡлау өсөн судҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин. Әммә хәҙер донъя тренды тәмәке тартыуға ҡаршы йөҙ борған саҡта хатта иң либераль һаналған Европа судтары ла тәмәке тартҡан хеҙмәткәрҙе дискриминациялауҙы танырға теләмәй. Рәсәй судтары тураһында әйтеп торорға ла түгел.

Әйткәндәй, эш урынында, офиста тәмәке тартыу тыйылған илдәр: Бельгия, Бразилия, Бөйөк Британия, Германия, Греция, Мысыр, Һиндостан, Испания, Ирландия, Италия, Ҡытай, Куба, Латвия, Норвегия, АҠШ, Төркиә, Украина, Франция, Хорватия, Черногория, Швеция, Эстония, Япония.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*АФАРИН!*



# СӘХНӘЛӘ УЙНАЙЫМ...

## тормошта йәшәйем

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры асылғандан алып ошо театр тамашасыһына тоғро хеҙмәт итеүсе Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Мәғәфүр УСМАНОВты уңышлы сәхнә оҫтаһы итеп беләбеҙ. Үҙенең ижади эшмәкәрлеге осоронда ул донъя драматургик репертуарының төрлө жанрҙарында сәхнә әҫәрҙәренең нескәлеген яҡшы тойоп, уны үҙенең геройҙарында сағылдыра алған һәләтле актер итеп танытты. Форсаттан файҙаланып, ошо көндәрҙә Александр Вампилов әҫәре буйынса ҡуйыласаҡ "Өлкән улым" тип аталған яңы спектакль өҫтөндә эшләүсе актерға ике һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Мәғәфүр Мәхмүт улы, театр һөйөүселәр Һеҙҙе ниндәй ролдәрегеҙ аша таный?**

- Был һорауға аныҡ ҡына яуап биреүе лә ауыр. Беренсе тапҡыр профессиональ сәхнәгә баҫҡандан алып бөгөнгө көнгә тиклем күп һыуҙар аҡҡан, алтмышҡа яҡын роль уйналған. Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлағандан һуң, 1987 йылда, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт драма театрына эшкә киткәйнем, унда төрлө ролдәрҙе башҡарырға тура килде. Был театр миңә гастролдәргә йөрөгәндә халыҡ менән тығыҙыраҡ аралашыу, төрлө характерҙар өйрәнеү мөмкинлеге бирҙе, тип уйлайым. Баш ҡала иһә Йәш тамашасылар театры булараҡ асылған, хәҙер инде Милли йәштәр театры тип йөрөтөлгән театр менән бергә үҫтем. Тамашасы мине кем тип таныйҙыр, әммә минең өсөн геройҙарымдың һәр береһе яҡын, һәр береһе үҙемдеке генә. З. Биишеваның "Мөхәббәт һәм нәфрәт"ендә - Юламан ҡарт, Ф. Бүләковтың "Йөрәктәрҙә ҡалған эҙҙәр"ендә - Хызыр Ильяс, М. Кәримдең "Салауат"ында - Юлай Аҙналин, "Йәйәүле Мәхмүт"тә -Мәхмүт, "Йәләлетдин атай"ҙа - Йәләлетдин, "Ҡыҙ урлау"ҙа - Әжмәғол, Т. Ғарипованың "Ғилмияза"һында - Бикбау, Т. Миңнуллиндың "Диләфрүзгә дүрт кейәү" музыкаль комедияһында - Ғәлим, был ролдәрҙең һәр ҡайһыһын яратып уйнайым. Актер өсөн ролдең ҙуры-бәләкәйе булмайҙыр ул, сөнки һин уларҙың һәр береһен йөрәгеңдән үткәреп эшләйһең, уның менән бергә шатланаһың, ҡайғыраһың, ғүмереңдең бер осорон улар менән йәшәйһең.

Беҙҙең театр балалар өсөн дә спектаклдәрҙе күп ҡуя. Шуға ла төрлө йәнлектәр булып уйнарға тура килә, мәҫәлән, Р. Ураҡсинаның "Сыңҡылдаҡ себен" әкиәтендә мин Ҡырмыҫҡа ролен башҡарам. Оло тамашасы гел генә тәнҡит күҙлегенән ҡараһа, балалар үҙҙәренең ихласлығы менән алдыра, улар һиненң уйнауыңа шул тиклем ышана.

**➔ Тормошта ла Һеҙ артисмы?**

- Бөйөк классиктың "Тормош - ул театр, беҙ унда - актерҙар" тигән ҡанатлы һүҙҙәре бар-барлығын, әммә тормош менән сәхнә - икеһе ике төрлө нәмә. Арабыҙҙа гел актер булып йәшәгән кешеләр бар, тик уларҙың ихласлығына ышанып буламы икән һуң? Мин ышанмайым. Сәхнә хәрәкәттәре менән атлап йөрөүсе, пафослы һүҙҙәр һөйләүсе кеше тормошта ла уйнап маташа. Сәхнәләге уйын, тәү сиратта, кешене уйландырыу һәм, әлбиттә, уны тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Ә тормоштағы уйындың маҡсаты кешене яңылыштырыуға ҡоролған булып сыға. Кеше кеше булып ҡалырға, тормош ҡуйған һынауҙарҙа алдаҡ менән яманды, мөхәббәт менән нәфрәтте, ихласлыҡ менән ялғанды айыра белергә тейеш. Минең бенефисымда уйналасаҡ яңы спектаклдә һүҙ тормоштағы тап ошо ҡиммәттәр һәм үҙенсәлектәр тураһында барасаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Намыҫ, ғәҙеллек тойғоларын тәрбиәләү, изгелек һәм мәрхәмәтлек - былар барыһы ла А. Вампилов әҫәрҙәренең төп мотивы булып тора. Изгелекле һәм ғәҙел геройҙары менән халыҡ һөйөүен яулау бәхетенә өлгәшкән халыҡ артисының юбилейына бушҡа ғына тап ошо авторҙың әҫәре һайланмағандыр, моғайын. Быны ысынлап та шулай булыуын үҙ күҙҙәре менән күрергә теләүселәрҙе Милли йәштәр театры 21, 22 март "Өлкән улым" спектакленә саҡыра.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ЭС ҠАҪТАҺЫ ЭСЕНДӘ

**"Киске Өфө" гәзитен күптән алдырып уҡыйым. Уҡытыусы булараҡ, гәзиттә балалар тәрбиәһенә ҡағылышлы фәһемле, файҙалы мәғлүмәттәр күп булыуы оҡшай. "Әсәйем лөғәте" рубрикаһындағы онтолған, хәтерҙән юйылған, телдән төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе гел уҡып барам, отоп алам. Үҙем дә беҙҙең яҡ һөйләшендә ҡулланылған, ҡәйнәмдән, ололарҙан ишетеп, яҙып алынған һүҙҙәрҙе тәҡдим итергә булдым.**

**Тапшауыр** - берәй кәрәкмәгән әйберҙе ҡат-ҡат һорашыу.
**Салдыраяҡ** - кәлдер-көлдөр итеп, үҙ аяғына тышалып йөрөгән кеше.
**Сағараҡкүҙ** - һәр нәмәгә үтә ҡарап, күҙе менән йота яҙып йөрөүсе.
**Әүхәт** - олоғайып, донъя көтөүгә кәр ҡайтыу.
**Иштаһа** - яратып, теләп ашауға ҡарата әйтелә.
**Шипан** - дуҫ булып йөрөп, кеше араһын бутаусы.
**Сәрмәйгән** - ҙур ҡорһаҡлы ирҙәргә ҡарата әйтелә.
**Ҡылйыуғыс** - юхалыҡтың сигенә сыҡҡан кеше.
**Һаҡарат** - һүгенеп һөйләшеү.
**Бөхөл** - "Бер нәмәм дә юҡ!" тип бөлөнөп ултырыу.
**Шағараҡ** - уйын-көлкө яратыусы.
**Улъя** - ҡулға мал төшөү.
**Иждиһат** - берәй эшкә бик ҡыҙығып, ниәт итеп тотоноу.
**Алтмышаяҡ** - ауыл ҡыҙырып, ен шикелле йөрөү.
**Аранауыҙ** - эсенә һыймай, булған хәбәрҙе һөйләп йөрөүсе.
**Йылпы-йылмаяҡ** - кешенең күңеленә инеп, эс серен алыусы.
**Кәмһәнә** - таныш түгел кеше.
**Утапшы** - ни етте, шуны кейеп йөрөү.
**Мәреү** - ҡулдан көс ҡайтыу.
**Ғуж** - ризыҡ айырмай, туймаҫтай булып ашау.
**Һәптән** - урам ҡыҙырыусы ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә.
**Денеш** - телен ҡырҡып алһаң да, һүҙе сыҡмаҫ кеше.
**Яндырай** - янып-көйөп, өтәләнеп йөрөгән кеше.
**Шардыуан** - эсе-тышы бер, кенә тотмаусы кеше.
**Мәрҙәс** - ир кешеләргә ҡарата әйтелгән маҡтау һүҙе.
**Ирәүән** - хыялға бирелеп донъяһын онотоусы.
**Бошман** - бер нәмәгә лә бошона белмәүсе әҙәм.
**Ирҙәүкә** - ҡылыҡ-фиғеле менән ир-атҡа оҡшаған ҡатын-ҡыҙ.
**Соҡорош** - булып та, кешегә йомош бирмәгән кеше.
**Тулы тубал** - ғаиләһе менән аҡылға еңел кешеләр.
**Олҡот** - ҡәнәғәт була белмәгән әҙәмгә ҡарата әйтелә.
**Ҡаҫта** - күңелендә кер йөрөтөүсе, тиҙәр.
**Ҡушкендек** - ата-әсәһенән бер аҙым ҡалмаған бала.
**Бөрәләү** - яҡындан яҡшылап күрмәгән кеше.
**Ерektәртә** - үсегеп барған кеше.

**Ишбикә МАННАПОВА.**
**Баймаҡ районы Һаҡмар ауылы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР БАРҘА...

## ҡатын алға сыҡмаһын

Ат барҙа бейә сапмаһын, ир барҙа ҡатын алға сыҡмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Эмансипация -ул ҡатын-ҡыҙҙың етешһеҙлектәренә ирҙәрҙеке лә ҡушылғанда була торған хәл-торош.

**(Аркадий Давидович).**

Хоҙай ҡатын-ҡыҙҙы ирҙәр ратһын өсөн - матур итеп, ул үҙе ирҙәрҙе яратһын өсөн йүләр итеп яралтҡан.

**(Фаина Раневская).**

Ир кеше, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙға ғына түгел, уның туғандарына ла өйләнә.

**(Ван Гог).**

Ир менән ҡатын айырым-айырым йәшәһә... бәхетле ғаиләләр күберәк булыр ине.

**(Фридрих Ницше).**

Һине бер ҡайҙа бер кем дә көтөп тормай, һәр ваҡыт һәр нәмәне үҙең менән килтерергә кәрәк.

**(Эрих Ремарк).**

Йәш табиптан һәм ҡарт парикмахерҙан һаҡлан.

**(Бенджамин Франклин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Был Остаздан өйрәнергә, һабаҡ алырға донъяның төрлө илдәренән шәкерттәр йыйыла. Бына бер саҡ шәкерттәре Остазға уғрылыҡ менән шөғөлләнгән бер шәкертте фашлауҙары тураһында хәбәр килтерә һәм уны уларҙың араһынан ҡыуыуҙы һорай. Әммә Остаз был хәбәргә иғтибар итмәй. Һуңыраҡ баяғы уғры шәкерттең тағы ла бер ҡырын эше асыла, әммә Остаз тағы ла был хәлде иғтибарһыҙ ҡалдыра. Шәкерттәр Остаздарының был битарафлығына бик ныҡ аптырай һәм асыулана. Улар Остазға: "Әгәр ҙә был уғры шәкертте уҡыуҙан ҡыумаһағыҙ, беҙ күмәкләп һеҙҙең уҡыу йортон ташлап китергә мәжбүр буласаҡбыҙ", - тип хат яҙалар. Хатты уҡығас, Остаз шәкерттәрҙең барыһын да бергә йыя һәм былай ти:**

**- Һеҙ барығыҙ ҙа аҡыллыһығыҙ. Һеҙ нимә насар, нимә яҡшы икәнен айыра беләһегеҙ. Шуға ла һеҙ үҙегеҙ теләгән башҡа уҡыу йортона китә, уҡый алаһығыҙ. Ләкин был хәҡиҡәт юлынан яҙған шәкерт яҡшыны ямандан айыра белмәй. Уны был белемгә мин өйрәтмәһәм, кем өйрәтер? Һеҙ икенсе уҡыу йортона киткәндә лә был шәкерт бында ҡаласаҡ...**

**Уғры шәкерттең күҙҙәренә йәш тығыла. Урлашыу теләге шунда уҡ юҡҡа сыға..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 987